ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 февраль (шаҡай) 2019

№6 (840)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Беренсе Президент тураһында



2-3

Тоғролоҡ өлгөһө



7

Эскелеккә ҡаршы оло яу



8-9

Бүренең аҡыллылығы...



12

ТВ-программа 14

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә февралдә һәм мартта 2019 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда яҙылыу иғлан ителдә. 615 һумға әле үк яҙылып ҡуйһағыҙ, оторһоғоҙ. Май айынан хаҡтар бер аҙ юғарыраҡ буласаҡ. Ә 2019 йылдың тәүге яртыһы өсөн иһә 18 февралгә тиклем яҙылһағыҙ (дүрт айға - 404,64 һум) гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлаясаҡһығыҙ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Етәксе һүҙе:

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий ХӘБИРОВ "Взлетай!" ("Юғары ос!") тип аталған беренсе мәктәп форумында ҡатнашып, ил Президенты тәҡдим иткән милли проекттарҙың иң мөһимдәрҙең береһе - "Мәғариф" милли проекты буйынса үҙ фекерҙәрен белдерҙе.**

"2024 йылға беҙҙең мәғариф сифаты буйынса алдынғы ун илдең береһе иҫәпләнергә тейеш, - тине Радий Фәрит улы.- Ҡатмарлы мәсьәлә был, ләкин бөгөнгө форумда мин һүҙҙе бер аҙ икенсе юҫыҡта - беҙҙең балалар, мәктәп уҡыусылары тураһында алып барырға теләр инем. Иң беренсе шундай тәҡдим бар: әйҙәгеҙ, бергәләп уйлашайыҡ, бәлки, беҙгә биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күсергә кәрәктер? Был хаҡта беҙ оҙаҡ һәм ныҡлы уйландыҡ. Ниндәй улар - беҙҙең бөгөнгө балалар, мәктәп уҡыусылары? Ярайһы хәлдән тайған, йонсоған балалар, һәм беҙ уларға аҙнаһына алты көн буйына белем бирергә тырышабыҙ. Шул уҡ ваҡытта беҙ балаларыбыҙҙың мәктәптән сәләмәт, бәхетле, әхлаҡи матур кешеләр булып сығыуын теләйбеҙ. Шуға күрә мин "биш көнлөк"кә күсергә тәҡдим итәм дә. Шул осраҡта 32 шәмбе бушаясаҡ. Ай һайын шуларҙан берәр шәмбене алһаҡ, йөмғеһе һигеҙ шәмбе - мәктәптеке иҫәпләнә. Шул көндәрҙе ай һайын системалы эшкә егергә була. Әйтәйек, сентябрҙең тәүге шәмбеһе - мәктәп буйынса спартакиадаға арнала. Олоһо-кеһе - бөтә бала берҙәм рәүештә кросс уҙыштарына, башҡа төрлө спорт ярыштарына сыға. Ҙурҙары кескәйҙәрҙе ҡарап алып йөрөтә - был берҙәм мәктәп йәмғиәте булдырырға ярҙам итәсәк, тип уйлайым. Икенсе шәмбе тыуған яҡты өйрәнеүгә бағышланһа, өсөнсөһө республикабыҙҙа йәшәүсе халыҡтар мәҙәниәтенә арнала. Бөгөн балалар агрессив, көнәркәшлек (конкурентный) һәм ҡатмарлы донъяла йәшәй. Шуға ла мәктәпте тамамлап сыҡҡандан һуң, айырыуса ауыл мәктәбен бөтөрөүселәр, ҙур донъяға аяҡ баҫҡанда юғалып, баҙап ҡалмаһындар өсөн уларға ниндәйҙер көнәркәшлек өҫтөнлөктәр, мөмкинлек бирергә кәрәк, тигән фекерҙәбеҙ. Бының өсөн мәктәптәрҙә "Үргә ос!" тигән программа индерергә тәҡдим итәбеҙ. Ул үҙ эсенә балаларға төрлө һөнәри күнекмәләр биреп сығарыуҙы күҙҙә тота: машина йөрөтөргә өйрәнеп, хоҡуҡ таныҡлығы алыу, һәр төрлө уҡыу-етештереү комбинаттарында практика үтеү, дөрөҫ итеп сит һәм тыуған телдәрҙә һөйләшергә, шахмат уйнарға, вальс бейергә өйрәнеү һәм башҡалар... Республика Хөкүмәте быңдай сараларға һәр яҡлап ярҙам ҡулы һуҙырға, шул иҫәптән, финанс йәһәтенән тәьмин итергә әҙер.

Тағы бер мәсьәлә. Әйҙәгеҙ, һәләтле балалар өсөн көрәшәйек. Имтиханда 100 балл алыусы уҡыусыға ул уҡыған мәктәптең директоры ла, уҡытыусылар коллективы ла, хатта был райондың хакимиәт башлығына тиклем ошо баланы күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тейеш, тип уйлайым. Теләһә, әйҙә ул Мәскәү, Санкт-Петербург, йә башҡа берәй ҡалаға уҡырға инһен, ә беҙҙең бурыс - тейешле ҡыҙыҡһындырыу, дәртләндереү стимулдары булдырып, вуз тамамлағандан һуң ундай балаларҙың тыуған республикабыҙға әйләнеп ҡайтыуын, кәрәкле белгес булып эшләүен тәьмин итеү.

## Шулай итеп, көн һорауы: "Республика мәктәптәрендә биш көнлөк уҡытыу аҙнаһына күсеү мәсьәләһенә нисек ҡарайһығыҙ?"

***Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы, профессор, педагог:*** Мәктәптәрҙе биш көнлөк уҡытыу системаһына күсереү буйынса Рәсәй кимәлендә бер нисә йыл инде фекер алышыуҙар барһа ла, тәғәйен генә ҡарарға килгәндәре юҡ ине әле. Бөгөн балалар ысынлап та бик ҙур көсөргәнешкә дусар ителә. Был үҙ сиратында уҡыусыларҙың йонсоуына, иғтибары кәмеүенә килтереп, шул арҡала белем алыу һөҙөмтәлелегенә насар тәьҫир итһә, икенсе ҡурҡыныс - йоҡо туймауҙан, дәрестәрҙәге ялҡытҡыс бер төрлөлөктән биҙәреү баланың нервылар системаһы һәм иммунитеты ҡаҡшауға алып килә. Ошо йәһәттән республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың республика мәктәптәрен биш көнлөк уҡытыу тәртибенә күсереү кәрәклеге хаҡындағы тәҡдимен ваҡытлы һәм көнүҙәк мәсьәлә тип ҡабул иттем. Күп йылдар балалар уҡытҡан һәм ошо өлкәне өйрәнеп, ғилми хеҙмәттәр яҙған педагог булараҡ, тураһын әйтәм: бөгөн мәктәпкә ҡыуанып, шатланып барған бала юҡ, тиһәң дә хата булмаҫ. Һүҙ бында һәләтле, белемгә ынтылып торған бер нисәү хаҡында бармай, әлбиттә, ә күпселек хаҡында. Икенсенән, көҙҙән алып яҙға тиклем балалар бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға тиклем уҡырға мәжбүр. Ҡайтып, дәрес әҙерләгәнсе, йоҡларға ла ваҡыт етә. Һөҙөмтәлә уларҙың өйҙә ата-әсәһе менән аралашыу мөмкинлеге лә бик сикләнгән. Шунан үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: ата-әсә балаһын ҡасан тәрбиәләргә тейеш булып сыға? Беҙ бит, юғиһә, балаға төп тәрбиәне өйҙә ата-әсәһе бирергә тейеш, тип тәкрарлайбыҙ һәм был дөрөҫ тә. Һөҙөмтәлә ата-әсәгә балаһы менән күрешеп, хәл-әхүәл белешергә ни бары бер көн - йәкшәмбе генә тороп ҡала. Ул көн иһә беҙҙең ғаиләләрҙә "ҙур йыйыштырыу, йыуыу, йыуыныу" кеүек эштәргә бағышлана, ә бала урамда йә онлайн донъяла сәфәр гиҙә. Дәрестән бушатылған шәмбе, шулай итеп, иң тәүҙә балаға һәм ата-әсәгә файҙаға булыуын теләгем килә минең. Унан балалар был көндө өҫтәмә белем туплауға, күңел донъяһын байытыуға бағышлай ала бит. Имтиханға әҙерләнеү, әҙәби әҫәрҙәр уҡыу, спорт күнекмәләренә, ижади секцияларға йөрөү мөмкинлеге лә тыуа.

**(Дауамы 3-сө биттә).**



12+

✓ *Уның Рәсәйҙә күренекле сәйәсмәндәр рәтенә инеүе лә Башҡортостандың бер ниндәй тышҡы факторҙарҙың йоғонтоһона бирешмәгән тотороҡло, тыныс һәм үҫеш мөмкинлектәрен һаҡлап ҡала алған төбәк булып баһаланыуы менән бәйле.*



ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ

**Башҡортостан Республикаһының 1-се Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа 85 йәш тулды. Республикабыҙ һәм илебеҙ тормошоноң яңы осоро уның исеменә бәйле, өҫтәүенә, был датаның Башҡортостан Республикаһы автономияһының бер быуатлыҡ юбилейына тура килеүе икеләтә әһәмиәткә эйә. Нимә генә тимә, тап Мортаза Ғөбәйҙулла улы республикабыҙҙы етәкләгән осорҙа тормошобоҙҙа быға саҡлы тарихта күрелмәгән ҡаҙаныштар солғанышында йәшәнек.**

## АТАЙЫМДАЙ КҮРӘМ...

Мортаза Ғөбәйҙулла улын мин һәр ваҡыт атайыма оҡшатам. Был хаҡта яҙып та сыҡҡаным булды. 1996 йылда тыуған ауылым Буранбайҙа яңы мәктәп файҙаланыуға тапшырылды. Уны асыуға Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов та килде. Мин унда ҡайта алманым, ә бына тантанала ҡатнашыусылар атайым менән республика етәксеһенең нисек аралашыуы хаҡында мәҙәк итеп һөйләне. Хәҙер ҙә иҫкә алалар. Мортаза Ғөбәйҙулла улы ауылға килеп төшөү менән атайым уның янына барған һәм ҡунаҡ ауылдан сығып киткәнсе эргәһенән китмәгән. Ғүмере буйына колхозда механизатор, бригадир булып эшләгән кеше уға нимә һөйләй ала инде, тиһегеҙме? Иҫләүҙәренсә, атайым уға нисек итеп колхоздарҙы, ундағы хужалыҡ итеү ысулдарын һаҡлап ҡалыу тураһында кәңәштәр биргән. Президент уны иғтибар менән тыңлаған, һорауҙар биргән, үҙе лә ниндәйҙер кәңәштәр әйткән, ҡыҫҡаһы, уларҙың араһында йәнле аралашыу булған.

Атайым менән республика етәксеһен шундай аралашыу өсөн нимә бәйләне икән? Ысынлап та, бик урынлы һорау. Уйымса, уларҙы берләштереүсе сәбәп хеҙмәткә мөнәсәбәттер тип уйлайым. Ауылдан сыҡҡан ике крәҫтиәнде тағы ла нимә берләштерһен инде. Атайым да, Мортаза Рәхимов та - хеҙмәт, эш кешеләре. Улар, ниндәйҙер эште башҡарырға ниәт итһә, алдына маҡсат ҡуйһа, оҙон-оҙаҡ хәбәр һатыуҙарға бирелеп китмәйенсә, алдына алғанын тормошҡа ашыра башлай торғандарҙан. Эш эшләмәйенсә сыҙай алмай торғандар затынан.

Был йәһәттән Мортаза Рәхимовтың туғаны, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, РСФСР мәктәптәренең һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Хәсән Барлыбай улы Мәжитовтан да дөрөҫөрәк итеп әйтеүсе кешене табыуы ауыр булыр: "Әгәр ҙә уларҙың ғаиләһендә Башҡортостан Президенты булырлыҡ кеше үҫеп сыҡҡан икән, былар барыһы ла хеҙмәткә мөнәсәбәттән киләләр..."

Атайыма оҡшағанһығыҙ, Мортаза Ғөбәйҙулла улы! Атайымдың арабыҙҙа булмауына 9 йыл үтте, ул тормошобоҙҙоң ыңғай юҫыҡҡа боролорона тулы ышаныс менән баҡыйлыҡ сиген үтте. Һеҙҙең кеүек шәхестәребеҙ барында, иншаллаһ, киләсәгебеҙ яҡты булыр! Юбилейығыҙ ҡотло булһын!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

# БЕРЕНСЕ ПРЕЗИДЕНТ ТУРАҺЫНДА



**Меңәр йылдар дауамында тарих аренаһында лайыҡлы урын биләп килгән башҡорт иле XX быуат аҙағында Рәсәй менән бергә сираттағы тарихи һынау алдына ҡуйылды. СССР тип аталған коммунистик империя, күҙ асып йомғансы тигәндәй, ҡомдан төҙөлгән ҡәлғә һымаҡ, тарҡалып юҡҡа сыҡты. Ҡыйралыш, һынылыш йылдары бер ваҡытта ла бәләҡазаһыҙ, юғалтыуҙарһыҙ булмай. Ер йөҙөндә иң ғәҙел йәмғиәт төҙөйбөҙ, тип хыялланған, әммә юлбашсылар тарафынан аяуһыҙ алдауға дусар булған халыҡ сабыйҙарса инанған иллюзор ҡиммәттәренән яҙғас, баҙап ҡалды. Бәғзе берәүҙәр, күнегелгән эшенән, түрәләргә роботтарса буйһоноп йәшәүҙән арынғас, эскегә һабышты, урамдарҙа асарбаҡтар ишәйҙе, дөйөм байлыҡты ҡулына төшөрә алған йылғыр әҙәмдәр, бандиттар яллап, бер-береһенең йәнен ҡыя башланы... Әммә яңырыу юлына алып сығасаҡ тәүге аҙымдар шул болғаныш ерлегендә яһалды, рухи булмышыбыҙҙы тергеҙеүгә ынтылыш та тап шул саҡта көсәйгәндән-көсәйә барҙы.**

Яҙмыш Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовты ошо ҡатмарлы, әле алда ниҙәр булырын һис бер күрәҙәсе лә әйтеп бирә алмаған ваҡытта Ил башы дәрәжәһенә күтәрҙе, юлбашсылар иңенә генә тәғәйен ил йөгөн уға тапшырҙы. 1990 йылда ул вазифаһы буйынса республикабыҙҙың Юғары Советы рәйесе булһа, халыҡ уны тиҙ арала үҙ рәйесе итеп таныны. Башҡортостан халҡының уны бер нисә тапҡыр рәттән Президент вазифаһына һайлауын башҡаса аңлатып та булмайҙыр. Беҙҙә "Ағас - емеше, кеше эше менән таныла", тиҙәр бит. Мортаза Рәхимовтың иң маҡтаулы сифаттары ла тынғыһыҙ эшмәкәрлек, эшһөйәрлек һәм булдыҡлылыҡтан ғибәрәттер. Уның Рәсәйҙә иң күренекле сәйәсмәндәр рәтенә инеүе лә Башҡортостандың уның идаралығы аҫтында бер ниндәй тышҡы факторҙарҙың йоғонтоһона бирешмәгән тотороҡло, тыныс һәм үҫеш мөмкинлектәрен һаҡлап ҡала алған төбәк булып баһаланыуы менән бәйле.

Иң мөһиме, иҡтисади түңкәрелеш осоро ауырлыҡтарын Башҡортостан халыҡтары күпкә еңелерәк үтеп сыҡты, самаһыҙ юғалтыуҙарға, емерелеү процестарына юл ҡуйылманы. Ул йылдарҙа үҙаллылыҡ өсөн көрәш башында ил башлығы торһа, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә йәшәгән ватандаштарыбыҙ кеүек, бөлгөнлөк касафатын ныҡыраҡ татырға тура килер ине. Улай ғына ла түгел, республика иҡтисадының бар мөмкинлектәре, көндәлек ихтыяждарҙы үтәүҙән тыш, төҙөү-ҡороу эштәренә йүнәлтелде. Ул осорҙа был, бәлки, ниндәйҙер бер парадокс булып та тойолғандыр: нисек инде ул, бар ерҙә совет осоронан ҡалған милектең тиҙ арала үҙләштерелеп, күп сығымдар талап ителгәндәре әләф-тәләф ителгән бер заманда Башҡортостанда яңы төҙөлөштәр башланыуы мөмкин? Әммә был ысынбарлыҡта шулай ине, һәм

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*



*Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы статусында республиканың беренсе Президентын 85 йәшлек юбилейы менән ҡотланы. "Мин уны үҙемдең уҡытыусым тип иҫәпләнем һәм әле лә шулай иҫәпләүем хаҡында бик күп тапҡырҙар әйткәнем булды. Иң мөһиме, унан ысын күңелдән халыҡ мәнфәғәттәре менән йәшәргә өйрәндем. Тап ошо сифат Башҡортостандың беренсе Президентына республиканы һынылышлы 90-сы йылдарҙан ауыр киселештәрһеҙ алып сығырға мөмкинлек бирҙе. Мортаза Ғөбәйҙулла улын ихлас йөрәктән юбилейы менән ҡотлайым һәм ныҡлы һаулыҡ, ғаилә именлеге теләйем!" - тип яҙҙы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә төбәк етәксеһе.Матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, Радий Хәбиров Мортаза Рәхимовҡа әүҙем хәйриә, остазлыҡ эшмәкәрлеге, республика үҫешенә битараф ҡалмағаны өсөн Башҡортостан Республикаһының Почет грамотаһын тапшырҙы.*

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров предприятиеның етештереү цехтарын ҡараны. Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе Рәсәйҙә авиация двигателдәрен етештереүсе иң ҙур үҙәк булып тора. 2018 йылда Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһендә бында импортты алыштырыу программаһы буйынса ВК-2500 двигателе компоненттарын сығарыу менән шөғөлләнгән 185-се етештереү-технология үҙәген ойоштороу эштәре тамамланды. Был компоненттар вертолет двигателдәре өсөн файҙаланыласаҡ.

✓ Ауыл уҡытыусыларына ярҙам күрһәтеү өсөн республика бюджетынан 60 миллион һум бүленә. Йыл йомғаҡтары буйынса улар араһынан иң яҡшы 100 уҡытыусыға грант рәүешендә 600 меңәр һум аҡса тапшырыу күҙаллана. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров бөгөн Өфөлә барған беренсе мәктәп мәғарифы форумында ошо турала белдерҙе.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Хеҙмәт өлкәһе киләсәге" халыҡ-ара форумының пленар ултырышында ҡатнашты. Башҡортостан етәксеһе республиканың әле мотлаҡ медицина страховкалауы тураһындағы законға үҙгәрештәр индерергә йыйыныуы тураһында һөйләне. Унда хеҙмәткәрҙәрҙең һаулығын яҡшыраҡ хәстәрләһендәр өсөн эш биреүселәрҙе дәртләндереү механизмын әҙерләргә тәҡдим ителә.

✓ Конкурс комиссияһы "Рәсәй лидерҙары" Бөтә Рәсәй идарасылар конкурсы финалсыларын һайлап алыуҙы тамамланы. Йомғаҡлау һынауҙарына Башҡортостандан алты вәкил: Тимур Әхмәҙинуров ("Башнефть-Розница" йәмғиәте), Азат Ахунов ("Стафф" кадрҙар агентлығы), Илгиз Байморатов ("Финэкспертиза-Сеть" йәмғиәте), Дмитрий Денисенко ("Акустические материалы" йәмғиәте), Сергей Решетников ("АНК Башнефть" йәмғиәте), Олег Сурначев ("Ак Барс" Банк) саҡырылды.

✓ Республика маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡыған студенттар һанын 5-15 проценттан 65-70 процентҡа тиклем арттырырға йыйына. Әйтеүҙәренсә, быйыл мәғарифҡа йүнәлтелгән бюджет аҡсаһы 2018 йылда ошо маҡсатҡа, шул иҫәптән йүнәлтмәле белгестәр әҙерләүгә бүленгән аҡсаға ҡарағанда 1,5 тапҡырға күберәк.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ ***Нисәмә мең баланы ата-әсәләре, төрлө фетнәселәрҙең һүҙенә ҡолаҡ һалып, юҡ-барҙан ҡурҡып, шөбһәләнеп, башҡорт теле дәрестәре булмаған мәктәптәргә, кластарға үҙ ҡулдары менән етәкләп алып барып индерҙе...***



уны бер ниндәй ҙә ялған менән юҡҡа сығарып булмаясаҡ.

Бына хәтергә 1993 йыл йыл бисҡә төшә. Йыл буйына тиерлек Мәскәүҙә үҙҙәрен демократ тип атаған сәйәсмәндәр боғаҙға-боғаҙ килеп талаша, власть бүлешә алмай ыҙа сигә, хатта илде граждандар һуғышы упҡынына этәрерҙәй ғәмәлдәр ҡыла. Тап шул ваҡиғаларҙан бер йыл алдараҡ нисек булһа ла көрсөктән сығыр юл табырға тырышҡан ауыл хужалығының коллектив хужалыҡтары Рәсәй Президентының сираттағы авантюристик указы нигеҙендә бөтә ил буйынса юҡҡа сығарыла, бығаса ил ныҡлығын тәьмин итеп килгән эре-эре завод-фабрикалар сит илдәрҙән индерелгән тауар складтарына әйләнә. Ҡайҙа инде ул әҙәмдәрҙә ил ҡайғыһы! Был сәйәсәт 1998 йылда тотош илде банкротлыҡҡа еткереп, хурлыҡлы рәүештә тамамланды. Рәсәй төбәктәрендә меңәрләгән ауылдарҙан, хатта ҡайһы бер ҡала тибындағы ҡасабаларҙан ярым емерек харабалар ғына тороп ҡалды. Ә Башҡортостанда хәлдәр башҡасараҡ булды. Яҙҙарын сәсеү кампанияһын, йәйҙәрен мал аҙығын әҙерләү, ауыл хужалығы биналарын ремонтлау, көҙҙәрен уңыш йыйыу хәстәрҙәре өҫтөнләклө булып ҡала бирҙе, сөнки Башҡортостан Президенты, яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып, күнегелгән колхоз системаһын таркатырға юл ҡуйманы. Әлбиттә, Рәсәйҙә йәшәп, Рәсәй бәләләренән тулыһынса азат булып булмай инде. Ауыл халҡына бөгөн дә көн итеүе бигүк еңелдән түгел, уның киләсәгенә әле лә хәүеф янай. Ярай әле Көнбайыш илдәренең санкцияларына ҡаршы тороу маҡсатында ауыл хужалығына иғтибар арта башланы.

Башҡортостанда Президент идаралығы системаһы урынлаштырылыуының башҡа файҙалы һөҙөмтәләре лә етерлек булды. Мәктәп тәҙәүгә финанс сығанаҡтары бик мул ҡулланылды беҙҙә. Ошо сәйәсәт һөҙөмтәһендә йыл һайын тиҫтәләрсә яңы мәктәптәр төҙөлөп, элеккеләре заманса яңыртылып торҙо. Уйлап ҡараһаң, ошо ғәмәлдәр генә лә ил башлығын ҙурлар сәбәп булып, уны киләсәктә лә хөрмәтләргә ерлек бирәсәк халыҡ иҫтәлеге булып ҡаласаҡ.

Республиканың киләсәгенә нигеҙ булырҙай башҡа файҙалы эштәр ҙә байтаҡ башҡарылды ошо бигүк уңайлы булмаған шарттарҙа. Бынан өс тиҫтә йыл элек төпкөлдәрәк ятҡан ауылдарға ғына түгел, хатта ҡайһы бер эре хужалыҡтары менән дан тотҡан төбәктәргә барып ҡайтыр өсөн халыҡҡа күпме юл ғазаптарын татырға тура килде. Мортаза Ғөбәйҙуллаулы етәкселек иткән осорҙа Башҡортостан территорияһы, бер организмдың бар ағзаларын тоташтырған ҡан тамырҙарылай, матур юл селтәре менән ҡапланды. Шул уҡ ауыл халҡы газ плитәләрен элек ҡалаға барғанда ғына күрһә, тап шул йылдарҙа райондарыбыҙ һәм ауылдарыбыҙ тарафтарына һалынған газ линияларының дөйөм оҙонлоғо меңәр саҡрымдарға етте.

Үҙен ысын кешегә һанаған һәр әҙәм балаһы ерҙә ашарәсер, матур кейенер, кәйефсафа ҡорор өсөн генә йәшәмәй. Кешенең тир түгеп тапҡан ризығынан бигерәк, рухи ғәмәлдәре юғары баһаға лайыҡ. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, халҡыбыҙҙың күпселеге тап матди ҡытлыҡ кисергән көсөргәнешле йылдарҙа рухи байлыҡҡа нығыраҡ ынтылды, телебеҙ, динебеҙ, мәҙәниәтебеҙ менән төплөрәк ҡыҙыҡһына башланы. Бында ил башлығының ошо өлкәгә даими иғтибарын һәм ихлас ярҙам итеүен күрмәмешкә һалышһаҡ, хилаф булыр ине. Башҡортостан ерендә йыл әйләнәһенә мәҙәни конкурстар, фестивалдәр гөрләп уҙҙы, сәнғәт усаҡтары дөрләп ҡабынды, ижади йәш быуын үҫһен өсөн дәүләт кимәлендә саралар күрелде. Башҡорт халҡының мәҙәни мираҫы донъя халыҡтары өсөн дә хәҙер ят нәмә түгел, ә был үҙе бер ҡаҙаныш түгелме ни!

Ил башлығы... Үҙ халҡының мәңгелек хәтерендә ул ниндәй эҙ ҡалдыра, уның киләсәге өсөн ниндәй ғәмәлдәр ҡыла - халыҡ етәксеһен баһалар өсөн ошонан да мөһимерәк башҡа үлсәмдәр юҡтыр. Мортаза Ғөбәйҙулла улы ысынлап та бөйөк эштәр, иң яҡты эҙҙәр ҡалдырҙы Башҡортостан тарихында. Шуға ла бөгөн беҙ уның алдында оло хөрмәт менән баш эйәбеҙ. Юбилейығыҙ ҡотло булһын, хөрмәтле аҡһаҡалыбыҙ!

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# "Республика мәктәптәрендә биш көнлөк уҡытыу аҙнаһына күсеү мәсьәләһенә нисек ҡарайһығыҙ?"

**(Башы 1-се биттә).**

***Наилә НАСИРОВА, Өфө ҡалаһы 111-се гимназияның башҡорт теле уҡытыусыһы:*** Биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күсеү, әлбиттә, изге ниәттәрҙән сығып эшләнә: балалар көсөргәнешле аҙнанан һуң ике көн ял итә, ғаиләһендә ата-әсәһе, туғандары менән аралашыуға йә булмаһа яратҡан шөғөлө менән мәшғүл булырға, ниндәйҙер секцияларға, түңәрәктәргә йөрөргә форсат тыуа. Беҙҙең гимназия әлеге осорҙа тап ана шундай система буйынса эшләй ҙә инде. Әммә... Биш көнлөк уҡыу аҙнаһы хаҡында һүҙ сыҡҡас та баш ҡалабыҙҙың төрлө мәктәптәрендә минең кеүек үк башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында тағы ла ҙур борсолоуҙар башланды: был яңылыҡ тағы ла туған тел дәрестәре ҡыҫҡартылыу иҫәбенә ғәмәлгә ашырылмаҫмы, тигән хафаға ҡалды уҡытыусылар. Был хәлде аңларға була, сөнки шәмбе дәрестәре аҙнаның башҡа көндәренә һәм, ғәҙәттәгесә, мәктәп етәкселеге тарафынан "үгәйһетелеп" ҡаралған фәндәр иҫәбенә күсерелеүе бик ихтимал бит. Мәҫәлән, башҡорт теле дәүләт теле булараҡ аҙнаһына 1 сәғәт ингән мәктәптәр байтаҡ баш ҡалабыҙҙа. Был предмет булараҡ инггән туған тел дәрестәренә лә ҡағылыуы бар. Бәхеткә, былдай хәл мин башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытып йөрөгән 111-се гимназияға ҡағылмаҫ, тип уйлайым, сөнки беҙҙә йылға яҡын инде былай ҙа биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күскәнбеҙ һәм уҡыу фәндәре һәр береһе үҙ урынында, тигәндәй. Ә шулай ҙа башҡа мәктәптәрҙәге башҡорт теле дәрестәре һәм бигерәк тә коллегелерым өсөн борсолам, сөнки уҡыу йылы башындағы сыр-сыу, ығы-зығы онотолмаған әле. Үҙ республикабыҙҙа үҙ туған телебеҙҙе тыныс һәм ижади шарттарҙа, бөтөн көстө һалып уҡытырға мөмкинлек булырмы икән, әллә артабан да үҙ илебеҙҙә үҙ телебеҙҙе йәшәтеү өсөн ягалашырға, көрәшергә, нервыларҙы сарыф итергә тура килерме? Әлбиттә, Башҡортостаныбыҙҙың 100 йыллыҡ данлы юбилейы йылында туған телебеҙҙе артабан да ҡыйыуһытырға баҙнат итмәҫтәр, тип ышанам былай. Ошоға ҡағылышлы тағы бер фекеремде белдергем килә: мәғариф учреждениеларында башҡорт теле дәрестәренең абруйын күтәреү, уға бәйләнмәһендәр өсөн статусын нығытыу башҡорт теле уҡытыусыһының үҙ шәхесенә, үҙ абруйына ла нык бәйле. Әгәр ул дәрестәрен алдынғы методик ысулдарға нигеҙләнеп, ҡыҙыҡтырырлыҡ, йәнле итеп алып бара икән, балалар дәрестәрҙән ҡасыу түгел, бындай уҡытыусының артынан эйәреп йөрөйәсәк. Башҡорт теле уҡытыусыларына эшләгән коллективтарында абруй ҡаҙанырға, ә бының өсөн иһә мәктәп тормошондағы ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнарға, предметы буйынса ҡыҙыҡлы саралар ойоштороға, һәр йәһәттән белемен даими камиллаштырырға кәрәк, тип уйлайым. Уның хатта үҙ-үҙен тотошо, телмәре, хатта кейеменә тиклем тейешле кимәлдә булырға тейеш.

***Илнар АБРАРОВ, эшҡыуар:*** Радий Фәрит улы, һис шикһеҙ, күптән яйға һалыуҙы талап иткән мәсьәләне көн үҙәгенә сығарҙы. Мәктәптәрҙең аҙнаһына алты көн эшләүе, бер яҡтан, балаларға иркенләп ял итергә мөмкинлек бирмәһә, икенсенән, былай ҙа ҡағыҙ мәшәҡәттәренә күмелгән, каникулдарҙа ла яуаплылыҡтан бушатылмаған уҡытыусыларҙы ауыр хәлгә ҡуя ине. Нигәйәт, был көндәрҙә анык ҡарар ҡабул ителде, уҡыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә, педагогтар ҙа иркен тын алғандай булды. Тик белем биреү программалары нисек үҙгәртелер бит әле, күптәрҙе ошо һорау борсоуға һалды. Ниндәйҙер дәрестәрҙе, "артыҡ" тигән мөһөр һуғып, ҡыҫҡарта башларҙармы? Тағы ла башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы, башҡорт балаларына үҙ телен һәм әҙәбиәтен өйрәтеүҙе кәрәкһеҙгә һанарҙармы? Ижтимағи селтәрҙәрҙәге яҙмаларға ҡараһаң, халыҡтың күпселеге әлеге үҙгәрештең эҙемтәләре тураһында уйлап та бирмәй. Биш көнлөккә күсһәк, шул еткән, тигәндәй. Ә бит мәғариф өлкәһенә ҡағылышлы мәсьәләләр һис тә ҡыҙыу баштан хәл ителә торғандарҙан түгел. Республика етәксеһе, халыҡты тыңлап, ҡарарын әйтте. Бынан ары системаны үҙгәрткәндә Мәғариф министрлығының, район-ҡалаларҙағы мәғариф идаралыҡтарының, мәктәп директорҙарының ғына түгел, ата-әсәләрҙең, йәмғәт ойошмаларының да фекерҙәре ентекле өйрәнелер, тип ышанғы килә. Юғиһә, ваҡиғалар ағышының Рөстәм Хәмитов осорондағы һымаҡ булырын көт тә тор. Ул саҡта Башлыҡтың икеләнеүе, барыһына ла ярарға тырышыуы, шул сәбәпле башҡорт телен уҡытыуға ҡарата иғтибарҙың кәмеүе туған телдән һәм әҙәбиәттән белем биреүсе нисәмә мең уҡытыусының эшһеҙ ҡалыуына килтерҙе! Нисәмә мең баланы ата-әсәләре, төрлө фетнәселәрҙең һүҙенә ҡолаҡ һалып, юҡ-барҙан ҡурҡып, шөбһәләнеп, башҡорт теле дәрестәре булмаған мәктәптәргә, кластарға үҙ ҡулдары менән етәкләп алып барып индерҙе...

Үҙебеҙ ултырған ботаҡты тумырыуҙы дауам итмәйек! Был һынауҙы ла битарафлыҡ, тар ҡарашлылыҡ, тарҡаулыҡ менән үткәрһәк, киләсәктә хәлде үҙгәртеү мөмкинлеге, бәлки, тыумаҫ та. Мәғариф өлкәһе буйынса етәкселәргә фекерҙәрҙе еткерәйек, тыңларға теләмәгәндәрен дә милли мәнфәғәттәрҙе иҫәпкә алырға мәжбүр итәйек. Был - беҙҙең хоҡуғыбыҙ!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостанда ҡайһы бер мәктәптәр биш көнлөк уҡыу аҙнаһына 1 апрелдән уҡ күсергә мөмкин. Республиканың мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Хажин ошо хаҡта белдерҙе. Ҡалған мәктәптәр, уның һүҙҙәренсә, "биш көнлөк"кә 2019 йылдың 1 сентябренән күсә. Мәғариф ведомствоһы етәксеһе ата-әсәләр һәм уҡытыусылар берләшмәһенең иғтибарын биш көнлөк уҡыу режимына күсеү фәндәр һанын ҡыҫҡартыуҙы күҙ уңында тотмауына йүнәлтте.

✔ Район сессияһы советында Руслан Ғиҙәтуллин республиканың Кушнаренко районы башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп раҫланды. Вазифа өсөн конкурс 18 февралдә уҙа. Ғиҙәтуллин 2016 йылдың октябренән "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк башҡарма комитеты етәксеһе булып эшләне. Ул 1976 йылдың 24 декабрендә тыуған. Башҡорт дәүләт аграр университетын һәм Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған. Ветеринария фәндәре кандидаты.

✔ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары "Эсәр һыу тураһында" республика законына уның сифатын контролдә тотоуҙы көсәйткән үҙгәрештәр индерҙе. Закон эсәр һыуҙың сифатына производство һәм йәмәғәт контроле, халыҡҡа һыуҙың торошо тураһында хәбәр итеү мәсьәләләрен көйләй, һыу объекттарын файҙаланыу тәртибен билдәләй, һыу тәьминатында ғәҙәттән тыш хәлдәр килеп тыуған осраҡта ҡулланыуҙарҙы эсәр һыу менән тәьмин итеү мәсьәләләрен яйға һала.

✔ Сибайҙан 50 бала Ишембай пульмонология шифаханаһына юлланды. "Ҡала халҡынан Башҡортостан шифаханалары буйынса 300-ҙән ашыу ғариза килде, - тип билдәләне Сибай ҡала хакимиәте башлығы. - Бынан тыш, "Танып" шифаханаһы етәксеһе "зона-500"-ҙән оло йәштәге 50 кешене бушлай ҡабул итергә әҙер. Ҡырымға 250-шәр кешелек ике заезд билдәләнек".

✔ 1 мартта республикала Башҡорт ғаиләһе көнө билдәләнә. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ошо унайҙан "Башҡорт ғаиләһе көнө" интернет-конкурсын иғлан итә. Ғаиләләр тураһында 3-5 минутлыҡ видеояҙмаларҙы 2019 йылдың 27 февраленә тиклем конкурстың рәсми төркөмөнә ҡуйырға кәрәк. Төп бүләк - телевизор. Интернетта иң күп "лайыҡ" йыйған өлгөлө ғаиләне лә матур бүләк көтә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ Кандидаттарҙы һайлап алыу буйынса шарттар ҡаты, был документ урындағы ҡоролтайҙарға ебәрелә. Йыйындың икенсе көнөндә Ишембай районында Торатау янында ҙур йыйын ойоштороу күҙаллана.



БЫНАҒАЙЫШ!

**Ғинуарҙың һуңғы көнө Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров Республика йортонда төбәктә Коррупцияға ҡаршы көрәш саралары буйынса эштәрҙе көйләү буйынса комиссия ултырышын үткәрҙе.**

# ҺӨЙЛӘҺӘҢ...

Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы ултырышты асып, республикала коррупцияға ҡаршы көрәш буйынса милли план тормошҡа ашырыла, уның буйынса иҫкәртеү эштәре, шулай уҡ дәүләт һәм муниципалитет хеҙмәткәрҙәрендә коррупцияға ҡаршы тәртип моделен булдырыу буйынса, коррупцияға ҡаршы стандарттарҙы таратыу, йәмғиәттә хоҡуҡи аң кимәлен үҫтереү һәм башҡа йүнәлештәр буйынса саралар бойомға ашырыла, тип һөйләне.

БР ведомство-ара Йәмәғәтселек хәүефһеҙлеге советы секретары А. Касьянов билдәләүенсә, 2018 йылда кррупцияға ҡаршы көрәш тураһындағы законды боҙғаны өсөн 59 граждан һәм 169 муниципаль хеҙмәткәр яуапҡа тарттырылған, шул иҫәптән 3 граждан һәм 30 муниципаль хеҙмәткәр (улар араһында урындағы депутаттар ҙа бар) мәнфәғәттәр ҡаршылыҡтарын туҡтата һәм көйләй алмағандары, килемдәре хаҡында мәғлүмәт бирмәгәндәре, йә булмаһа дөрөҫ йә тулы булмаған белешмә биреүҙәре сәбәпле үҙҙәренә ышанысты юғалтыу менән бәйле эштән бушатылып, ваҡытынан алда вәкәләттәре туҡтатылған.

Ултырышта сығыш яһаусы БР Фәндәр академияһы президенты Әлфис Ғаязов республикала коррупция кимәлен баһалаусы социологик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһенә туҡталды. Уның билдәләүенсә, яуап биреүсе респонденттарҙың күпселеге йәмғиәттә коррупция күренештәре булһа ла, мәсьәлә әллә ни киҫкен тормай, тип баһалай имеш. Һәр хәлдә, халыҡтың коррупция мәсьәләләренә ҡағылышлы борсолоуҙары 14-19 процент сиктәрҙә ҡалып килә икән. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар уларға йышыраҡ ЮХХДИ инспекторҙарына, шулай уҡ юғары уҡыу йорттарында, медицина учреждениеларында "бүләк" бирергә, хәрби хеҙмәткә саҡырылғанда, эш буйынса үрләү өсөн, шулай уҡ ергә хоҡуҡ мәсьәләһен ныҡытыу өсөн тейешле кешеләр кеҫәһенә "төртөргә" тура килеүен билдәләгән.

Быңдай белдереү кәм тигәндә ғәжәпләнеү тыуҙыра. Тормошобоҙҙа урын алып торған бөтөн проблемалар араһында коррупция бигүк көнүҙәк мәсьәлә лә түгел икән дәбаһа! Бер яҡтан, Академия һынлы ғилми сығанаҡтың, коррупция кәмей, тигән хәбәренә бик ҡыуаныу килһә лә, тормошобоҙҙағы бөтөн мөһим өлкәләрҙең дә ерлеген тәшкил итеүсе, уны хәрәкәткә килтереүсе "тәгәрмәс"тәрҙең хәл иткес мөһиме әлеге лә баяғы шул коррупция булып сығыуы социология фәне иҫәпләп сығарған теге проценттарға ышанысты ҡаҡшата бирә түгелме?.. Матди тәьминәтебеҙҙең наҡыҫ булыуын да бит бюджет аҡсаларының әлеге шул ришүәтселәр кеҫәһенә ағылыуында күрә абруйлы экспперттар. Ҡайҙа төртһәң дә кемдендер кеҫәһенә тоҫҡарға тура килә, шуның тормош тигән арбабыҙ урынынан ҡуҙғалмай - заман "ағылыиы" кәрәк... Быңа ҡайҙа мәсьәлә!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЫЛ ДА МӨҺИМ

**Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров 2019 йылдың ғинуарында Рәсәй субъекттары башлыҡтарының йоғонто яһау рейтингында күтәрелде.**

"Сәйәси һәм иҡтисади коммуникациялар агентлығы" белгестәре тикшереүенә ярашлы, республика лидеры һуңғы айҙа рейтингта 16-сы урынды биләне (былтыр декабрҙә - 21-се урын). Әле Радий Хәбиров "бик көслө йоғонтоло" губернаторҙар иҫәбендә. "Радий Хәбировтың позицияһы 2019 йылда республикаға "Һаулыҡ һаҡлау" милли проекты сиктәрендә федераль бюджеттан 4,9 миллиард һум самаһы аҡса бүленеүе тураһында хәбәрҙәр нигеҙендә нығына, - ти агентлыҡ экспперттары. - Бынан тыш, Хәбировтың республика Башлығы вазифаһына "Берҙәм Рәсәй"ҙән һайланырға теләүе тураһында ҡарары уның төбәктә позицияларҙың тотороҡло булыуына ышаныуы тип ҡабул ителергә мөмкин". Рейтингтың төүге баҫҡыстарын Мәскәү мэры Сергей Собянин (1-се урын), Чечен Республикаһы башлығы Рамзан Ҡадиров (2-се урын), Татарстан Президенты Рөстәм Миңлеханов (3-сө урын) биләй.

# ҺАЛЫМДАР БУЛМАҺА...

**Башҡортостанда бизнес үҫен якшы тойорға тейеш, уға хөрмәт менән ҡарарға кәрәк. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров төбәк эшҡыуарҙары менән "Бизнес-клуб" форматында уҙғарылған осрашыуҙа ошо хаҡта белдерҙе.**

"Бер нисә йыл дауамында республикала инвестиция әүҙемлеге кәмей барған, - тип билдәләне Башҡортостан етәксеһе. - Тышҡы иҡтисади инвестиция йәлеп итеү ҡеүәһе менән бәйле динамика ла ҡыуандырмай. Минең фекеремсә, бында хәл бик мөшкөл, сөнки тышҡы сауҙа тауар әйләнеше һәм сит ил инвестициялары күләме күрһәткестәре беҙҙә 2008 йылдан бирле иң насары. Ун йыл эсендә алға китергә мөмкин ине, ә беҙ бер аҙ артҡараҡ ҡалдыҡ". Муниципалитеттар һәм ведомстволар етәкселәре иҡтисад, тотош социаль тормош эшҡыуарҙар ҡулында икәнен аңларға тейеш, тип иҫәплә Радий Хәбиров. "Әгәр унда һалымдар ҙа, бер нәмә лә булмаһа, ниндәй социаль тормош тураһында һүҙ алып барырға мөмкин? Беҙ, әлбиттә, атайҙарыбыҙ ойошторған ҙур предприятиеларҙы бик оҙаҡ файҙалана алабыҙ. Ләкин үҙебеҙҙә лә нимәләр булдырырға кәрәк, бер йылда мөхитте үҙгәртергә беҙ һәм халыҡ беҙгә ышанһыр", - тип белдерҙе республика етәксеһе.

# ҠОРОЛТАЙ ЙӘЙ ҮТӘ

**V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы 2019 йылдың 28-29 июнендә уҙа. Сираттағы ултырышта Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты ағзалары тап ошо датаны раҫланы.**

Съезға делегаттар һайлау буйынса түбәндәге формула билдәләнде: республикала 4 мең кешегә - бер делегат, Рәсәй төбәктәренән һәм сит илдәрҙән 3 мең кешегә - бер делегат. Уларҙың 30 проценты әүҙем йәштәр булырға тейеш. Кандидаттарҙы һайлап алыу буйынса шарттар ҡаты, был документ урындағы ҡоролтайҙарға ебәрелә. Йыйындың икенсе көнөндә Ишембай районында Торатау янында ҙур йыйын ойоштороу күҙаллана. Уның барышында ҡоролтайҙың йомғаҡлау ултырышы ла ҡаралған. Ултырышта Башҡарма комитет ағзалары ағымдағы йылға төп саралар планын, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуға 100 йыл тулыуға арналған юбилей сараларын уҙғарыуҙы ҡараны һәм раҫланы. Шулай уҡ V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерләнеү һәм уны үткәреү барышында "Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы" проектын эшләргә хәл ителде, шуға бәйле проект өсөн яуаплы эксперт комиссияһы тулыландырылды һәм раҫланды.

# СИБАЙҘАҒЫ ХӘЛ

**Йома, 8 февралдә, Сибай карьерын һыу менән тултырыу башланды. Урындағы телевидениеның тура эфирында Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Сибай филиалы директоры Йәүҙәт Биккинов шул хаҡта белдерҙе.**

"Ошоға тиклем карьерға һыу тултырылманы. Бөгөнгә бөтә әҙерлек эштәре тамамланды. Карьерҙы һыу менән тултырыу 500-600 метр тәрәнлектән башлана", - тип аңлатты тау-металлургия компанияһы вәкиле. Ул сибайҙарға алып барылған эштәр барышы тураһында мәғлүмәт менән таныштырып барырға вәғәҙә бирҙе. "Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, шахталағы процесты тура эфирҙа күрһәтеп йәки видеоға төшөрөп булмай", - тине Йәүҙәт Биккинов.Бынан алда "Башинформ" 2018 йылдың ноябрендә Сибай ҡалаһында йәшәүселәрҙән һауалағы насар еҫ тураһында хәбәр килә башлауы тураһында яҙҙы. Күпмелер ваҡыттан һуң белгестәр Сибай карьерында руда төтәүен һәм һауаға көкөртлө газ бүленеп сығыуын асыҡланы. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров был хәлде иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Республика етәксеһе, ғалимдар менән кәңәшләшеп, карьерҙы һыу менән тултырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Уны 2019 йылдың 20 мартына тамамлау күҙаллана.

# АҠЫЛЛЫ ҠАЛА

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Рәсәйҙең төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Андрей Чибис менән эш осрашыуы үткәрҙе. Унда төбәк биләмәһендә "Аҡыллы ҡала" проектын бойомға ашырыу мөмкинлектәре тикшерелде.**

Ҡала хакимиәте 2019-2025 йылдарға яңы технологиялар индереү буйынса юл картаһын әҙерләне. Улар - коммуналь һәм энергетика инфраструктураһы һөҙөмтәлелеген арттырыуға, ресурс һаҡлаусы ойошмаларҙың сығымдарын кәметеүгә йүнәлтелгән төп ҡарарҙар, атап әйткәндә, ҡаланы энергетика ресурстарын һөҙөмтәле файҙаланып яҡтыртыу, юл хеҙмәттәре эшенә автоматлаштырылған контроль, тирә-яҡ мөхит торошона һәм һыуҙың сифатына онлайн-мониторинг, ҡалдыҡтар менән идара итеүҙең заманса системаһы. Проекттың партнёры - Францияның SUEZ компаниялар төркөмө. "Беҙ Smart city темаһы буйынса пилот төбәк итеп юҡҡа ғына Башҡортостан менән Өфөнө һайламаныҡ. Бөгөн был донъя тренды. Француз белгестәре республика менән хеҙмәттәшлекте перспективалы тип һанай икән, бында һеҙҙең командағыҙҙың өлөшө ҙур. Ошо ҡеүәтте иҫәпкә алып, Башҡортостан "Аҡыллы ҡала" проектын тормошҡа ашырыуҙа иң алдынғы субъекттарҙың береһе һәм башҡа төбәктәр менән тәжрибә алмашыу өсөн полигон булыуы мөмкин", - тип билдәләне Андрей Чибис.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөләге мәшғүллек үҙәктәрендә пенсия алды йәшендәге кешеләр өсөн консультация пункттары эшләй башланы. Быңдай пункттарҙың төп бурысы - пенсия алды йәшендәгеләрҙең мәшғүллеген тәьмин итеү. Белгестәр уларға эш эҙләүҙә ярҙам күрһәтеүҙән тыш, хеҙмәт баҙарындағы хәл тураһында мәғлүмәт бирә, үҙ эшендә асырға, һөнәри белем алыуҙа ярҙам итә

✓ "Төҙөлөш сәғәте" кәңәшмәһендә эштәрҙе башҡарыу ваҡытын, финанслау күләмен һәм сығанаҡтарын үҙ эсенә алған "Миловка паркы" торлаҡ комплексы буйынса юл картаһы хупланды. Өс йорт (5.3, 5.4 и 5.5) 1 июнгә әҙер булыр тип күҙаллана. "Эш версияһы билдәләнде. Өс йортто 1 июнгә файҙаланыуға тапшырабыҙ. Был схеманы ҡабул итегеҙ", - тине Радий Хәбиров, уны тормошҡа ашырыу барышы тураһында мәғлүмәт бирергә ҡушып.

✓ Башҡортостанда 2019 йылдың 3 июнендә мотлаҡ телерадиоканалдарҙың аналог тапшырыуҙары туҡтатыла. Аналог телетапшырыуҙар трансляцияһы туҡтатылғандан һуң уларҙың йышлыҡтарында цифрлы телевидениены ҡабул итеүгә күсеү кәрәклеге тураһында хәбәр урынлаштырыла. Башҡортостан Хөкүмәте цифрлы телевидение өсөн ҡорамал һатып алыуға дәүләт ярҙамына хоҡуҡлы граждандарҙың категорияларын раҫланы.

✓ Алдағы өс йылда Өфөлә дүрт онкология амбулатор ярҙам үҙәге төҙөлә, тағы ла туғыҙы - республиканың башҡа ҡалаларында. Өфөнән тыш, 2019 йылда үҙәктәр Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Күмертауҙа асыла. Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш штаттан тыш онкологы Руслан Солтанов "Башинформ" агентлығында Бөтә донъя яман шешкә ҡаршы көрәш көнөнә арналған матбуғат конференцияһында ошо хаҡта белдерҙе.

✓ Былтыр Башҡортостанда ЗАГС бүлектәре 25 388 никах теркәгән. Өфөлә 8718 пар өйләнешкән. Никахлашыусылар һаны буйынса беренсе урында Киров районы (2307 гаилә), икенсelә - Совет (1557), өсөнсөлә - Калинин (1361) районы. Республикала беренсе урында Стәрлетамаҡ - 1863 никах, районлар араһында Әбйәлил алда бара - 332 никах. Башҡортостанда йәшәүселәр Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе граждандары менән 621 никах теркәгән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ ***Бөгөн бындай режим буйынса 57133 бала уҡый, йәғни 81 мәктәп шундай режимда эшләй", - тине Елена Роберт ҡыҙы һәм үҙгәрештәр уҡытыусыларҙың уртаса эш хаҡына йоғонто яһамаясағын белдерҙе.***

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Быйыл йәйгеһен, аныҡлап әйткәндә 9-14 июлдә Өфөлә Халыҡ-ара балалар уйындары үтәсәк. Унда ҡатнашырға теләк белдереүселәрҙән ғаризалар 1 февралгә тиклем ҡабул ителгән, әле спортсыларҙы теркәү бара, 600-ҙән ашыу кеше теркәлгән дә инде. Ҡала хакимиәтендә уҙған сираттағы оператив кәңәшмә тап ошо теманан башланыуы ла юҡҡа түгел. Хакимиәт башлығы Өлфәт Мостафин был сараны, ул балалар күңелендә онотолмаҫлыҡ тәьҫораттар ҡалдырһын өсөн, юғары кимәлдә үткәреү бурысын йөкмәтте.**

# МӘҒАРИФ ҺӘМ...

Ғөмүмән, был кәңәшмә, нигеҙҙә йәш быуынды тәрбиәләүгә арналды, тиергә лә мөмкин. Сөнки икенсе яңылыҡ та балалар мәнфәғәтенә ҡағылышлы булды: Кузнецовск затонында яңы "Еҙем" үҫмерҙәр клубы асылды. Уның эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәре булып эстрада һәм халыҡ вокалы, эстрада һәм халыҡ бейеүҙәре, биҙәү-ҡулланма сәнғәте, актер оҫталығы, шашка һәм өҫтәл теннисы тора. Өлфәт Мансур улы белдереүенсә, был биҫтә баш ҡалала иң әүҙем ҙурайыусыларҙан һанала, шуға күрә бында социаль инфраструктураны үҫтереү - муниципалитет алдында торған өҫтөнлөклө бурыстарҙың береһе.

Шулай ҙа уҙған йомала Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың "Взлетай!" ("Юғары ос!") Беренсе республика мәктәп мәғарифы форумында Башҡортостандың белем усаҡтарын биш көнлөк уҡытыуға күсереү инициативаһы менән сығыш яһауының шаңдауы һәм эҙемтәһе төп урында торҙо. Мәғариф системаһында эшләгән, шул өлкәгә ҡағылышлы кешеләр, республика мәктәптәренең яртыһынан күберәге тиерлек йыйылған аудитория был тәҡдимде шунда уҡ хуплап ҡаршы алды һәм был мәсьәлә тиҙ арала хәл ителеп тә ҡуйҙы. Ҡала хакимиәтенең Мәғариф бүлеге начальнигы Елена Хаффазова тап ошо яңылыҡтың нисек тормошҡа ашырыласағы тураһында һөйләне. Яңы режимға күсеү ғәмәлдә булған, балаларға төшкән көсөргәнеште, уларҙың сәләмәтлеген, үҙаллы шөғөлләнеү мөмкинлеген күҙ уңында тотҡан норматив акттарға ярашлы тормошҡа ашырыласаҡ. Программа материалы күләме ҡәтғи рәүештә Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарынан сығып төҙөләсәк. Бығаса тиклем программала ҡаралған предметтар йөкләмәһе тигеҙ итеп биш көнгә һыйҙырыласаҡ, әммә көндәлек көсөргәнеш 1-се синыф балалары өсөн көнөнә дүрт, аҙнаһына бер көн биш дәрестән артмаҫҡа тейеш. 2-4-се синыфтар өсөн был күрһәткес 5 дәрес булһа, 5-6-сы синыфтар өсөн - 6 дәрес, 7-11-се синыфтарға иһә 7 дәрес билдәләнә.

Шул уҡ ваҡытта, баш ҡаланың ҡайһы бер мәктәптәрендә уҡытыу ике сменала алып барыла бит. Беренсе сменаның дәрестәре артҡас, улар нишләргә тейеш? Аҙнаның алтынсы көнөндә уҡытылған предметтарҙы башҡа көндәргә күсереү өсөн дәрес оҙайлығы ҡыҫҡартыласаҡ икән. Һөҙөмтәлә икенсе сменала дәрестәр киске сәғәт етенән дә һуңға ҡалмай тамамланырға тейеш. Шулай уҡ, талаптарға яуап биреү маҡсатында, ҡайһы бер дәрестәр күләме бер йә ике сәғәткә ҡыҫҡарыуы ихтимал. "Өфө мәктәптәре аҙнаһына биш көнлөк уҡытыу шарттары менән таныш, был тәжрибә 2016 йылдан тормошҡа ашырыла. Бөгөн бындай режим буйынса 57133 бала уҡый, йәғни 81 мәктәп шундай режимда эшләй", - тине Елена Роберт ҡыҙы һәм үҙгәрештәр уҡытыусыларҙың уртаса эш хаҡына йоғонто яһамаясағын белдерҙе.

Кәңәшмәнең икенсе төп темаһы - автомобиль юлдарының комплекслы хеҙмәтләндерелеүе мәсьәләһе булды. Был йәһәттән тәжрибә өйрәнергә Мәскәүгә делегация составында барып ҡайтҡан Ленин районы хакимиәте башлығы Олег Котов тәьҫораттары менән уртаҡлашты. Илебеҙҙең баш ҡалаһы юлдарын "Автомобиль юлдары" дәүләт бюджет учреждениеһы хеҙмәтләндерә. Уның төп бурысы булып юлдарҙы һәм юл хужалығы объекттарын ҡышын һәм йәйгеһен таҙартыу, йәшел үҫентеләрҙе ҡарау, юл селтәренә билдәләр һалыу, үҙ асфальт заводтары эшен тәьмин итеү тора. Ниндәйҙер эш башҡарыу өсөн аныҡ ваҡыт билдәләнгән һәм хеҙмәттәр ошо ваҡыт эсендә уны башҡарып сыға. Бында, әлбиттә, Мәскәүҙең федераль әһәмиәттәге һәм айырым статустағы ҡала булыуын да, был маҡсаттан ҡала бюджетынан күпме аҡса бүленгәнен дә онотторға ярамай. Миҫал өсөн, әгәр 2000 йылдар башында Мәскәүҙең төп магистралдәрен таҙартырға 350 берәмек техника йәлеп ителеп, улар 2,5 миллион квадрат метр майҙанды таҙартһа, 2018 йыл башына 6700 берәмек техника иҫәпләнә һәм ойошма 42 миллион квадратты хеҙмәтләндерә. Ләкин ул барлыҡ урамдарҙы ла таҙарта тип әйтеп булмай, үҙенә беркетелгән урамдар өсөн генә яуап бирә, ә ҡалған урамдарҙы иһә райондар, административ округтар таҙарта.

Сығыш яһаусы белдереүенсә, Өфөнөң үҙәк магистралдәрен ҡарап, тәрбиәләп тороу өсөн махсус предприятие төҙөү зарур. Ул яҡшы эшләһен өсөн норматив буйынса 410 берәмек техника кәрәк. Шулай уҡ йәйәүлеләр йөрөгән тротуарҙарҙы һәм туҡталыштарҙы таҙартыу өсөн BUCHER һәм HOLDER базаһында эшләнгән 20 берәмек техника талап ителә. Бындай техниканың хаҡы 8-12 миллион һум тора. Шулай уҡ йәйгеһен ҡалала саң булмаһын өсөн өҫтәмә рәүештә саң һурҙырғыс, юлдарҙы йыуҙырыусы техника кәрәк. Әйткәндәй, юлдарҙың ситенә ултырған барлыҡ техник ҡалдыҡтарҙы йыуҙырыр өсөн шампунь дә кәрәк икән... Ирекһеҙҙән, ҡулдар аҡса янсығына һуҙыла һәм мейене бер һорау быраулай: ҡала ҡаҙнаһы бындай сығымдарҙы күтәрә алырмы? Аңлағанға - ишара...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*



*Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин Мортаза Рәхимовты 85 йәшлек юбилейы менән ҡотланы. "Республика менән Һеҙ идаралыҡ иткәндә Өфө яҡшы яҡҡа үҙгәрҙе, бөгөн беҙҙең һәм бөтөн өфөләрҙең ҡотлауын ҡабул итегеҙ. Республика һәм Өфө халҡы өсөн Һеҙ ысын остаз һәм уҡытыусы булып ҡалаһығыҙ. Йәш быуын Һеҙҙең аҡыллы фекерҙәрегеҙ һәм тормош тәжрибәгеҙҙән өлгө ала. Ҙур рәхмәт!" - тигән тәбрикләү һүҙҙәре әйтте Өлфәт Мансур улы һәм Мортаза Ғөбәйҙулла улының хаҡлы рәүештә республиканың төп төҙөүсеһе булып иҫәпләнеүен дә телгә алды.*

*ҺОРАУ-ЯУАП*



## НИ ҠЫҪЫЛЫШЫ?

**"Күптән түгел фатир һатып алдым. Интернет үткәреү өсөн белгес саҡыртҡас ҡына йортто юғары тиҙлектәге интернет менән тәьмин итеүсе кабелдәрҙең булмауы асыҡланды. Баҡтиһәң, йорт буйынса староста монтажлау эштәре барышында буласаҡ тауыштан "ҡасып", кабель һалыуҙы тыйған икән. Ә уның бындай сикләүҙәр ҡуйыуға хоҡуғы бармы ни, тигән һорау тыуа. Был хәлгә асыҡлыҡ индереү өсөн ҡайҙа мөрәжәғәт итергә мөмкин?"**

**Яуап:** Йорт буйынса староста торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эштәренә ҡағылған документтарҙы әҙерләү, йорт менән идара итеү, күп фатирлы йорттоң дөйөм мөлкәтен тәртиптә тотоу буйынса контроль алып барыу, ремонт һәм башҡа төрлө төҙөлөш эштәре өсөн иҫәп-хисап эшмәкәрлеге алып барыу, килешеүҙәр төҙөү, дөйөм йыйылыштар уҙғарыу һәм башҡа ошондай йүнәлештәге эштәрҙе алып барырға хоҡуҡлы. Өҫтәмә хоҡуҡтар уға фатир хужаларының дөйөм йыйылышында ҡаралып, локаль акттар ярҙамында теркәлеп бирелергә мөмкин. Әгәр ҙә уның хоҡуҡтары документаль рәүештә идара итеүсе компания тарафынан билдәләнгән булһа, староста ҡайһы бер мәсьәләләрҙе дөйөм йыйылыш уҙғармайынса ла хәл итергә мөмкин. Ләкин был хоҡуҡтарҙың дөйөм йыйылышта билдәләнгән булыуы мотлаҡ. Шуға күрә уның эшенә ҡарата ниндәйҙер һорау тыуған осраҡта урындағы идара итеү компанияһына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## МУТЛАШМА!

**"Магазиндарҙа күрһәтеү өсөн паспортымды сканер аша үткәреп, фотошоп программаһы ярҙамында тыуған йылымды үҙгәртергә теләйем. Әгәр ҙә был билдәле булһа, мине язаға тарттырырға мөмкиндәрме?"**

**Яуап:** Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 327-се статьяһына ярашлы, ялған дәүләт наградаларын, штамп, мисәт һәм бланктарҙы эшләү һәм таратыу өсөн 2 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү, 2 йылға тиклем мәжбүри эш йәки 6 айға тиклем ҡулға алыу язаһы ҡаралған. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: әгәр ҙә ул документтар уны эшләүсегә ниндәйҙер ташлама эшләү өсөн тотонолмаһа, нимәгәлер хоҡуҡ бирмәһә, был енәйәт һаналмаясаҡ. Сканер аша үткәрелгән документты үҙгәртеү шулай уҡ енәйәт түгел. Ләкин уны файҙа алыу ниәте менән ҡулланыуҙы мутлашыу итеп ҡарарға мөмкин. Ә мутлашыу бер ҡасан да яҡшы эҙемтәләргә алып килмәй.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сәтләүек

❖ Урман сәтләүеге (фундук) ашҡаҙан эшмәкәрлеген нығыта, мейе күҙәнәктәре бүленеүенә ярҙам итә. Аҡыл хеҙмәтендәгеләргә бик ҙур дауа.

❖ Фисташка - йөрәкте сәләмәт хәлдә торорға ярaҙм итә, ҡандағы шәкәр, холестерин кимәлен дә көйләй.

❖ Арахис (ер сәтләүеге) B9 витаминына бай, ҡан эшләү ағзаларына яҡшы йоғонто яһай. Йыйырсыҡтар ла йәйеп ебәрә, тирене шымарта, тын юлдарын дауалауға ярҙам итә.

❖ Бразилия сәтләүеге көрлөк бирә, йәшәртә, ҡандағы шәкәрҙе яйға һала, һыҙланыуҙан һаҡлай.

### Күҙҙәр ауыртҡанда

❖ Кистән 1 ҡалаҡ укроп орлоғон ҡайнап сыҡҡан һыу менән термоста ҡалдырырға, иртәнсәк һөҙөргә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда 50-шәр грамм эсергә.

### Аяҡ-ҡулдар өшөһә

❖ Аяҡ-ҡулдар гел өшөһә, скипидар һөртөргә кәрәк. Дарыуханала һатыла. Скипидар тире аша үтеп инеп, нәҙек ҡан тамырҙарын киңәйтә, ҡан йөрөшө яҡшыра.

❖ Кипкән 1 кг борсаҡҡа аяҡтарығыҙҙы тығып баҫығыҙ һәм үксәнән бармаҡҡа табан һәм киреһенсә табандарҙы йөрөтөгөҙ. Үҙегеҙгә нисә йәш, шунса эшләгеҙ. Табандарығыҙ йылыныр. Тиҙ генә йөн ойоҡ кейегеҙ һәм ятығыҙ. Был күнегеүҙе икенсе, өсөнсө көндә лә эшләгеҙ. Табандар өшөүҙән туҡтағансы башҡарығыҙ.

### Йүткереү

❖ 1 стакан ҡайнар һөткә саған төнәтмәһе өҫтәп эсергә.

### Йыйырсыҡтарҙан

❖ 1 ҡалаҡ календула сәскәләренә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм бит тиреһенә һөртөргә. Һәр ваҡыт яңы төнәтмә әҙерләп, көнөнә 3-4 тапҡыр эшләргә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**Кейеҙ биҙәүҙә төп урында уны йәйгән саҡта ҡара һәм аҡ төҫтәге йөн ҡулланыу торған. Биҙәк өсөн ҡулланылған йөндө еңелсә генә бау итеп өйрөлтөп, кейеҙҙең төп нигеҙенә һалғандар. Биҙәк элементтары тар буйҙарҙан, төҫлө таптарҙан тора. Биҙәкте үлсәп тормайҙар, самалап эшләйҙәр.**

Шулай ҙа симметрия һаҡлана. Әлбиттә, кейеҙҙе тәгәрәткән саҡта биҙәктәр шылып та киткеләгән. Ябай, йылылыҡ бөркөп торған һүрәт килеп сыҡҡан.

Үткән быуатта яһалған кейеҙҙәрҙең нигеҙе ҡара ла, аҡ та. Был хужалыҡта ниндәй төҫтәге һарыҡтарҙың күберәк булыуынан торған. Шулай ҙа аҡ кейеҙгә өҫтөнлөк бирелгән, ул юғарыраҡ баһаланған. Экспедициялар мәлендә Әбйәлил, Баймаҡ, Мәләүез, Ейәнсура райондарында, ырғыҙ-кәмәлек башҡорттарында биҙәкле кейеҙҙәр фотоға төшөрөлгән. 1958 йылда Рәсәй Этнография музейына Мәләүез районы Иштуған ауылынан ҙур булмаған ҡара кейеҙ бирелгән. Урталағы киң генә аҡ һыҙат кейеҙҙе ике өлөшкә бүлә һәм ике яҡтан да киртләс формаһында биҙәктәр һалынған.



Ябай биҙәкле кейеҙ. Мәләүез районы, Иштуған ауылы, 1958 й.

Урал аръяғының көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә кейеҙҙәрҙең сите киртләстәр менән биҙәлеп, уртала ҡалған өлөш түңәрәктәр менән тултырыла.



Ҡаралы-аҡлы кейеҙ. Баймаҡ районы. 1971 й.

Баймаҡ районы Ҡыуат ауылындағы аҡ кейеҙ ситтәре киртләс, ә уртаһы тура дүртмөйөш менән биҙәлеп, унда кейеҙ баҫылған ваҡыт "1962 йыл" яҙылған. Уны ошо ауыл оҫтаһы Мөслимә Иҫәнбаева (1903 йылғы) баҫа. Ауылдаштары унан туй кейеҙҙәре лә баҫтырып ала торған булған. 1970 йылғы кейеҙҙә киртләс уртаға яҡын һалынған, мөйөштәре ҡара һыҙаттар менән билдәләнгән. "Ала кейеҙ" тип йөрөткән быңдай кейеҙҙе халыҡ.

Ошондай уҡ кейеҙҙәр Әбйәлил районында ла булған. 1971 йылда Буранғолда аҡ биҙәкле ҡара кейеҙ осраған.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ДЕПУТАТ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ



**1 ғинуарҙан "РФ Урман кодексының 32-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль закон эшләй башланы. Халыҡҡа үҙ мәнфәғәте өсөн түләмәйенсә генә киҫкә (валежник) йыйыу мөмкинлеге биргән был закон буйынса һорауҙар һаман байтаҡ ҡына. Ошо айҡанлы законды тәҡдим итеүсе һәм тормошҡа ашырыусы, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# СИКЛӘҮҘӘР ЮҠ...

## бары үҙегеҙ законды боҙмағыҙ

**➔ Быйыл үҙ көсөнә ингән закондар араһында киҫкә йыйыуға ҡағылғаны ла халыҡ араһында күп шау-шыу ҡуптарҙы, ахыры. Был законды халыҡтың да, уның үтәлешен контролдә тотоусыларҙың да уны аңлап еткермәүҙән киләме?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, был закон тураһында күп һөйләнек, күп аңлатыуҙар алып барҙыҡ, тигән фекерҙә инем. Һайлаусар алдынан: "Бына урман эргәһендә йәшәйбеҙ, ә ҡоро ағастарҙы ла йыйып ала алмайбыҙ, штраф һалалар. Хәл итә алмаҫһығыҙмы?" - тип, халыҡ үҙе һораны. Әлбиттә, ауыл кешеһенә ҡоро ағас йыйыу өсөн рөхсәт артынан район үҙәгенә барыу ҙа, 3 мең аҡса түләү ҙә ауырлыҡ ул. Шуға ошо һорау өҫтөндә эшләп, былтыр закон ҡабул итетде һәм 2019 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инде. Әйтергә кәрәк, Урман хужалығы министрлығы, халыҡҡа рөхсәт бирелһә, улар урманда ҡоро ағас йыйыу менән бергә йәш ағастарҙы ла ҡырҡасаҡ, тигән ҡараштa ине. Министрлыҡҡа, алдан әҙерләнегеҙ, аңлатып рәсми хаттар ебәрегеҙ, хеҙмәткәрҙәрегеҙҙе уҡытығыҙ, тигән үтенес белдерҙем. Үткән йыл аҙағында республиканың Урман хужалығы министрлығы таратҡан рәсми хатта, киҫкә йыйыу өсөн махсус рөхсәт кәрәк, тип яҙылған булған. Ошо халыҡ араһында аңлашылмаусылыҡ тыуҙыра ла инде. Ауылда йәшәүселәр борсолоп, миңә яҙа башланы. Был хат бөгөн ғәмәлдән сығарылды, яңыһы ебәрелде. Социаль селтәрҙәрҙә үҙем дә аңлатып яҙҙым.

**➔ Мөрәжәғәттәрҙең иң күбе ниндәй мәсьәләгә ҡағыла?**

- Улар бер нисә һәм барыһы ла ябай ғына. Мәҫәлән, нимә ул киҫкә (валежник)? Киҫкә - ел, дауыл ҡолатҡан, йәки ҡар һырыуҙан, башҡа сәбәптән ҡолаған, йәки үҙе ҡороп ауған ягас. Рөхсәт алырға кәрәкме, тиҙәр. Бер кемдән дә, бер ниндәй ҙә рөхсәт алырға кәрәкмәй. Үҙең менән балта, бысҡы алырға мөкинме? Балта ла, бысҡы ла алып барырға ярай, ҡоро ағас булһа ла, уны турап алып ҡайтырға кәрәк бит. Минең шундай үтенесем дә бар: ҡороған ағастарҙың ботаҡтарын ҡалдырмай алып ҡайтһындар ине. Сөнки ботаҡ урманды ҡыйлай, икенсенән, янғын хәүефен тыуҙыра. Машина-трактор менән барырға яраймы, тигән һорау йыш осрай. Мөмкин, шулай ҙа йәш ағастарҙы ҡырҡмаһындар, тапамаһындар ине. Йәш ағасты ҡырҡҡан өсөн штраф, административ, хатта енәйәт эше ҡуҙғатыу ҙа ҡаралған. Ҡороған, әммә тамырында ултырған ағасҡа ла тейергә ярамай. Был закон ҡороп йығылған ағастарҙы йыйыуға ғына рөхсәт бирә.

Депутаттар ботаҡ йыйырға рөхсәт иткәнгә ҡыуанайығыҙ, законДың халыҡҡа файҙаһы юҡ, тигәндәр ҙә бар. Быны ауылда йәшәмәгән, ауылдың мохтажлығын белмәгән кешеләр әйтә. Ҡоро ағастың көнкүрештә кәрәге күп. Утындан башҡа, бағана алыштырырға, һарайҙы, ихатаны төҙәтергә була. Ҡайһы ваҡытта әҙерләргә була, тип һорайҙар. Йыл әйләнәһенә. Бында ниндәйҙер сикләүҙәр юҡ, тик урманда янғын хәүефе көсәйгән мәлдә ярамай. Ҡайһы урмандарҙа йыйырға мөмкин, тип һорайҙар. Бар урманда ла ярай, бары тик диләнкә итеп бүлеп бирелгән участкала ярамай. Әйткәндәй, быңдай закон эшләгән бүтән төбәктәрҙә сикләүҙәр бар. Мәҫәлән, ҡайҙалыр урманға машина менән йөрөргә, ҡайҙалыр бысҡы алып инергә ярамай, ҡайҙалыр метр ярымдан оҙон ағас киҫкә тип иҫәпләнмәй. Беҙҙә сикләүҙәр юҡ. Шулай ҙа, әгәр ниндәйҙер сәбәп менән закон тулыһынса эшләмәй икән, тура миңә яҙырға була.

**➔ Халыҡ араһында күп йөрөйһөгөҙ, күп аралашаһығыҙ, һеҙгә уларҙың тағы ниндәй үтенестәре бар? Улар ниндәй өлкәгә ҡағыла?**

- Халыҡ һорағаң үтенестәр закон булып ҡабул ителә бара. Спиртлы эсемлектәрҙе законһыҙ һатыуға ҡаршы закон эскелеккә ҡаршы көрәштә ҙур ярҙам. Урындарҙа власть органдарының көсө етмәгән осраҡтарҙа закон боҙоусыларҙы миңә яҙа һаман халыҡ. Мин тейешле сара күрергә ярҙам итәм. Халыҡ үҙе лә әүҙем был мәсьәләлә. Ҡайһы бер ауылдарҙа законһыҙ араҡы һатып, халыҡты ағыулаусыларҙан минең исемгә аңлатма ла яҙҙыралар әле. Законды белдем, башҡа улай эшләмәйәсәкмен, тигән йөкмәткеле хаттарҙы миңә ебәрәләр шунан. Эске Эштәр министрлығынан белешеп торам, 1 миллион штарф һалынған осраҡтар бар. Был закон шуныһы менән ҡиммәт: күпме кешенең сәләмәтлеге, ғүмере, ғаиләләр һаҡлап алып ҡалына.

Эскеселәрҙе мәжбүри дауалау тураһындағы закон өҫтөндә лә эш алып барам әле. Эсеп, өйҙән ғаиләһен ҡыуып сығара, йәберләй, әйберҙәрҙе һатып эсә икән, табип ҡарары менән уны үҙ теләгәнән тыш та дауаларға кәрәк. Бөгөн был мөмкин түгел. Закон кешенең хоҡуҡтарын боҙасаҡ, тигән фекерҙәр булыу сәбәпле, эш ауыр бара. Ул эскесе башҡаларҙы, әйтәйек, ҡатынын, балаларын рәнйетеп, туҡмап, уларҙың хоҡуғын боҙмаймы ни? Барыһын да дауалап бөтә алмаясаҡһығыҙ, тип әйтеүселәр ҙә бар. Эйе, дауалай алмаясаҡбыҙ, тик яртыһын был афәттән ҡотҡарһаҡ та, ҙур файҙа. Рәсәйҙә йылына 500 мең кеше эскелек һәҙәмтәһендә үлеп ҡала. 70 процент кеше үлтереү иҫерек саҡта башҡарыла. 60 процент суицид шулай ул иҫерек саҡта эшләнә.

**➔ Шул уҡ ваҡытта күпселек ҡатынҡыҙҙарҙың ғаиләлә ире тарафынан туҡмалып йәшәүен дә беләбеҙ, уларҙың фажиғәле тамамланған осраҡтары ла булып тора. Ошоға бәйле берәй закон ҡабул итеү күптән хәл ителешен көткән мәсьәлә түгелме икән?**

- Әлеге мәлдә Оксана Пушкина менән бергәләп быңдай закон проекты өҫтөндә эш алып барыла. Ул ҡатынҡыҙҙарҙы, балаларҙы яҡлауға арнала. Беҙҙә бит шулай, ҡатын-ҡыҙ туҡмалып булһа ла, ғаиләлә йәшәүен дауам итә. Был беҙҙең халыҡҡа ғына түгел, бөтөн халыҡтарға ла хас. Айырылышыу насар нәмә тип ҡарайҙар. Әлбиттә, ул насар, әммә быңдай осраҡта закондар булып, ҡатын-ҡыҙҙы яҡлаһа, Учалылағы кеүек фажиғәләр, бәлки, булмаҫ та ине.

Ғөмүмән, ғаиләне яҡлаған, үлем хәүефе менән янауға ла закондар бар. Бында төп бәлә - ҡатындарҙың бер ҡайҙа ла мөрәжәғәт итмәүе. Балалары атайлы булһын, тип үйлай ул, ирен дә йәлләй. Икенсенән, бер кем дә кеше ғаиләһенә ҡыҫылырға теләмәй. Мөрәжәғәт юҡ икән, полиция хеҙмәткәре лә бер нәмә лә эшләмәй. Закон проектында үҙҙәктәр булдырып, быңдай ғаиләнән ҡатындарҙы алыу тураһында ла һүҙ бара, сөнки күп осраҡта уларҙың китер урыны юҡ.

Битарафлыҡ та көслө, ни хәл итәһең. Берәй иҫерек руль артына ултырғанын күреп, кемдең махсус органдарға хәбәр иткәне бар? Ә ул үҙ гүмеренән тыш, башҡаларҙың сәләмәтлегенә зыян итеүе ихтимал. Күршең законһыҙ араҡы һата, нишләп өндәшмәйһең, тиһең, ауылдаш та инде, тиҙәр. Миңә ҡағылмай, тип уйламағыҙ. Ул кеше тиҙҙән бөтөн ауылығыҙҙы һәләк итәсәк, һиңә лә сират етәсәк. Балаларығыҙ берәй ҡасан унан алып эсер тип уйламайһығыҙмы, тип өндәшер инем мин. Ошо өндәшмәү арҡаһында закондар эшләмәй ҙә инде...

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

СӘЙЕР ҒӘҘӘТ

# ХӘҮЕФ ТОЙҒОҺОНА...

## ирек бирмә

**Эшкә тип сығып, өйҙән 200 метр самаһы юл үткәс, ишекте бикләмәнем шикелле, тигән уйҙар ауынан ҡотола алмай, кире боролғанығыҙ бармы? Бында варианттар төрлө булыуы ихтимал: үтекте, газды һүндермәнем...**

Бер мәл ошондай ғәҙәт мине лә йонсотто бит. Бигерәк тә кеше фатирын ҡуртымға алып йәшәгән осор. Туҡталышҡа барып етәм дә, ишекте бикләмәнем шикелле, тип уйлай башлайым. Хәйер, улай ҙа түгел, подъездан сыҡҡас та хәүеф тойғоһо күңелде кимерә. Әгәр шул мәлдә кире боролоп инеп, ишекте тартып ҡарап, уның бикле икәненә ышанһаң, көнөң тыныс үтә инде. Боролмаһам, эшкә барып еткәс тә, эштә лә шул турала уйлайым. Түҙмәйем, шул уҡ подъезда йәшәгән һәм бәләкәй балаһы менән декрет ялында ултырған төркөмдәшемә шылтыратам: "Фатирҙың ишеген генә тартып ҡарале!" Борсолам, сөнки янғын сығып китеүҙән, кеше фатирын асыҡ ҡалдырыуҙан ҡурҡам.

Иң ҡыҙығы, быңдай ғәҙәтле кешеләр яҡын таныштарым араһында ла булып сыҡты. Күптән түгел апайым күршеһенән әрләй: "Интеллектуаль кимәле Векс-

✓ *Улар 1918 йылдың 26 февралендә махсус йыйылыш үткәреп, "башҡорт ерле автономияһы хаҡындағы изге теләккә зыян килтермәгән хәлдә ...башҡорттар Советтар менән ҡулға-ҡул тотошоп барасаҡ", тигән ҡарар ҡабул иткән.*



*ХӘТЕРКИТАП*

# ТОҒРОЛОҠ ӨЛГӨҺӨ

**Кинорежиссер Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" тип аталған тулы метрлы тарихи нәфис фильмы төшөрөлгәс, "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына уның геройҙары тураһында ҡыҫҡаса һөйләп, тарих архивтарынан, фәнни хеҙмәттәрҙән, музейҙарҙан тупланған фотоларын, шулай уҡ фильмдың костюмдар буйынса рәссамы Әлиә Байрамғолованың фильмды төшөрөү майҙансығынан яһаған фотоларын ла тәҡдим итергә булдыҡ. "Ҡабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" тигән был проект үҙенең һәләте, хеҙмәте менән ил тарихын, милләт яҙмышын яҙған кешеләрҙең исемен ҡабаттан иҫебеҙгә төшөрөү өсөн кәрәк беҙгә, тип уйланыҡ.**

**Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы ДӘҮЛӘТШИНА** (актриса Лилиә Исҡужина уйнай) - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында беренсе булып роман ижад иткән яҙыусы. Ҡыҫҡа ғына ғүмерендә барыһы ла була: бәхетле ғаилә тормошо, ижади уңыштар менән бергә ауырыу, юғалтыуҙар, шулай уҡ дуҫтары тарафынан хыянат та. Әммә ул халҡына, үҙенең коммунистик идеалдары һәм инаныуҙарына тоғро ҡала.





*Һәҙиә менән Ғөбәй Дәүләтшиндар.*
*Актриса Лилиә Исҡужина менән актер Илгиз Миңләхмәтов.*

Һәҙиә 1905 йылда Һамар губернаһы Пугачев өйәҙе Имел волосының Хәсән ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Бәләкәй саҡтан да, уҡытыусы булып эшләгәндә лә яҡындары тураһында хәстәрлек күрергә тура килә. 1922 йылда тормошон бер ваҡиға үҙгәртеп ебәрә - ул партияның губерна комитеты халыҡ мәғарифы бүлеген етәкләгән билдәле яҙыусы Ғөбәй Дәүләтшинға кейәүгә сыға. Улы Булаттың ауырыуы һәм үлеме бәхетле ғаиләне тетрәндерә. Ошо уҡ ваҡытта Һәҙиә ҙур булмаған хикәйәләр һәм очерктар яҙа башлай. Халыҡ уларҙы яҡшы ҡабул итһә лә, белеме етмәүен тойоп, Башҡорт педагогия институтына уҡырға инә. Алдынғы студент йәмәғәт эштәре менән дә әүҙем шөғөлләнә. 1934 йылда Яҙыусылар берлеге уны СССР яҙыусыларының 1-се съезына делегат итеп ебәрә. Бәхетле тынлыҡ Дәүләтшиндар өсөн 1937 йылда тамамлана. Ошо йылдың авгусында халыҡ дошманы тип, Ғөбәйҙе ҡулға алалар. Тиҙҙән Һәҙиәне "Тыуған илгә хыянат итеүсе" мөһөрө менән институттан ҡыуалар. Иренең контрреволюцион эшмәкәрлеген белеп тә, власть органдарынан йәшергән тигән сәбәп менән ай ярымдан үҙе лә ҡулға алына. Һәҙиә үҙенә һәм иренә тағылған ғәйептәрҙе танымай. 1937 йылдың ноябрендә уны 5 йылға хөкөм итәләр. Өфө изоляторында үткәргән 13 айҙан һуң Һәҙиәне һәм башҡа тотҡондарҙы тауар вагонына ултыртып, көнбайышҡа, Темников лагерҙарына (Мордовия) алып китәләр. 1938 йылдың 23 декабрендә лагерға барып етәләр. Меңәрләгән ҡатындар менән бергә Һәҙиә унда сигеү цехында эшләй. Кеше сыҙамаҫ шарттарҙа уны бер хыял йәшәтә - ҙур роман яҙыу теләге. Тап ошонда ул романының тәүге ҡулъяҙмаларын яҙа. 1942 йылдың көҙөндә срогын тултырып, ирекккә сыға. Ауырыу һәм хәлһеҙләнгән Һәҙиә ҙур ауырлыҡ менән Өфөгә килеп етә, бында ла уны аслыҡ, яңғыҙлыҡ һәм кешеләрҙең битарафлығы ғына көтә. Дәүләтшиндар ҡулға алынғандан һуң фатир һәм милектәре башҡаларға күсә. Урамда тороп ҡалған әсәһен яҙыусы Хәсән Бәшәр ғаиләһе үҙенә һыйындыра. Һәҙиә лә ошо ғаиләгә төбәп килә. Яҙыусының ҡатыны уны ауыл хужалығы тәжрибә станцияһына төнгө ҡараулсы итеп эшкә урынлаштыра. Хеҙмәт хаҡының бәләкәйлеге лә ҡурҡытмай уны, романын яҙып өлгөрөргә тырыша.



*"Беренсе Республика" фильмынан кадр.*

Һәҙиәнең һуңғы төйәге - Бөрө. Кешеләрҙең, етәкселәрҙең битарафлығы уның аҙаҡҡы көсөн ала. Әҫәрҙәрен баҫыуҙан, Яҙыусылар берлегенә кире тергеҙеүҙән баш тарталар. "Элекке хеҙмәттәштәрем араһында дуҫтарым юҡ, минең партиям ғына бар. Ҡасан да булһа ул мине аңлаясаҡ", - тип яҙа Һәҙиә һәм тап ошо уға йәшәү көсөн бирә. 1956 йылда уның исеме аҡлана. Әммә был мәлгә үҙе булмай. Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романын баҫмаға Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти әҙерләй. Роман 1957 йылда баҫылып сыға һәм Һәҙиә Дәүләтшина Салауат Юлаев исемендәге республика премияһына лайыҡ була (1967 йылда, үлгәндән һуң).

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**

лер шкалаһы буйынса - 130, ә кранын япҡанмы, юҡмы икәнен иҫләмәй". Ул да эшкә бара ла, һыуҙы яптыммы икән, тип шылтырата икән. Өҫкө ҡаттағы ғалим күршеләренең был ғәҙәте һөҙөмтәһендә фатирҙарын һыу ҙа баҫты.

Ысынында иһә, көнкүрештәге күп нәмәләрҙе беҙ автоматик рәүештә эшләйбеҙ. Сәй ҡайнағас, газды һүндерәбеҙ, ишекте бикләү ҙә үҙенән-үҙе эшләнә, ишекте бикләйем әле, тип бер кем дә уйланмай. Һөҙөмтәлә, ошондай ғәҙәт барлыҡҡа килә лә инде. Мин нисек уға ҡаршы көрәштемме? Башта, ишекте бикләнем, үтекте, газды һүндерҙем, тип ҡысҡырып әйтә инем. Хәҙер ул турала уйланмайым да. Көн һайын бикләп йөрөгән ишегемде бикләмәй китмәйем бит инде. Кейем үтекләүҙе лә кистән эшләргә күнектем.

Дөрөҫөрәге, был хаҡта онотоп та бөткәйнем инде. Бер таныштың ҡатынына зарланғанынан һуң иҫкә төштө. Микробтарҙан нык ҡурҡа, ти. Телефондар, һауыт-һаба, башҡа көнкүреш-кәрәк яраҡтары көн һайын дизенфекциялана, иҙән йыуғандан һуң сепрәк эҫе һыу менән ҡат-ҡат бешекләнә, тип һөйләй. Магазиндан ҡайтып, пакетынды яңылыш өҫтәлгә ҡуйырға ла ярамай, уға йәбешеп, төрлө бактериялар ҡайтыуы ихтимал, тип борсола, ти. Һөт, ҡаймаҡ ҡаптарын, шулай уҡ емеш-еләкте лә һабынлап йыуалар икән. Өйҙәге идеаль таҙалыҡ мине лә, балаларҙы ла ялҡытып бөткән, тигән танышыма ҡарап, ҡатынының йәшәү рәүешенә әйләндергән ғәҙәте ғаиләһенә күпме ҡыйынлыҡ килтерә, тип йәлләп алдым. Сәйер инде...

**Дилбәр ХӘКИМОВА.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



*Әкрәм БЕЙЕШ*

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

Шул уҡ ваҡытта Ырымбурҙың бойороғо буйынса Баймаҡта Башҡорт хөкүмәтенең ике ағзаһы (Иҙелбаев менән Мағазов) ҡулға алынып, бер ҡыҙыл банда командирының үҙ ирке менән атып үлтерелгән. Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыуы һәм ике ағзаһын атып үлтереүе менән милли политикала һис бер көслөккә юл ҡуймауҙы үҙенең принцибы итеп белдергән совет власы ҡот осҡос яманлыҡ ҡылған һәм үҙе сығарған декларацияларҙың нимәгә торош иткәнен тағы бер тапҡыр асып күрһәткән. Был ваҡиға тураһында рәсми хәбәр алған үҙәк Совет хөкүмәте Ырымбур губерна ревкомының эше менән һүҙһеҙ генә килешкән, тимәк, һис бер үлсәүгә һыймаҫ законһыҙлыҡты хуплаған.

Башҡорттар хөкүмәттең ҡулға алыныуына шаҡ ҡатҡан. Улар был эштең казак атаманы Дутов тарафынан түгел, ә бөтә халыҡҡа үҙбилдәләнеш хоҡуғы биргән совет власы тарафынан эшләнгәнен башына һыйҙыра алмаған. Хәл бик киҫкенләшкән. Ләкин хатта шундай мәлдә лә башҡорттар автономияны ҡотҡарыр өсөн яңы ҡыйыу аҙым яһарға көс тапҡан: "Тулҡын" тигән әҙәби йәштәр ойошмаһының ағзалары (III Бөтә Башҡортостан ҡоролтайының элекке делегаттары) хөкүмәт ҡулға алынғас та, 1918 йылдың 4 февраль көнө кис, урындарҙан килгән вәкилдәр ҡатнашлығында ашығыс йыйылыш үткәреп, яңы милли власть органы - Башҡортостандың ваҡытлы революцион советын (БВРС) - төҙөгән.

Ваҡытлы революцион совет үҙен Башҡорт Мәркәз шураһының эшен дауам итеүсе тип һанаған һәм III Бөтә Башҡортостан ҡоролтайының ҡарарҙарын, иң элек Башҡортостан автономияһы хаҡындағы ҡарарҙы, үҙ көсөндә ҡалдырған. "Элекке хөкүмәт ҡайһы бер хаталары арҡаһында ҡулға алынған өсөн генә башҡорт халҡының автономияһына ҡарата өмөтһөҙлөк күрһәтергә ярамай, - тип яҙған Ваҡытлы революцион совет "Башҡортостан" газетаһында, - ә, киреһенсә, башланған изге эште ғәмәлгә ашырыу көрәшен тағы ла ҙурыраҡ дәрт һәм көс менән дауам итергә кәрәк". Был эштә - автономияны ҡыйралыштан ҡотҡарыу эшендә - Ваҡытлы революцион совет совет власын асыҡтан-асыҡ ҡабул итеп, автономияны совет власы нигеҙендә ғәмәлләштереп кенә уңышҡа өлгәшеп була тип һанаған һәм үҙенең совет платформаһында торғанлығы хаҡында белдереү яһаған. Шуға күрә Ырымбур губерна ревкомы БВРС-ты шунда уҡ бөтөрөр өсөн һылтау тапмаған һәм уны танырға мәжбүр булған.

Совет платформаһына баҫҡан Ваҡытлы революцион совет ул замандағы башҡорт милли хәрәкәтендә яңғыҙ булмаған. Башҡорттар һәр төрлө демократик идара формаһына - совет формаһына, буржуаз формаға - бер тигеҙ риза булған, тик уның автономиялы үҙаллылыҡ биреүе кәрәк, тигән. Тимәк, ғөмүмән, башҡорт халҡы совет власына принципиаль рәүештә ҡаршылыҡ күрһәтергә уйламаған. Быны Крәҫтиәндәр съезына килгән 200 башҡорт бик яҡшы белдергән. Улар 1918 йылдың 26 февралендә махсус йыйылыш үткәреп, "башҡорт ерле автономияһы хаҡындағы изге теләккә зыян килтермәгән хәлдә ...башҡорттар Советтар менән ҡулға-ҡул тотошоп барасаҡ", тигән ҡарар ҡабул иткән.

**(Дауамы бар).**

***✓ Бөгөн кемдәрҙер уларға "Һин үҙең элекке эскесе, бөгөн кеше булдыңмы!" тип тә әйтә, әммә улар ярты ғүмерҙәрен һәм сәләмәтлектәрен ҡорбан иткән юлға кире ҡайтырға уйламай.***

# ЭСКЕЛЕККӘ

**Республикабыҙ ауылдарында барған бер ыңғай күренеште билдәләп үтмәү мөмкин түгел. Ул да булһа - эскелеккә ҡаршы көрәш. Ауылдарҙа төрлө ойошмалар булып йыйналған ир-егеттәр был эште үҙ ҡулдарына алды. Үткән һандарҙың береһендә "Ир-егеттәребеҙ ысынлап тотонһа, нимәне лә булдыра" тип яҙып сыҡҡайныҡ һәм әле лә шул фекерҙе дәлилләйбеҙ: ир-егеттәребеҙ ихласлап тотонһа, булдыралар шул! Райондарҙа эскелеккә ҡаршы барған һуғыштың ирекле көрәшселәрен йыйып алдыҡ һөйләшеүгә. Беренсе осрашыуға Күгәрсен районы "Ҡыпсаҡ" ойошмаһынан Вадим ӘЛМӨХӘМӘТОВ менән Денис АЙЫТҠОЛОВ, Ғафури районының "Табын ырыуы"нан Элмир МӨХӘМӘТЙӘНОВ, Баймаҡ районы "Баймаҡ башҡорттары"нан Илнар ҒӘЛИН, Әбйәлил районының "Бөркөт" ойошмаһынан Морат ЙӘНБИРҘИН һәм Сибай ҡалаһынан Илшат ХӘСӘНОВтар килде. "Беренсе осрашыу" тибеҙ, сөнки беҙ был күрешеүҙәрҙе төрлө район вәкилдәре менән даими үткәреп торорға тип ниәтләйбеҙ. Донъялыҡта кешелеккә ҡаршы алып барылған иң ҡурҡыныс һуғыштарҙың береһе ул - эскелек. Ә беҙ таныштырасаҡ егеттәр шул алыштың яугирҙары.**

**Бөгөнгө ауыл хәлен нисек баһалайһығыҙ? "Ҡарауыл" ҡысҡырырлыҡмы унда хәлдәр? Әллә шулай ҙа түҙерлекме?**

**Илшат Хәсәнов:** Яуап дөйөм генә юҫыҡта булмаһын өсөн аныҡ үҙем йәшәгән ҡасаба тураһында әйтеп үтәйем. Мин Сибай ҡалаһының Арҡайым ҡасабаһында йәшәйем һәм ундағы хәлдәрҙең маҡтанырлыҡ түгел икәнен билдәләйем. Сибайҙағы халыҡ беренсе йыл ғына эшһеҙ ыҙаламай. Эшһеҙлек арҡаһында хәҙер халыҡ фатир түләүҙәре менән иҫәпләшә алмай, күптәр үҙ йортонда йәшәүҙе ҡулайыраҡ күрә, шунлыҡтан, ҡасабаларға күсергә теләүселәр йылдан-йыл арта. Шуға ла ҡала эргәһендәге ҡасабалар үҫә. Шул сәбәпле төҙөлөштәр ҙә әүҙем алып барыла. Ә инде был төҙөлөштө кем нисек булдыра ала, шулай алып бара. Кемдәрҙер спиртлы эсемлектәр етештереп һата, кемдәрелер шуны эсеүгә ялланып эшләй, кемдәрелер булған аҡсаһын был ағыуҙы һатып алыуға ебәреп тора. Һәр кем йорт-ҡаралты күтәргәндә сығымһыҙыраҡ юлдарҙы, осһоҙораҡ ҡулдарҙы эҙләй, әммә нигеҙҙе был харамға бәйләп ҡороуҙың эҙемтәләре тураһында уйланған кеше бик һирәктер.

**Элмир Мөхәмәтйәнов:** Беҙҙең Еҙем Ҡаран ауылында эшкә ялларлыҡ та ир-егеттәр ҡалмаған хәҙер. Алкоголле эсемлек һатыусылар ҙа юҡ тиерлек, сөнки уларҙың һатып алыусылары ҡырылып бөткән. Берәү мәрхүм булып ҡалғанда ҡәбер ҡаҙырлыҡ ир заты табыуы ауыр - ышанаһығыҙмы? Урта быуын эскән ағайҙар ғибрәтле ғүмер кисереп, теге донъяға китеп бөттөләр, ә йәштәр эсә тип әйтмәҫ инем. Күптән түгел клубҡа сығып, рейд яһағайныҡ, егеттәр айыҡ, үкенескә күрә, ҡыҙҙар тураһында улай тип әйтеп булмай ине.

**Илнар Ғәлин:** Тыуған төйәгем Баймаҡ районының Байым ауылында йөҙ иллегә яҡын хужалыҡ һаналһа, шуларҙың егермегә яҡыны буш тора. Ауылда бары тик оло быуын вәкилдәре генә ҡалып бара, йәштәр ситкә китә. Йәш ғаиләләрҙе ауылдан айырған иң беренсе бәлә - эшһеҙлек. Баймаҡ районында был бигерәк тә һиҙелә. Эргәләге Әбйәлил йәштәре, мәҫәлән, яҡындағы Мәғнит ҡалаһына йөрөп эшләй ала, күрше бөрйәндәр ғүмер буйы шөғөлләнгән урман кәсебе менән тамаҡ туйҙыра. Ә баймаҡтарға ауылдарын ҡалдырып, көнитмеш эҙләп китеүҙән башҡа сара ҡалмай. Әллә күпме ерҙәр ҡыйланып, буш ятһа ла, халыҡ һаман ерҙән туйынып йәшәү ысулдарын белеп етмәй.

**Морат Йәнбирҙин:** Әбйәлил районында йәштәр, киреһенсә, ауылдарҙа ҡалырға тырыша, тик бер проблема - йорт һалырға ер юҡ. Тәбиғәте ҡатнаш, тауы ла, урманы ла, күле лә, яланы ла булғанғамы, әллә яҡында Мәғнит, Силәбе ҡалалары ятҡанғамы, ерҙәребеҙҙе ситтән килгәндәр эләктереп бөтөп бара. Районды тотош ял зонаһы итеп алдылар. Ерҙәр һатыла ул, тик улар үтә ҡиммәт. Шул районда, ауылда тыуып үҫкән йәштәр үҙ төйәктәренән йорт төҙөрлөк урын ала алмай ыҙалана. Күп балалы ғаиләләргә бирелгән ерҙәр ҙә ҡайҙалыр яҡтан ялан-ҡырҙарҙан булып сыҡты. Ауыл кешеһенә тота килеп ҡайҙалыр ҡырға йәки икенсе ауыл ерлегенә барып ултырыу еңелдән түгел. 2012 йылдан алып халыҡҡа ағас та бирелмәй. Ошо ер һәм ағас мәсьәләләре менән республика етәкселегенә лә сыҡтыҡ, әле яуап көтөп торабыҙ.

**Егеттәр, һеҙҙең барығыҙҙы ла берләштергән һәм фекерҙәш иткән төп эш - эскелеккә ҡаршы көрәш, шулай бит? Нисек ҡабул итә һеҙҙең был миссияны халыҡ? Хуплайҙармы, ҡаршылыҡтар бармы, ауыл етәкселеге нисек ҡарай һәм башҡа ошо юлда кисергәндәрегеҙ-күргәндәрегеҙ хаҡында ишетәйек әле?**

**Морат Йәнбирҙин:** Эскелеккә ҡаршы көрәш халыҡ араһында электән дә барҙы ул. Барыһы ла эсеп кенә йәшәмәне бит инде. Ниндәйҙер эскән төркөм булды, эсмәгәне лә бергә донъя көттө. Ғәҙәти, айыҡ кеше эскәнде яратмай һәм улар араһында һәр ваҡыт ҡапма-ҡаршылыҡ була. Ә беҙҙең ойошмалар барлыҡҡа килеп, йәғни шулай ҡапыл барлыҡҡа килеп, ҡапыл үҫеш алыуының сәбәбе күптән түгел булып үткән Темәс ваҡиғаһынан башланды. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ул "Темәс ваҡиғаһы"на рәхмәтлебеҙ беҙ. Был хәл беҙҙең егеттәргә һалҡын һыу һибеп ебәргән кеүек тәьҫир итте.

**Денис Айытҡолов:** Эскелек мәсьәләһе һытылырлыҡ шеш булып етешкәйне инде ул. Шуға ла ауыл халҡы беҙҙең эштәрҙе насар ҡабул итмәй. Әлбиттә, битарафтар күберәк. Ауыл кешеләре бит күрше-тирәһе менән талаш-тартышһыҙ йәшәргә ынтыла, эргәләгеләре ниндәй генә тормош алып барғанда ла ҡыҫылмаҫҡа тырыша, күп нәмәгә күҙ йома. Шунлыҡтан, беҙҙең тота килеп берәүҙәрҙең йортона кереп, "эсмәгеҙ, араҡы һатмағыҙ" тип шелтәләп йөрөүебеҙҙе хатта әҙәпһеҙлек итеп ҡабул иткәндәр ҙә бар. Йәнәһе, улар башҡаларҙың шәхси тормошона ҡыҫылмай инде. Был, минеңсә, мәҙәниәтле лә, әҙәпле лә булыу түгел, ә бөтөн хилафтың сығанағы булған енәйәт менән өнһөҙ ризалашыу ғына. Йәғни, фекерһеҙ һәм принципһыҙ булыу.

**Морат Йәнбирҙин:** Әбйәлил районының Шәрип ауылында, мәҫәлән, ике йөҙләгән кеше йәшәһә, беҙ ойошторған йыйында ир-егеттәрҙең барыһы ла ҡатнашты. Дүрт кеше булмағайны, шуларҙың тик береһе генә эскелек арҡаһында килә алманы, тинеләр. Ҡалған барыһы ла беҙҙең йыйынға килеп ултырҙы. Элек эскән ағайҙар сығып һөйләне. Улар ошо үткән юлдары тураһында ғибрәтле ваҡиғалар бәйән итте, эскән һәм эскеһеҙ тормошто сағыштырып, миҫалдар килтерҙеләр. Бөгөн кемдәрҙер уларға "Һин үҙең элекке эскесе, бөгөн кеше булдыңмы!" тип тә әйтә, әммә улар ярты ғүмерҙәрен һәм сәләмәтлектәрен ҡорбан иткән юлға кире ҡайтырға уйламай. Алкоголь һатылған өйҙәргә йөрөгәндә лә был ағайҙар ауылдаштары менән үҙҙәре үк һөйләшә, күҙҙәренә тура ҡарап, ҡыйыу мөғәмәлә итә. Ороп-бәреп түгел, ә ауылса, яҡын кешеләрсә, аңлатып, талаптар ҡуйып эш итә беләләр. Ошондай ир-егеттәре булған ауылдарҙа "эскелек бөттө" тип әйтергә лә була. Әбйәлилдә район етәкселеге лә, ауыл хакимиәттәре, полиция бүлеге лә, ағинәйҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар советы ла беҙҙең менән ошо юҫыҡта бер йөктө тарталар. Рейдтарға бергәләп сығабыҙ, бындай етди төркөмдәрҙе, әлбиттә, бөтә ерҙә лә шулай уҡ етди ҡабул итәләр.

**Беҙҙең йәмғиәттә оҙаҡ йылдар "Эскелек - ул ауырыу" тигән ныҡлы фекер йәшәне. Эскесегә "ауырыу" диагнозы ҡуйылып, уға дауалар, хатта мәжбүри дауаланыу тәртибе булдырылды. Был диагноз унан күп яуаплылыҡты систе, башҡалар уны йәлләргә, аңларға тейеш икәнлекте башҡа һеңдерҙе. Һеҙҙең фекерегеҙсә, кем ул эскесе, ул ысынлап та ауырыумы?**

**Илшат Хәсәнов:** Сталин заманында сыҡҡан "Ҙур энциклопедия" ла "Алкоголь - ул хәүефле ағыу" тип яҙылғайны. Хрущев ваҡытында был яҙма "ағыу" булыуҙан туҡтап, "Алкоголде артыҡ ҡулланыу хәүефле" тигән төшөнсәләрҙә генә ҡалдырылды. Бөгөнгө китаптарҙа ул "пищевой продукт" тип кенә күрһәтелә. Ошоларҙан сығып анализлағанда ла шул күренә: Хрущев ваҡытынан алкоголле эсемлектәрҙе пропагандалаған маҡсатлы дәүләт сәйәсәте алып барыла. Кинофильмдарҙа мәҙәни эскелекте матур итеп күрһәтәләр. Йәғни, "Еңеү өсөн", "Яңы йыл өсөн", "Яңы ғаилә өсөн" тип, экрандарҙа рүмкә түңкәреүҙәр, "Пей до дна!" тип ҡысҡырыуҙар, ҡул сабыуҙар һәм башҡалар ғәҙәти хәлгә әйләнде. Бөйөк Ватан һуғышынан алда ла беҙҙең халыҡта әле эскелек булмаған. Өләсәйем һөйләүенсә, ирҙәр эсеү-тартыу кеүек яман ғәҙәттәргә һуғыштан өйрәнеп ҡайтҡан. Унда ла барыһы ла түгел. Һуғыштан һуң ауылдарҙа эсеп йөрөгән фронтовиктарға ла ҡырын ҡарағандар. "Зимагур", "дуңғыҙ" тип әрләп йәки йәлләп ҡарап ҡала торған булғандар.

**Илнар Ғәлин:** Күптән түгел Госдуманың бер депутаты "Атаәсәләр балаларын мәҙәни эсеүгә өйрәтергә тейеш" тигән кеүегерәк фекер әйтте. Тимәк, беҙҙең илдә алкоголь миллионлап аҡса өйөрөлтөүсе баҙар, кемдәрҙеңдер алтын инеше генә. Дәүләткә эскелекте "ауырыу" тип күрһәтеү ҡулай. Улар өсөн махсус дауаханалар булдырылды, табиптар тотола, йәғни эш урындары ҡаралған. Ә күпме дарыуҙар, препараттар сығарыла һәм һатыла, был да килем килтерә. Күреүегеҙсә, бындай ауырыуҙар ни тиклем күберәк булһа, табыш та шулай үҫә генә. Ошо урында сағыштырыу өсөн бер миҫал: Кавказ халыҡтарында һәм ҡайһы бер мосолман илдәрендә эскесене ауылдан ҡыуалар, улар айырым хуторҙа көн итә. Туғандары, зат-ырыуы, ырыуҙаштары уның был көсһөҙлөгө, мәсхәрә ғәҙәтенә тура мәғәнәһендә төкөрөп ҡарай. Йәлләмәйҙәр ҙә, дауаламайҙар ҙа, хатта бындай түбән әҙәмгә ер ҙә бирмәйҙәр. Һәм, әлбиттә, зыяраттарына ла ерләтмәйҙәр. Борон беҙҙә лә шулай булған һәм ошо йоланы кире ҡайтарыу фарыҙдыр тип уйлайым.

**Элмир Мөхәмәтйәнов:** Бөгөн ауылдарҙа эскән кешеләр башлыса совет осоронда үҫкән быуын. Уларҙың эсеүенә аптырарлыҡ та түгел. Әле күптән түгел генә Яңы йыл байрамдарында совет осороноң яратҡан киноларын ҡараныҡ. Был фильмдар көнө-төнө күрһәтелеп торҙо. "Шуриктың мажаралары", "Еңел быу менән", Ы" операцияһы", "Самогонсылар", "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр" кеүек фильмдар ҡыҙыҡ та, тик улар тотошлайы менән шундай күңелле һәм ғәҙәти эскелеккә ҡоролған. Уларҙа эсеп алған әҙәмдең бөтөн ҡылыҡтары күҙ алдында, улар ҡыйыулана, йылғырлана, быға саса башҡара алмағандарын башҡарып ташлай. Иҫерек кеше герой, ул шундай мәрәкә, ул барыһын да көлдөрә. Нисәмә йылдар күрһәтелгән ошондай фильмдар ғына ла кешенең аңына эскелекте бәлә итеп түгел, ә байрам, мажара күренеше, аралашыу ысулы булып һеңдереүгә булышлыҡ иткән. Ниндәй генә килешеүҙе лә, байрам сараһын, туйҙарҙы, йыйындарҙы ла шул араҡы башлап асҡан. Йәғни, совет осоро быуындары өсөн эскелек - ул йәшәү рәүеше булған.

**Ошо тәңгәлдә шундай һорау тыуа, егеттәр: кешеләрҙең шәхси биләмәләренә инеп, ысынлап та уларҙың шәхси эштәренә тығылыу, хоҡуҡтарын сикләү булып сыҡмаймы өйҙән-өйгә йөрөү, нимәләрендер тартып алыу, тыйыу, вәғәз уҡыу? Ошо эштәрҙе яҡлаған йәки ошолай эшләргә рөхсәт иткән ниндәй закондар бар? Ауыл биләмәләре Уставында "Был биләмә сиктәрендә йәшәгәндәргә спиртлы эсемлектәр етештереү һәм һатыу тыйыла" тигән пункт бармы ул?**

**Морат Йәнбирҙин:** Быйылғы йылды төрлө башҡорт ойошмалары "Эскелеккә ҡаршы һуғыш йылы" итеп иғлан итте. Егерменән ашыу район ир-егеттәренең ҡарары булды был. Шунлыҡтан, Алла бирһә, бик етди, хатта ғәййәр бер программа буласаҡ. Үкенескә күрә, ауыл биләмәләре уставында бындай юлдар юҡ, әммә беҙ биләмә етәкселәре, ауыл халҡы менән һөйләшеп-кәңәшләшеп, был пункттарҙы уставҡа индереп ҡуйырға уйлайбыҙ. Ауылдарҙағы һатыу итеү нөктәләрендә лә спиртлы эсемлектәр менән сауҙа итеүҙе бөтөнләй тыйыу юлдары ла ҡарала әле. Тәртип буйынса, алкоголле эсемлектәр һатҡан магазин балалар учреждениеларынан өс саҡрым алыҫлыҡта ултырырға тейеш, әгәр ошо талаптар үтәлһә, был магазиндар ауылдарҙан сығып уҡ китергә йәки ситкә шылырға мөмкин. Был үҙе үк уларҙың мөмкинлектәрен сикләйәсәк. Бәхеткә күрә, ошо эштәр башланғас, ҡайһы бер магазин хужалары үҙҙәре үк был хәйерһеҙ сауҙанан баш тартты.

**Денис Айытҡолов:** Беҙҙең күптәребеҙҙең ойошмалары әле теркәлеү өҫтөндә. Үрҙә әйтелгәнсә, беҙ өйҙәр буйлап ауыл хакимиәттәре вәкилдәре менән бергәләп йөрөйбөҙ һәм уларҙың да, беҙҙең дә сығарып күрһәтерлек тейешле документтарыбыҙ бар. Асылда, эскелеккә ҡаршы көрәш алып барылғанда һәм кемгәлер инеп, "Ауылдаштарыңды эсермә" тип әйткәндә ниндәйҙер танытма мотлаҡ та түгел. Бында маҡсаттарыңдың изге булыуы ғына мөһим.

**Вадим Әлмөхәмәтов:** Ауыл биләмәләре уставында йә башҡа документтарында, ғөмүмән, беҙҙәге закондар төҙөлөшөндә уйлап еткерелмәгән урындар етерлек ул. Мәҫәлән, ауылдарҙа эскелек менән шөғөлләнгән ҡатындарҙы ни эшләтергә белеп булмай. Ҡатын-ҡыҙға ҡаты бәрелеү ҙә ауыр, ниндәйҙер ҡәтғи саралар ҡулланырға теләһәң, балалары йәл. Опеканың да ҡулын сикләгән нәмәләр күп. Ошо тәңгәлдә ҡатын-ҡыҙҙар менән ағинәйҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар ойошмалары етдиерәк шөғөлләнһен ине, тибеҙ инде. Юғиһә, был

***✓ Бер кем дә алкоголик булам тип эсмәй. Һәр кем, бер аҙ эсәм дә, артабан туҡтайым, тип уйлай, шуға ышана. Ана шул иллюзия контролен тыуҙыра ла инде. Ләкин күптәр байрамда ғына тип башлай ҙа, даими ҡулланыуға күсеп китә.***

ойошмалар күберәк йола, уйын-байрам юҫығына төшөп китте. Әлбиттә, уныһы ла кәрәк, әммә эскән ҡатын-ҡыҙға йола ни ҙә, милли кейем ни...

**Ҡатын-ҡыҙ темаһы ҡуҙғалғас, әйҙәгеҙ әле, ҡатын-ҡыҙҙы эскелек, бәйһеҙлек кеүек насар ғәҙәттәрҙән арындырыу, милләт әсәләре булған һәм буласаҡ гүзәл заттарыбыҙҙы тәрбиәләү алымдарын ҡарап үтәйек.**

**Элмир Мөхәмәтйәнов:** Бөгөн ҡатын-ҡыҙға еңел түгел, эйе, уларҙың күптәре бөтөн ғаилә йөгөн һөйрәп бара, күптәре яңғыҙ бала-саға тәрбиәләй, уҡыта. Хатта ирҙәре булғандар ҙа йыш гә әүәҫләнә һәм был бәлә бары тик ныҡ көсәйгән һәм ҡотолғоһоҙ булып етешкәндә генә туғандарына, иренә һәм башҡаларға билдәле була. Йыш ҡына улар шулай йәшеренеп эсеп йә йөрәктәре туҡтап, йә ҡан баҫымдары күтәрелеп, һәләк булып та ҡуялар. Бындай осраҡтар йышайҙы. Унан туғандары "Ҡасан эсергә өйрәнде икән?" тип аптыраша. Күңелһеҙ күренештәр, әммә былар - факт.

**Илнар Ғәлин:** Ир-егеттең йыуаашайыуы, яуапһыҙлығы һәм моңһоҙлоғо ҡатын-ҡыҙҙың эскелек һәм башҡа яман ғәҙәттәренә юл ҡуйыусы беренсе сәбәп ул. Бына ауылдағы бер күренеш. аралашыу мөмкинлеге, һыуһын ҡандырыу һәм тынысланыу сараһы. Ваҡыт үтеү менән һыраһыҙ көндәр аҙая, һиҙҙермәйенсә генә уның күләме арта, эсеү ваҡыты кистән - көндөҙгә, хатта иртәнсәккә күсә килә. Эсемлектән ауыҙ итмәһә, кеше ҡуҙғыусанға әйләнә, хәлһеҙлек күҙәтелә. Унан организмда "көтмәгәндә" алкоголизмға булышлыҡ итеүсе биохимик процестар үҙгәрә.

Һыра алкоголизмы айырыуса йәштәргә, шул иҫәптән реклама йоғонтоһона тиҙ бирелгән балаларға ҙур хәүеф менән янай. Бынан тыш, һыраның файҙаһы хаҡында ла алдаҡсыс һүҙҙәр йөрөй. Ысынлап та, һыраның ойошмалары мотлаҡ махсус шарттар тыуҙырырға бурыслы. АҠШ-та 0,3 литрҙан ҙур һауытҡа ҡойоп һатыу тыйыла (беҙҙә иһә йәнең теләгән миҡдарҙа ал). Былар барыһы ла - "һыра университеттарының" урынлашыу араһы, һауыт ҙурлығы, рекламаларҙа кешеләрҙе төшөрөүҙе тыйыу һ.б. - ҡануниәткә ярашлы башҡарыла. Беҙҙә, бәлки, закондарға төҙәтмәләр индерергә кәрәктер? Юғиһә, тиҙҙән был закондарҙы белеүсе лә ҡалмаясаҡ...

**Илшат Хәсәнов:** "Көнөнә 0,5 литр һыра эсеү зарарһыҙ" тип раҫлаусы күп кенә ғилми мәғлүмәттәр йәшәй. Әммә һыраның



# ҠАРШЫ ОЛО ЯУ

ҡына бөтөн проблемаларҙы бер үҙҙәре хәл итеп йәшәй. Был йөктө күтәрә алмағандар ҙа, шул уҡ ваҡытта намыҫлы күтәреп, абруйлы, хөрмәтле апайҙар булып көн итеүселәр ҙә бар. Ире эсмәй, әммә ҡатыны эсә икән, бында иң беренсе уның ире ғәйепле. Ни өсөн ул ҡатынына эсергә рөхсәт итә? Мәҫәлән, беҙ өйләнешкән йылдарҙа ҡатыным мәжлестәрҙә бокалын ауыҙлап ҡуя, һыйлағанға ҡаршы килә алмай ине. Мин өҫтәл артында бер ваҡытта ла уның ҡулынан тотманым. Әммә икебеҙ генә булғанда эскелектең харамлығын аңлата, ҡайһы саҡта "мин йәки шарап" тигән һайлау алдына ла ҡуя инем. Аҡыллы ҡатын был талапты тейешенсә ҡабул итә. Әгәр ҡатыны эсә икән, ир кешенең эсмәүе лә, дин тотоуы ла маҡтауға лайыҡ түгел. Ул ҡатыны өсөн, ҡатын-ҡыҙ туғандары өсөн яуаплы. Уларҙы, аңлатып булмағанда, ҡатылыҡ менән тыйырға бурыслы.

**Морат Йәнбирҙин:** Ауылдарҙағы эшләргә һәм ғаиләһен аҫырарға теләгән ир-егеттәрҙең ситкә китергә мәжбүр булыуы йәш ҡатындарҙың үҙаллы ҡалыуына килтерҙе. Һәм был аулаҡ йәшәйеш күп осраҡта файҙаға түгел. Ҡатындар әхирәттәре менән, күрше-тирәһе менән йыйылып, күңел асыуҙарға күнекте. Ошо кәйеф-сафа ҡороу күп кенә күңелһеҙ эҙемтәләргә килтерә лә инде. Ә эскелеккә әүрәгән ҡатын-ҡыҙҙы был юлдан тартып алыу бик ауыр, хатта мөмкин булмаған хәл. Ҡатындарҙың күбеһе өйҙәрендә йәшеренеп эсеү-

Туй йәки берәй тантана икән, ҡатыны алға сығып, ҡотлау һүҙе әйтә, телмәр тота, ә уның артындағы ир мәшәү генә баҫып тора. Танышмы был күренеш? Таныш, әлбиттә. Йәки балалар баҡсаһындағы һәм мәктәптәрҙәге ата-әсәләр йыйылышы. Унда балалары яҙмышын бары тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына хәл итә. Әлеге беҙ ойошторған ауылдар йыйынына ла иң беренсе ҡатын-ҡыҙҙар килеп ултыра. Һәм йыйынды ла ағинәйҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар советы етәкселәре алып барырға теләй. Был тәңгәлдә беҙ былай итәбеҙ: апайҙарҙы тыңлайбыҙ ҙа, артабан ир-егеттәр үҙҙәре генә кәңәш ҡора, тип, уларҙы ипле генә итеп оҙатабыҙ. Әйҙәгеҙ, теҙгенде үҙ ҡулыбыҙға алайыҡ, ир-егеттәр, ул ваҡытта ҡатын-ҡыҙ ҙа үҙ тәғәйенләнешен аңлар.

**Беҙ бөгөн эскелекте төрлө сортлы, төрлө һәм категориялы эсемлектәр алкоголизмына ла бүләбеҙ. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар араһында һыра алкоголизмы, ауылдарҙа самогон, техник спирт төрҙәре алкоголизмы һәм башҡалар. Берәүҙәр "Һыра һәм шампан зыянлы түгел" тиҙәр, икенселәр "Эштән һуң йотолған илле грамм файҙалы" тиҙәр. Ә асылда?..**

**Денис Айытҡолов:** Асылда, эскелек ул ниндәй миҡдарҙа ла эскелек һәм организмға ла, аңға ла, сәләмәтлеккә лә зыян. Бөгөнгө көндә, ҡыҙғаныҫҡа күрә, күптәр өсөн һыра - тормоштоң айырылғыһыҙ атрибуты, модалы "зарарһыҙ" эсемлек, еңел нигеҙен витаминға, аҡһым-майға, углеводҡа бай булған арпа тәшкил итә. Әммә һоҫла (араҡы, һыра яһай торған ҡуйы шыйыҡлыҡ) составындағы әсетеүсе микробтар арпаның файҙалы сифаттарын үлтерә. Был хаҡта һәм һыра алкоголизмынан дауалауҙың да араҡыныҡы кеүек үк ауыр икәнен, әлбиттә, һөйләп бармайҙар. Араҡыға ҡарағанда һыра күпкә мәкерлерәк. Кешеләрҙең "көсһөҙ" тип алданыуы менән ҡурҡынысыраҡ.

**Элмир Мөхәмәтйәнов:** Беҙҙең илдә һыраға ҡарата түҙемле мөнәсәбәт кенә йәшәмәй, ул хатта хуплана ла кеүек. Дәлил итеп Өфөнөң, мәҫәлән, бер урамын ғына алып ҡарайыҡ. Мәктәптән 100 метр тирәһе генә алыҫлыҡта "Һыра академияһы" урынлашҡан, йәғни "мәктәптән - тура академияға".

Реклама ла тәү сиратта йәштәр өсөн тәғәйенләнгән. Хатта хәҙер арзан "көсһөҙ" спиртлы эсемлектәр ярҙамында йәштәргә ҡаршы һуғыш алып барыла тип әйтергә лә була. Һөҙөмтәлә, ата-әсәһенең күҙе алдында айыҡ балалар - эсергә яратҡан йәштәргә, ә эскән йәштәр эскесе ата-әсәгә әүерелә. Һыра субкультураһының быуындарҙың деградацияһына, ә аҙаҡ халыҡтың юҡҡа сығыуына алып килеүсе наркотизмдың башланғысы икәне аңлашылмаймы икән ни?

Европала һыра алкоголизмы - иң киң таралған наркологик ауырыуҙарҙың береһе. Шулай ҙа Европа илдәрендә һәм Америкала әһәмиәтле сикләүҙәр бар. Мәҫәлән, Чехияла һыра һатыу ойорганизмға яһаған зарары араҡыныҡынан кәм түгел: баш мейеһе күҙәнәктәре үлә (һөҙөмтәлә, үле күҙәнәктәр ҡанға эләгә, бөйөрҙә фильтрҙан үтеп, һейҙек менән сыға); арҡа мейеһенең функциялары боҙола; бауыр циррозы, гепатит, панкреатит, гастрит, невропатия күҙәтелә; ишетеү һәм күреү анализаторҙары ҡаҡшай. Ошондай мәғлүмәт тә урынлы булыр: һыра баҙары тулыһынса тиерлек сит ил капиталы күҙлеге аҫтында. Мәҫәлән, "Балтика"нан алынған килем - Скандинавияға, "Старый мельник"тыҡы - Төркиәгә, "Толстяк"тыҡы - Бельгияға, "Бочкарев"тыҡы - Испанияға, "Алтын мискә"неке - Көньяҡ Африкаға китә, башҡалары йә Дания, йә Германия, йә бүтән ил капиталын тулыландыра. Күпселек сеймал сит илдән килтерелә. Рәсәйҙән нимә, тиһегеҙме? Аҡса. Һеҙҙең балаларығыҙға, ғаиләләрегеҙгә йүнәлтә торған аҡсаларығыҙ. Әйткәндәй, Көнбайыш Европа илдәрендә, хатта Германия менән Бельгияла ла, һыра эсеү кәмей, әммә етештереү арта ғына. Кем эсә инде уларҙы? Уйланығыҙ...

**Егеттәр, һеҙҙең башҡарғандар, әлбиттә, хуплауға ғына лайыҡ. Был беҙҙең халыҡтың ысынлап уяна, күтәрелә, таҙара, үҫешә торған һынылышлы осоролор. Һөйләшеүҙе йомғаҡлап, ниндәй һығымталар яһарға мөмкин?**

**Вадим Әлмөхәмәтов:** Эскелеккә ҡаршы көрәш рухы һәр кешенең үҙ башында булырға тейеш. Шуныһы ҡыуанаслы: эскелектең стратегик бәлә икәнен аңлаған, кешеләрҙе тура мәғәнәһендә айыҡ фекерләргә саҡырған кешеләр бихисап. Бер кешене лә алкоголизмдан көсләп ҡотҡарып булмай. Сәбәптәре күп: физик бәйлелек, рухи бушлыҡ, үҙеңде таба алмау, файҙалы шөғөлөң булмау һәм башҡалар. Әлбиттә, эскән кешенең ихтыяр көсөн, йәшәү теләген ҡушып, упҡындан сығыу юлдарын табырға мөмкиндер ҙә, бәлки. Әммә эскелеккә ҡаршы көрәш кеүек эшмәкәрлек тәү сиратта әлегә бер тапҡыр ҙа араҡы татып ҡарамаған йә булмаһа, эскелек упҡынына табан беренсе аҙымын яһаған йәштәргә арналырға тейеш. Сөнки, үкенескә күрә, эскелек һаҙлығына батып өлгөргәндәрҙе ҡотҡарыу бик ауыр һәм улар тәбиғи рәүештә ҡырылып бөтөүгә дусар ителгән. Беҙгә йәштәштәребеҙҙе, йәш ғаиләләрҙе һәм балаларҙы һаҡлап алып ҡалырға кәрәк.

**Илшат Хәсәнов:** Бер кем дә алкоголик булам тип эсмәй. Һәр кем, бер аҙ эсәм дә, артабан туҡтайым, тип уйлай, шуға ышана. Ана шул иллюзия контролен тыуҙыра ла инде. Ләкин күптәр байрамда ғына тип башлай ҙа, даими ҡулланыуға күсеп китә, ниндәйҙер негатив тойғолар, стресс ваҡытында ҡул үҙенән үҙе шешәгә үреләлә. Ә бөгөнгө тормош ул бит даими стресс сығанағы. Кеше бар яҡлап ҡурҡыуҙар ҡоршауында. Эшемде юғалтып ҡуймайым, начальник ҡысҡыра, аҡса етмәй, бар нәмә ҡыйбатлана, етеш йәшәге, матур кейенге, хыялдарҙы тормошҡа ашырғы килә... Бында төрлө миҫалдар килтерергә мөмкин. Шуларҙың иң ябайы: эсмәгәс, һеҙҙең аралашыр дуҫтарығыҙ ҙа, туғандарығыҙ ҙа ҡалмаған кеүек була. Эсмәгән ғаилә булғас, беҙҙе, мәҫәлән, башта туғандар ҙа ҡунаҡҡа саҡырмай ине. Беҙҙең эскелекте хупламауыбыҙ уларға ла кәртә булып торғандыр, күрәһең. Бына ошондай ҡараш күп кенә эсергә теләмәгәндәрҙе һындыра ла бит ул. Йәштәр оло-ларҙың ҡыҫымына бирешеп тә ҡуя. Йәнәһе, һин кем әле эсмәй ултырырға? Йәнәһе, оло кешенең ҡулын мәхрүм итмәгеҙ һ.б. Беҙ ҙә ошо тупһаларҙы үттек. Аллаға шөкөр, бөгөн балаларыбыҙ "иҫерек"тең кем һәм нимә икәнен белмәй. Эскән кешене күреп, "Атай, уға нимә булған?" тип һорап ҡуялар. Һәм белергә лә яҙмаһын, тип теләйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был һөйләшеү оҙайлы һәм мауыҡтырғыс булды. Егеттәр ҡыйыу-ҡыйыу фекерҙәр әйтте, төрлө хәлдәргә миҫалдар килтереп, фактдарға таянып уй йөрөттө, фаразланы. Һәр береһе үҙ төбәгенән шундай бай мәғлүмәттәр, тәҡдимдәр, пландар менән килгәйне. Әле башҡарылып өлгөргән, башҡарылаһы, хыял ителгәне лә күп ине эштәрҙең. Аҫыл-аҫыл ир-егеттәребеҙҙең аҡыллы, тос хәбәрҙәрен, грамоталы һәм эҙмә-эҙлекле эш итеү алымдарын, алдынғы ҡарашлы булып, киләсәкте ҡайғыртып ҡыйыу аҙымдар яһауҙарын тыңлап-күҙәтеп тантана иттек.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

Нурислам ағай егеттең күҙенә ҡарап алды.

- Протоколға Шамилды яҙып тормайбыҙ инде. Уға ла штраф сәпәһәләр, булыр унан Шәрифәнең ярыҡ ҡомғаны. Ағас һиңә кәрәк булған. Шулай бит?

- Миңә тип, олатайға... Эйе. Штрафы ҙурмы ни?

- Сумманы әйткәйнем, атайың йығылып китте инде былай, ундай аҡсаны төшөңдә лә күргәнең юҡ, алтмыш меңгә яҡын.

- Алдама әле, бер ҡарағасҡамы? Һин нимә, Нурислам ағай? Көлдөрмәле, зинһар, - тыныс Фәнил йәнләнеп китте. Хатта ауыҙын усы менән ҡаплап көлөп алған булды.

Нурислам оҙаҡ ҡына яҙҙы ла, дөрөҫ булһа, бына ошонда ҡул ҡуй тип, ҡағыҙ менән ручканы Фәнилгә һуҙҙы. Уныһы уҡып сыҡҡас:

- Шулай дөрөҫ, мин ҡырҡтым. Тик ул тиклем сумманы мин мәңге түләй алмаясаҡмын, - тип ҡултамғаһын ҡуйҙы. Үҙе һаман көләмһөрәне. - Беренсе апрель мәҙәге түгелдер был. Дөрөҫөн генә әйт әле, был шаярыуымы ул, Нурислам ағай? - Фәнил һаман лейтенантҡа ҡараны.

- Юҡ шул, туған. Дөрөҫө шул. Үҙәк тотонғас, түләтәсәктәр барыбер. Бына квитанция. Яҡын арала түләмәһәң, алып барып ябам үҙеңде.

- Бына һиңә кәрәк булһа! Төрмәгәме? Круто был. Бер ғәйепһеҙгәме?

Эш бөттө, тигәнде белдереп, Нурислам урынынан торҙо.

- Өс көн ваҡыт һиңә. Ғәйепле икәнеңде дәлилләп ҡултамға ҡуйҙың бит инде. Бар, аҡса йый.

Быларҙы тауыш-тынһыҙ ғына тыңлап ултырған Рәүеф сығыр саҡта Нурисламдан:

- Әлфиә класташ ни хәлдә? Ҡайтҡаны юҡмы? - тип һораны. Үҙенсә бындағы ҡырҡыу хәлде йомшартҡыһы килдеме, әллә ысынлап та йәшлек мөхәббәтен һағыныуы шулай һорарға мәжбүр иттеме, әллә, беҙ һинең ҡыҙыңдың класташтары, ярҙам итә күр тип, аңғартырға теләүе булдымы, аңламаҫһың, бөтөнләй башҡа соус өҫтәп ебәрҙе һөйләшеүгә. Аптырап китте лейтенант, уның ҡыҙының бында ни эше бар, тип уйлап алды тәүҙә. Шунан аңра Рәүефтең башҡа нәмә менән ҡыҙыҡһыныуын аңлағас, тупаҫ ҡына:

- Нимә булһын уға, класташы менән ҡыҙыҡһына бәрәү... Бар, ана аҡса йыйығыҙ, - тине.

* * *

Саңлы юлдан барғанда Шомаdebbуң "Радуловлы" өйәнәге тағы бер тапҡыр ҡабатланды. Тик был юлы: "Тиҙерәк ҡасайыҡ, бүреләр килә",- тип йонсотто. Ә үҙ зиһене, үҙ аҡылы аяҙ сағында, юҡҡа ғына алып бараһығыҙ, ауырымайым, төшөп ҡалам, тип ҡаҡшатты. Водитель менән район үҙәгенә юл алыусы ике ир ауылдашы көскә-көскә ике ҡулын шаҡарып машина ултырғысының арҡаһына бәйләп ҡуйғас, бөтөнләй тымды егет. Башын аҫҡа эйеп: "Ҡайтырға, ҡасырға, - тип уйланы. - Нисек аңламайҙар һуң, ысынлап ауылға, ауыл урамдарына бүреләр үтеп инеп бара бит. Уға серек күрәҙә булырға ла кәрәкмәй. Аттарҙы ғына түгел, кешеләрҙе ашап бөтәсәктәр. Ул хайуандар бүре сүрәтендә генәме һуң?"

Район үҙәгендәге дауаханала тәүҙә бөгөн ниндәй көн икәнен, шунан тыуған көнөн һоранылар. Шамил бар һорауға ла дөрөҫ кенә яуап бирҙе. Табипта бер сама шик тә тыуа биреп ҡуйҙы, ауырымай түгелме, барыһын да белә, иҫләй. Оҙатып килеүсе медтуташтан ауырыуҙың өйөндәге һәм юлдағы мажараларын һөйләткәс, тағы уйға ҡалды. Шунан ул ҡапыл Шамилдың елкәһенән "еп" алған булды ла, уны бармағына урарға ҡушты. Эй егет юҡ епте урарға тотонмаһынмы. Хәҙер, хәҙер урап бөтәм, тип уң ҡулын һул ҡулының уртансы бармағы алдында әйләндерҙе лә әйләндерҙе. Хатта табип, етер, тип бойороп туҡтата алмағас, юҡ епте "тартып алып" кеҫәһенә "һалып ҡуйырға" мәжбүр булды. Шамилдың, йыйып алырға күп тә ҡалмағайны, тигәненә үҙенең көлкөһө килде. Диагноз бик һәйбәт түгел ине, Өфөгә ебәрергә хәл ителде.

Һалған уколдарҙан һуң оло юлда йоҡлап барһа ла, әллә баш ҡаланың һауаһы килешмәне, "тейен-белочка"лар ауырыуҙың тамам маҙаһына тейҙе. Тәүге кистә уҡ Шамил арҡалы ултырғысты менеп алды ла эй "сапты". Тәүҙә коридорҙа, унан бүлмәләргә инеп урап сыға башланы. Медсестралар үҙен тота алмай бер булды. "Әйҙә, Радулов, тиҙерәк, тиҙерәк, шәберәк сап. Бүреләр тота хәҙер беҙҙе", - тип һөрәнләп, тимер ултырғыстың тояғы һынғансы һикергеләне. Тирә-йүндәгеләр ҡыҙыҡ табып ҡарап торҙо, йығылып көлөүселәр ҙә етерлек ине. Аптырап, ике көн аяҡ-ҡулдарын бәйле килеш тоттолар. Унда ла Шамил, "иркенлектә атҡа сабыуы еңел, тышамағыҙ, тышамай тороғоҙ шуны, сапһын әле, сапһын!" тип һөйләнеүен белде.

Бишенсе көнгә тамам элекке хәленә ҡайтты. Зиһене яҡтырҙы, ашауы һәйбәтләнде. Хатта шәфҡәт туташтарына ауырыуҙарҙы үҙе тоторға, бәйләргә ярҙамлаша башланы. Дауалаусы табип, ниндәй Радуловты ҡыуып маташтың ул, тип көләмһөрәгәс, иптәш доктор, өйҙә аҡбуҙатым бар минең, ул көтә бит мине, тип йылмайҙы. Сире китеп хәле бөтөнләй шәбәйгәс, нишләргә белмәй, үҙен тотҡонда кеүек хис иткән Шома палатанан палатаға йөрөнө. Үҙенең телен белгәндәр менән аралашты. Шулай тәм табырға тырышты. Йоҡо һимертте.

Еҫкәнеп йөрөй торғас, шулай бер көн тәҙрә төбөндә таушалып бөткән башҡортса китап табып алды. Шиғырҙар. Эй, һөйөндө. Яҡын дуҫын осраттымы ни! Ҡомһоҙланып уҡырға тотондо. Ғилман Ишкинин тигән шағирҙың "Ямаулыҡ"тары ине. Ишеткән, гәзит-журналдарҙа уҡығаны бар был ҡәләм оҫтаһын. Уның яҙғандары беҙ белгән шиғырҙарға оҡшамауы менән иғтибарын йәлеп иткәйне. Шиғри формаларға һыймаған фекерле шағир тип белә ул. Тап ошо йортта ятҡандар ғына аңлай торған әҫәрҙәр инде, тип йылмайҙы ауырыу. Хатта, мәңге ябыҡ ишек кенә шығырламай, тигән бер юллыҡ шиғырын кәрәк-кәрәкмәгәндә лә ҡабатларға яратты уның. Бигерәк тә тәүәккәллектәре етмәгәндә әйтер ине. Уҡыштырып ятты. Һәр ваҡыттағыса, бер нисә шиғырҙы ятлап та алды. Эсмәгәс, хәтер шәп, тиҙ үк һеңеп бара. Тик шиғырҙары йырлап тормағас, йәйлап уҡырға тура килә, аңларға кәрәк. Уҡып ята торғас аттар тураһындағы шиғырға тап булды ла шаҡ ҡатты Шома. Тын алырға ла ҡурҡып бер тына китапҡа ҡапланып күҙен аҡайтып ятты.

*...Ҡарап йөҙөп барған сал диңгеҙҙә*
*Һәм кешеләр менән бер ҡатар*
*морондарын сөйөп ғорур, тыныс*
*Трюмдарҙа торған, ти, аттар.*
*Меңләп йылҡы - дүрт меңләгән тояҡ,*
*бәхет килтермәгән кәмәгә -*




*Ерҙән бик алыҫта төбөн тишкән*
*ҡаяғамы, ҡаты нәмәгә.*
*Кешеләр ни, һалға ултырғандар*
*аттар һыуҙа - урын юҡлыҡтан.*
*Йәл дә бит һуң, эх, шул сараһыҙлыҡ*
*йөҙөп барған улар йылҡылдап.*
*Көрән утрау булып ынтылғандар*
*аяуһыҙлыҡ еңгән диңгеҙҙә.*
*Тәүҙә диңгеҙ йылға ғына булып*
*күренгәндер, бәлки, тик теҙҙән.*
*Ул йылғаның осо-ҡырыйы юҡ,*
*тулҡын һөйрәй хәлһеҙ аттарҙы,*
*кешнәй-кешнәй һыу төбөнә китә*
*бер-бер артлы йылҡы баштары…*

Шиғырҙы уҡып бөтә алманы Шамил, иҫһеҙ булды. "Һуң шул тиклем ҡанһыҙ шағир буламы икән ни донъяла? Нисек күрәләтә диңгеҙҙә батырмаҡ кәрәк. Бер өйөр атты! Мең башты! Иге-сиге булмаған диңгеҙҙә! Балыҡҡа булһа ла әйләндерергә кәрәк уларҙы. Яҡынтирәлә берәй утрау эшләп булмаймы? "Юҡтырһың да, Алла, әгәр булһаң, түҙмәҫ инең был эшкә". Минең дә йөрәгем түҙмәй. Ҡотҡарығыҙ, ҡотҡарығыҙ! Табам мин ул шағирҙы. Улар әле йылҡылдап йөҙөп бара ала. Һыу төбөнә китмәй торһондар. Ошо Өфөлә йәшәйҙер бит. Үҙгәртһен. Үҙгәртһен был аяуһыҙ шиғырын".

Шамилдың түҙемлеге сигенә етте. Сығынлаған тай кеүек ҡайҙа төртөлөргә белмәй аптыранды. Эх, бер ынтылыуҙа тәҙрәнән һикереп төш тә, иреккә сыҡ ине. Бында ҡалырға ла ярамай, сығып та булмай. Аттарҙың хәле бөтәсәк бит, сикһеҙ диңгеҙҙә оҙаҡ йөҙөп бара алмаясаҡтар улар. Ҡасан да булһа үлемгә дусар буласаҡтар. Әмәлен табырға кәрәк. Ҡотҡарырға кәрәк. Әгәр ҙә баяғы шағирҙы тапһа, Ғилманды... әйтер ине уға Шамил. Бәлки, ул саптарҙарҙы ҡоро ергә... Бер ҙә булмаһа, ҙур карап ебәрһен. Уның бит ҡәләме бар. Ҡәләмдең ҡөҙрәте ҙур. Ә аҡ ҡағыҙға нимә яҙһаң да килешә. "Мин аттарҙың язаланып үлеүен кисерә алмаясаҡмын. Яҙһын яңынан ултырып, ҡотҡарһын. Ниңә батырырға ул аттарҙы. Ниңә? Ул өйөрҙә бейәләр ҙә, ҡолондар ҙа бар бит. Улар диңгеҙҙә түгел, болонда сабып йөрөргә тейешле. У-уфф!.." Шамил тешен ҡыҫып, устарын йоҙроҡланы, сикәһендәге ҡан тамыры бүлтәйеп килеп сыҡты. Тешенә йыртылып ирене ҡананы. Ҡайнар йәш сикәләрен көйҙөрҙө.

Шағирҙы эҙләп сығып йөрөп киләм тиһә, хәҙер, был тағы ла ауырый, тип бәйләп һалып ҡуясаҡтар. Шулай ҙа Ғилманды табырға кәрәк. Нимә уйлап ул аттарҙы батырырға булды икән? Төптә ниндәйҙер бер сере барҙыр ҙаһа? Ҡасып ҡына барып килгәндә. Палаталағы күршеләренән һораштырғайны, Яҙыусылар союзы бынан йыраҡ та түгел, тинеләр. Унда Ғилмандың ҡайҙа йәшәгәнен әйтерҙәр әле. Адресын бирмәһәләр, аттарҙы батырмайса, ҡотҡарып, шиғырҙы тамамлап ҡуйһын, тигән телəген булһа ла еткерер. Был һыҙатлы кейем менән барһа, әлбиттә, адресын бирмәйәсәктәр. Психбольной тип әйтәсәктәр. Ни эшләргә? Аҙаҡтан бында кире килеп тормаҫ, Ғилмандан юллыҡ аҡса алыр ҙа, ҡайтыу яғына һыпыртыр. Ни тәҙрәләрҙең барыһына тимер рәшәткә ҡуйып сыҡҡандар. Икенсе ҡат улай бейек түгел дә. Бер-ике көн тыныс ҡына ятһа, тышҡа сығып йөрөп инергә рөхсәт тә итеүҙәре бар... Тик нисек түҙеп ятмаҡ кәрәк. Шулай ҙа һорап ҡарағанда. Шиғыр яҙам, шуларҙы яҙыусылар союзына барып тикшертәм, тип алдар.

Ул табип бүлмәһенә инде. Табип, хәҙер, көтөп тор, тине лә ҡысҡырышҡан тауышҡа коридорға сыҡты. Шул саҡ Шамил асыҡ тәҙрәне шәйләп алды, һе, бында рәшәткә юҡ икән дә. Яҡыныраҡ барып, аҫҡа баҡты, әллә ни бейек тә түгел. Табиптың ултырғыс башына эленгән пинжәген иңенә һалды ла, бер ни уйламай, асыҡ тәҙрәнән аҫҡа һикерҙе.

Килеп төшкәс, һул аяғында тубыҡтан аҫта әсе, бик әсе һыҙланыу тойҙо. Ҡапыл ҡалҡынам тигәйне, аяғына баҫа алмай, ҡолап китте. Инәңде, аяҡҡа баҫырлыҡ түгел. Аяғын тотоп бөгәрләнеп ятты: "Китте өйөр диңгеҙ төбөнә" - әсе итеп һүгенеп ебәрҙе. Уңарса булмай, янына кешеләр йыйылып китте.

Һул аяғы һынғайны ҡасҡалаҡтың. Гипсланылар ҙа яңынан элекке урынына алып барып һалдылар. Баш табип бик асыуланды. Оло ЧП-ға әйләнер ине лә, нисектер йомоп ҡалдылар, бүлектә карантин иғлан иттеләр. Ысын төрмәгә әйләнде дауахана Шамил өсөн. Медтуташтарҙың да ҡарашы үҙгәрҙе, ҡасандыр йылмайып, ихлас һөйләшкән ҡыҙҙар телһеҙ ҡалды, тейешле процедураны үтәйҙәр ҙә, үҙ эшенә керешәләр. Йомош та ҡушмайҙар, шаяртмайҙар ҙа.

Дауалаусы табип ҡына, уның хәленә инергә тырышты.

- Эх, ҡасмалаҡ малай, бер нисә көндән былай ҙа сығарыр инек тә. Парашют һорарға ине, исмаһам, - тип көлдө.

Ни өсөн һикергәнен әйтә алманы Шамил. Шағирҙы эҙләп аяҡты һындырҙым тиһә, ысынлап та ауырыу бит был, тип уйлаясаҡ. "Көлкө инде бер ҡараһаң. Шиғыр тип. Яҙылған, һыҙылған. Йөҙгән, ер тапмаған, батҡан. Барыбер килешеп тә булмай шул. Батырмаҫҡа кәрәк. Ҡайтҡас та хат яҙам үҙенә. Етәр, брат, юҡ-бар шиғырҙар яҙырға, тип ҡаты ғына әйтергә кәрәк булыр, ахыры."

- Шулай ҙа шауҡымлыраҡ егеткә оҡшағанһың, ат ене ҡағылған үҙеңә, өшкөртөргә кәрәк, - тип көлдө табип.

- Ҡайтып ҡына өшкөрөләйем, ауылда бар ул муллалар, - тине Шамил. - Ысынлап, үлеп әсәйҙе, атты һағындым. Минең өс көндән дә артыҡ ауылдан сыҡҡаным да юҡ.

**(Дауамы бар).**

✓ *Улар кире юлда тамсы ла йотмағандарҙыр, тип ышаныслы әйтә алам бөгөн. Күптәрҙән ишетергә тура килде: дауалауҙың ысынлап та ҡөҙрәте бар. Дауаланғандан һуң эсеү теләге томалана, хатта юҡҡа сыға.*



ТӘҮБӘ



# ҠОТОЛАЙЫҠ...

## иблис ҡотҡоһонан

Ни эшләргә? Тәүҙә барыһына ла ҡул һелтәп, яңы тормош башларға уйланым. Машинам барлығы иҫемә төштө. Һе, кеше ташып булһа ла аҡса эшләй алам да инде мин. Таксистар бер аҙнала минең бер айлыҡты кеҫәһенә һала. Машина тигәндән, уларҙың ҙҙҙәрен дә, хатта яҙмыштарын да кешеләрҙекенә оҡшатам мин. Двигателе эске ағзалар булһа, трансмиссияһы - көүҙә, йөрәү өлөшөн аяҡ-ҡул менән сағыштырырға була. Мин дә әлеге мәлдә хәлемде беренсе тиҙлек менән тау үренә табан барған еңел машинаға оҡшатам, һәм үрҙе артылырлыҡ хәлем барлығына өмөтөм һүнмәгән. Гел генә тигеҙ юлдан да йөрөмәнем. Төрлө үрҙәрҙә үткән кеше әле мин. Тигеҙ юлдан да йөрөнөм, уңға ла, һулға ла боролорға тура килде. Ҡаршы юлға сығып, маңлайға-маңлай бәрелешкән мәлдәрем дә хәтерҙә ныҡ уйылып ҡалған. Юл (йәшәү) ҡағиҙәләрен белмәгәндән түгел, тормош бит - төрлө саҡтар була. Тағы ла тигеҙ юлдан дүртенсе тиҙлектә елдерәсәкмен әле.

Башта өс көн буйы "ҡайғыны" араҡы менән йыуҙым. Дүртенсе көндә үҙемдә йыуындырҙылар. Тура мәғәнәһендә. Ҡатыным мунса индерҙе. Айыҡ баш менән уйға сумдым. Алда бер юл - эсеүҙе бөтөнләй ташларға. Бөтөнләй ташларға? Нисек? Иң ауыры шул: бөтөнләй тиғән һүҙгә үҙенде ышандырыу. Ышанысың ныҡлы булмаһа, был аҙымды яһауҙың фәтеүәһе юҡ.

Ҡайҙа барып дауаланыу тураһында бәхәсләшеп торманыҡ. Бер юл - Абдулла (Ырымбур өлкәһенең Абдулла станцияһында йәшәүсе Шәмсиә - Шура әбей). Ауылда "Абдуллиндар" күбәйгән саҡ. Өлгө бар. Эсеү оят, дауаланыуҙың бер ояты ла юҡ. Маҡтауға ғына лайыҡ бындай аҙым.

Ныҡлы фекергә килгәс, күҙҙәр асылып китте. Эсеүҙе бөтөнләй ташлауыма (бик булмаһа, биш йылға) өмөт уянды. Ошо мәлдә күңелемдә ныҡ һаҡлайым. Ниндәйҙер кимәлдә ул тойғо ла ярҙам итә миңә бөгөнгә көндә. Психологтар уны инсайт (ҡәҙер тәнә асылыу) тиҙәр. Эсеүҙе бөтөнләй ташлайым, тигән түбәнге аң кимәлемдәге күптән формалашҡан уйым тереледе. Ул уй (уй түгел, әҙер фекер) эсә башлаған көндән, "бахмурҙан" интеккән мәлдәрҙә нығына башлаған. Ҡырылмаһа ҡырҡ тапҡыр "ҡабат эсмәйем" тигәндә, ул тойғоно уята алмағанмын икән. Уны аңым уятты, бөтөн йәнем-тәнем менән уяндым һәм эсеүҙе ташлай алыуыма тулыһынса ышандым. Тау-таш аҡтарырға әҙер инем мин шул саҡта. Сынйырлап ҡуйһалар ҙа, уны өҙөп барыр инем дауаланырға.

Ҡатыным оҙатып барырға булды. Дауаланыуымды үҙ күҙҙәре менән күргеһе килгәндер инде. Өфөнән ары китмәүем бик-бик ихтимал бит. Ин мөһиме - үҙем ышанам. Шулай ҙа ҡатынымдың шикләнеүенә үпкәләмәнем.

Юлға сыҡтыҡ. Икенсе тәүлектә Абдуллаға килеп тә еттек. Бында тетя Шураны яҡшы беләләр икән. Вокзалда танышҡан бер әбей беҙҙе ул йәшәгән урамға алып барып, өйөн күрһәтте. Төн уртаһы булыуға ҡарамаҫтан, йорто алдына бик күп еңел машиналар йыйылып киткән. Автобустар ҙа күренә. Баҡтиһәң, кешеләр алдан килеп йоҡлайҙар икән. Күп тә йөрөмәнек, бер әбей беҙҙе фатирға индерҙе. "Наркомандар ҙа күп килә, урамда ҡалһағыҙ, ҡурҡыныс", - тине ул. Фатир хаҡы әллә ни ҡиммәт тә түгел икән - бер кешегә 30 һум.

Әбейҙең өйө биш бүлмәнән тора, ҡалғандарында беҙҙең кеүек ситтән килгәндәр туҡталған. Үҙебеҙҙең бүлмә менән танышҡас, хужабикә сәйгә саҡырҙы. Оҙаҡ юлдан һуң тамаҡ ялғап алғас, тап-таҙа постель йәйеп, йоҡларға яттыҡ. "Сәғәт биштә уятырмын, - тине Тома әбей. - Сират ҙур була, тәүгеләр менән инеп ҡалырға тырышығыҙ..."

Ысынлап та, иртә менән уятты ул. Башҡа бүлмәләгеләр ҙә тороп йыйына башланы. Бер ағай наркоман улын алып килгән икән, улар тиҙ генә йыйынып, сығып китте. Ҡарап тороуға, атаһы ла, улы ла бик итәғәтле күренә. Фатирҙаштар менән шым ғына йыйындыҡ. Һәр береһе үҙ уйына сумған. Беҙҙе уртаҡ яҙмыш осраштырған, ә һөйләшәһе һүҙҙәр юҡ. Оло ғына бер ҡатын менән йәш егет әйберҙәрен төйнәп, хужабикәгә аҡса түләп, шым ғына сығып китте. Кейемдәренә, төйөнсөктәренә ҡарағанда, ауылдан килгәнгә оҡшағандар. Кухня эргәһендәге бүлмәнән йәш кенә егет менән ҡыҙ сыҡты. Мөнәсәбәттәренә ҡарағанда, ирле-ҡатынлы булыуҙары күренеп тора. Төпкө бүлмәлә мөһабәт кәүҙәле урта йәштәрҙәге ир ҡунаҡлаған икән. Сырайы үҙебеҙҙең мосолман, холоҡ-фиғеле "Мин - башҡорт" тип ҡысҡырып тора. Ул бер һүҙ әйтмәйенсә, әбейгә аҡса һондо ла, бәләкәй ағас йорттоң ишегенә саҡ һыйып, бөгөлөһыға ла сығып китте. Өй бушап ҡалғандай тойолдо. Беҙ ҙә хужабикәгә рәхмәт әйтеп, сығып киттек.

Шура әбейҙең өйө янында һабантуймы ни! Гөж килә ләр. Беҙ ҙә ҡапҡаға яҡынлаштыҡ. Әлегә ул эстән бикле. Әбей наркомандарҙы дауалай икән. Уларҙың ингәненә арыуыҡ ваҡыт уҙған. Ара-тирә Шәмсиә әбейҙең тауышы ишетелеп ҡала: "Ҡабат наркотик ҡулланаһыңмы? Әйт, бына әсәйең алдында ант итеп әйт!" Әбей улар менән сәғәткә яҡын шөғөлләнде. Улар мотлаҡ ата-әсәһе, йә булмаһа, иң яҡын туғаны менән килергә тейеш икән.

Ҡапҡа асылды. Наркомандарҙы туғандары етәкләп алып сыға башланы. Баштары түбән эйелгән, береһе лә күтәрелеп ҡарай алмай. Беҙ ҙә, йәғни алкоголиктар, башты күккә сөйөп, мөғжизә көтөп тормайбыҙ. "Минән дә түбән төшкәндәр бар әле" тип, бер аҙ күңелде йыуатҡан булам.

Баҡтиһәң, бында уйынлы-ысынлы килгәндәр ҙә бар, имеш. Ижевскиҙан ҙур автобус менән бер төркөм эшселәрҙе алып килгәндәр. Эргәлә торған икәүһе шым ғына һөйләшә: "Кире юлға нисәшәр ярты алайыҡ?".

Улар кире юлда тамсы ла йотмағандарҙыр, тип ышаныслы әйтә алам бөгөн. Күптәрҙән ишетергә тура килде: дауалауҙың ысынлап та ҡөҙрәте бар. Дауаланғандан һуң эсеү теләге томалана, хатта юҡҡа сыға.

Наркомандарҙан һуң оҙаҡ көттөрмәй беҙҙе лә ҡапҡа аша өй урамына индерҙеләр. Утыҙлап кеше һыйҙыҡ. Әбей өй тупһаһында тора. Беҙҙең кеүектәрҙе бик күп күргән бит инде, иҫе лә китмәй: "Заходите, заходите, алкоголики!" - ти ул.

Уттек. Тезелешеп торабыҙ. Әбей оҙата килгәндәрҙе сығырға ҡушты. Урам эсе бер аҙ бушап ҡалды. Ҡапҡаны янынан бикләп ҡуйҙылар. Минең үҙемә элекке эскән донъяма бикләнгән кеүек булды ул ҡапҡа. Тиҙҙән бөтөнләй икенсе донъяға аяҡ баҫасаҡмын, Алла бойорһа!

Эстә ҡалғандарҙы Шәмсиә әбей ике төркөмгә бүленергә ҡушты. Христиандар бер яҡҡа, беҙ, мосолмандар, икенсе яҡҡа баҫтыҡ. Хисапламаһаң да, төркөм ҡап уртаға бүленде. Бер сама эсәбеҙ икән Хоҙай бәндәләре. Вәғәз укыу бик оҙаҡ ҡына булды: "Христиандар менән мосолмандар ике диндән булһағыҙ ҙа, кеше булараҡ, һеҙ бер үк. Һәр икегеҙҙе лә йәлләйем, һәр икегеҙгә лә изгелек теләйем", тине ул һүҙен башлап. Бер аҙ һөйләй биргәс, урыҫса-татарсалап беҙҙе бетәрләп ташланы. Үҙенә рәхмәт йөҙөнән яҙылған хаттарҙы күрһәтте.

Урта йәштәге мәрйә әбей уның янына яҡынлашты:

- Тетя Шура, мин һеҙҙә дауалангайным. Тиҙҙән ҡыҙымдың туйы була, миңә киренән эсергә яраймы? - тип мөрәжәғәт итте ул. Әбей уға һыу эсерҙе.

- Ҡурҡмай эс, тик туйҙан һуң тағы ла кил, һине яңынан кодлармын, - тине ул.

Йәш кенә татар егете ике айға ла сыҙамай, ауыҙына алған икән. Ул да әбейгә ялбарҙы, яңынан дауалауын үтенде.

- Күҙемә күренмә, сығып кит! - тип ярып китте Шәмсиә әбей. Егет илай-илай сығып китте.

- Ҡырҡ көндән үләсең! - тип ҡысҡырып ҡалды әбей уның артынан.

"Был берәй театрлаштырылған тамашамы икән әллә?" тип уйлап торам эстән генә. Улай тиһәң, төрлө тарафтан йыйылған төрлө милләт, төрлө яҙмышлы кешеләр менән тамаша ҡылыуға диндар кешенең намыҫы ҡушмаҫ.

Дауаланыу ваҡыты беҙгә лә етте. Христиандарҙан һуң сиратлап әбей янына килдек. Әбей баштан һыйпап, һәр беребеҙгә үҙенең ҡөҙрәтле һыуын үҙ ҡулынан эсерҙе. Ул һыуҙың тәмен әле лә иҫләйем, әле лә тоям...

**Мораҙым ӘХМӘТОВ.**
**(Дауамы.**
**Башы 5-се һанда).**

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

### Юҡһыныу

Хәмидулла, күптәрҙең фекеренсә, Гөлйыһанына ҡарата үтә лә ҡоро, ҡырыҫ фиғелдә булды. Берәйһе ҡунаҡҡа саҡыра ҡалһа, был ата ҡаҙҙай ҡайҡайып алдан төшә, ике-өс аҙым ҡалыңҡырап, Гөлйыһаны атлай. Йәнәш төшөп түгел, эйәртенешеп, тағылып йөрөйҙәр гелән. Ҡарт ҡунаҡ өйөнә барып етә лә сөм галоштарын, йышылып бөткән имән таяғын нисек етте, шулай ҡалдырып, эскә атлай, ҡарсығы аяҡ кейемдәрен төҙәтеп ҡуя, таяҡты ла ишек ауыҙына, үрелеп алырлыҡ ергә һөйәй. Инеп түргә ҡунаҡлағас та әле ҡапаҡлау дауам итә: салшайыңҡыраған күлдәк яғаһы төҙәтелә, ҡара бәрхәт түбәтәй ҡулайлап кейҙерелә. Хәмидулла ҡуналҡаға ҡунған әтәстәй ҡуҡырайып, абруйлы ултыра, күрмәмешкә һалышһа ла, ул иғтибарҙан, күҙгә бәрелеп бармаған наҙҙан үтә лә ҡәнәғәт. Бабайҙың баҡтаһы тиреһенә йәбешкән арыҡ алашаһы булды. Ул да йыбырлыны сығып юрғалап хужаһын хәленән килгәнсе еңел итеп алып йөрөргә тырышты. Хәмидулла ғүмер баҡый һалабаш һалды, ҡул салғыһы менән бесән сапты, һеперткегә селек, дауаға тип шифалы үләндәр йыйҙы, ҡышҡа етерлек итеп мунса миндеге бәйләне. Иртә яҙҙан ҡар яткансы болон-ҡырҙарҙа, урманда юғала шулайтып. Кисләтеп кенә аты менән туҙан борхотоп, ауыл урамына ҡайтып инә лә, ҡапҡалары ябыҡ була ҡалһа, килгән етеҙлегендә ауылдың икенсе осона ҡарай юрттыра. Әйләнгәнендә лә шәйләүсе булмаһа, кире яҡҡа китә. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатлана, күреп ҡалып, асып индергәндәренсә. Ғорур, башбирмәҫ, үҙһүҙле ине бигерәк.

Текә холҡон белгәнгәмелер, Гөлйыһан алдан төшөп бер ваҡытта ла хәбәр һалманы, ҡартының һүҙен йыҡманы, фекерен, әйткәндәрен һанланы, уны яратты, ҙурланы:

- Минең Хәмидулламдан да наҙлы, иғтибарлы, ихтирамлы кеше юҡ ул донъяла. Хәҙерге йәштәр хистәрен күрһәтеп, мир шаулатырға ярата, ә минеке йән йылыһын сарыфламайынса, сәс-баш итмәйенсә күңелендә тота, сит-яттар юҡта фәҡәт үҙемә генә әйтә, еткерә. Алтмыш йыл иңгә-иң терәп йәшәгәс, уның һәр тын алышын тоям, арауыҡ аша йөрәк тибешен ишетәм.

Хәмидулла ҡарт ҡапыл ғына үлеп китте. Нимәһе гәжәп, аҙна үттеме-юҡмы, алашаһы ла туламай-сәбәләнмәй генә ятып йән бирҙе.

Бер ҡайтҡанымда күрәм - Гөлйыһан ҡапҡаһын шар асҡан да урамға сығып ярпайып баҫып, оло юлдан күҙҙәрен алмай Хәмидуллаһының атын егеп ҡайтып төшөрөн өмөтләнеп көтә ине шикелле...

### Кемдең бүләге ҡиммәтерәк?

Ир менән ҡатын кәзекләшәләр.

- Өҫтөндә шәшке тун, аяҡтарыңда ҡиммәтле итектәр. Ҡалған кейемдәрең дә бынамын тигән, башҡа ҡатындарҙан бер ерең дә кәм түгел. Тағы ни кәрәк һиңә? - тип яна ир.

- Миңәме? Бер ни ҙә! Бары иғтибарыңа, ихтирамыңа мохтажмын! - тип иламһырай ҡатын. - Эйе, һис һүҙем юҡ, мине ҡурсаҡтай матур итеп кейендерҙең һәм кейендерәһең. Эш хаҡы алмаған йорт хужабикәһе булараҡ, һиңә ошоғаса бер ниндәй ҙур бүләк тә эшләй алманым. Ә шулай ҙа мин бит һиңә иң матур йылдарымды бүләк иттем. Башҡаһын ҡайтарып була ла бит, кемгәләр бүленгән һәм бүләк ителгән ваҡыт ҡына кире ҡайтмай!

✓ *Әгәр, тип уйлай бүре, "үҙемдең" ауыл малдарына теймәһәм, "үҙемдең" һунарсылар мине эҙәрләкләп маҙаһыҙламаясаҡ. Бында иҫәп хисапҡа тура килә: бүре лә туҡ, һарыҡтар ҙа иҫән, һунарсылар ҙа аптыратмай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТӘМЛЕ СӘЙ...
## тынысландыра

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә игтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа оҫрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Тәмле итеп сәй эсеп алғандан һуң күңелдәр күтәрелеп китә икәнен һиҙәһегеҙме? Был ысынлап та шулай. Тәм-том нервыларҙы тынысландыра. Әммә нервы көсөргәнеше ваҡытында организм шәкәрҙе тотоноп бөтә һала ла, яңынан яңы порциялар талап итеп тик тора. Шуға ла тәүҙә күңелегеҙҙе өйкәп торған проблеманы хәл итегеҙ. Иммунитет түбәнәйгәндә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Дарыуханан үҙ-аллы дарыу һатып алып, баланы дауалауҙан тыйылығыҙ, ти табиптар. Был бигерәк тә йүткереүҙе дауалай торған дарыуҙарға ҡағыла. Бала организмы өлкәндәрҙекенән айырыла, улар дарыуҙарҙың кире тәьҫирен күпкә ауырыраҡ кисерә. Рецептһыҙ һатылған күп кенә препараттар тиҙ арала йүткереү һәм һыуыҡ тейеү билдәләренән ҡотолдороға вәғәҙә итә. Тик 12 йәше тулмаған балаларға уларҙы биреү бөтөнләй ярамай, ти Дрейк университеты фармакология профессоры Эдвард Белл. Был препараттар тейешенсә клиник тикшереү үтмәй, тимәк, бала организмына кире тәьҫире лә өйрәнелмәй.

■ Психик яҡтан тотороҡло булған кешеләр үҙҙәренең тормошо әлеге мәлдә үткәнгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ, ә киләсәк тағы ла яҡтыраҡ буласағына ышана. Депрессия мәлендә был инаныс тулыһынса юкҡа сыға, ти белгестәр. Канада ғалимдары раҫлауынса, үткәндәргә ҡарағанда бөгөнгө яҡшыраҡ тип иҫәпләүселәр ун йылдан да ошондай уйҙа була. Ә кем үткәне менән бөгөнгөһө араһында айырма күрмәй, киләсәген дә төҫмөрләй алмай. Тап улар яйлап депрессияға килә лә инде. Депрессия хәлендәге кеше киләсәге тураһында уйлауҙан бөтөнләй баш тарта. Шуға ла уларҙы дауалаған саҡта ошоно иҫәпкә алырға һәм яҡшы үҙгәрештәргә көйләргә кәрәк, ти ғалимдар.

ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ



# БҮРЕНЕҢ АҠЫЛЛЫЛЫҒЫ...

**Бүре менән беҙ бәләкәстән үк әкиәттәр аша таныш. Уларҙың иң иҫтә ҡалғандарының береһе - "Бүре һәм кәзә бәрәстәре" әкиәте. Иҫләйһегеҙҙер, Әсәй-кәзә бәрәстәрен өйгә бикләп китә, ә ишекте бер кемгә лә асмаҫҡа ҡуша. Әсәләре күҙҙән юғалыу менән Бүре өй эргәһенә йүгереп килеп тә етә.**

Бына шул әкиәтте әйтәм инде. Әммә мин уны бушҡа ғына иҫкә алманым. Был әкиәттә өй (тимәк, ауыл) тураһында бушҡа ғына телгә алынмай, буғай. Эш шунда - ысын тормошта бүре ҡара урман төпкөлөндә, япа-яңғыҙ, айырым көн итергә яратмай. Ул нишләптер кешегә тартыла, кеше көн иткән ерҙәрәк йәшәргә тырыша. Шуға күрә бүренең өйө (дөрөҫөрәге, өңө), ауылса әйткәнсә, көртә артында ғына. Йыртҡыс, урман санитары тигән насар атамалар алыуға ҡарамаҫтан, бүре бик һәйбәт күрше. Был йәнәттән ул ихтирамға лайыҡ. Бүре ут күршеләре менән (ошо ауылда йәшәгән кешеләрҙе әйтәм инде) татыу йәшәү яҡлы, йәғни ул кешеләрҙең мал-тыуарына бөтөнләйе менән теймәҫкә тырыша. Тамаҡ яғы үтә ныҡ мөшкөлләнеп киткән хәлдә генә, сараһыҙҙан ғына урындағы малға һөжүм итеүе бар. Ә бына сит ауылдың һарыҡ-кәзәһен апаруҡ "санитарлап" тора былай. Әлбиттә, уларҙың малы үтә һимеҙ йә үтә татлы түгел. Бында айыҡ аҡыл өҫкә сыға. Әгәр, тип уйлай бүре, "үҙемдең" ауыл малдарына теймәһәм, "үҙемдең" һунарсылар мине эҙәрләкләп маҙаһыҙламаясаҡ. Бында иҫәп хисапҡа тура килә: бүре лә туҡ, һарыҡтар ҙа иҫән, һунарсылар ҙа аптыратмай.

Ә шулай ҙа ваҡыты менән бүреләр үтә әрһеҙләшеп киткән һунарсыларҙы тәрбиәләп, кәрәген биреп тора. Самат ағайҙы тыңлайыҡ әле: "Бер йылды Бөрйәндә улар ике һунарсының дүрт һунар этен талапашап киттеләр. Бүре өйөрө ауылды төндә килеп баҫҡан. Нисектер, ике һунарсының өйҙәрен тапҡандар. Етмәһә, ул һунарсылар ауылдың ситендә түгел, ә уның урта өлөшөндә йәшәй бит әле. Һунарсыларҙың өйөн урындағы эттәр күрһәткән, тип әйтеп булмай. Сөнки улар бүренән ҡурҡа. Бүреләр ауылды баҫҡан мәлдә, исмаһам, бер эт өрһәсе! Бүреләр ауылға яҡынлашыу менән ауылдағы бар эттәр тауышсыҡ сығармай, үҙ өңдәрендә ҡасып-боҫоп ятып ҡалалар. Ә бүреләр теге һунар эттәрен ҡайһыһын талап, ҡайһыһын ашап киткәндәр. Ысынмылыр-бушмылыр, хатта берәүһен үҙҙәре менән күтәреп алып киткәндәр".

Кеше менән сағыштырғанда, бик иркендә йәшәй бүре. Беҙ ни бары 15 сутый ергә ҡыуанып бер булабыҙ. Ә бүре биләмәһе сутый менән генә иҫәпләнмәй. Ул биләгән ерҙең бер осонан алып икенсе осона тиклемге ара 60 км-ға барып етә! Шул тиклем биләгән ерҙе ул һәр ваҡыт һаҡлап-билдәләп тора. Был турала ғүмере буйы малсылыҡта эшләгән Иҙрис ағай аптырап ошолай һөйләй: "Элек ферма малына ҡыш буйы Арҡыры яландан бесән ташый торғайныҡ. Ялан апаруҡ ҙур. Бына шул яландың ситендә үҫеп ултырған ялбыр ҡайын бүренең сик биләмәһе ине. Нисәмә йылдар буйы шул яландан бесән ташылды, шунса йылдар буйына бүре үҙенең сиген билдәләп торҙо. Ҡайһы йылы йә көслө буран, йә көслө ҡар аҙнаға һуҙылып китер ине. Аптырамалы инде, көн матурланыу менән бүре үҙ сиген билдәләргә сабып килеп тә етә! Ялбыр ҡайынға ҡыялатып ҡына урман эсенән дә барып була. Әммә бүре гел яландың ҡап уртаһынан килер булды. Урманлы ерҙәр башҡа бүренең биләмәһе булғандыр инде, шуға күрә "беҙҙең" бүре урманға инә алмағандыр".

Бүреләрҙең аҡыллы булыуына күп һунарсылар аптырай. Улар менән урманда күҙмә-күҙ осрашҡан һунарсы Иштуғанды тыңлайыҡ әле: "Ул йылды ҡар ғәләмәт тәрән булды. Саңғы менән китеп бараһың, ә саңғылар үҙҙәре күренмәй. Аҙым эшләгән һайын улар көрткә бата ла ҡуя. Ситтән ҡарап торһаң, тубыҡтан ҡар кисеп барған һымаҡһың инде. Бер мәл көс-хәл менән ҡалҡыулыҡҡа күтәрелдем. Аҫҡа табан күҙ һалһам, аптырап киттем. Биш бүренән торған өйөр бер оло мышыны ҡаяға ҡыҫтаған! Мышының хәле мөшкөл, уның ҡасыр урыны юҡ. Бер яҡтан - текә ҡая, икенсе яҡтан йылғаның текә яры. Мин тиҙ генә мылтыҡты ҡулға ала һалдым. Шул саҡ бүреләр... урманға һибелде, тип уйлайһығыҙмы. Юҡ шул. Тәүҙә берәүһе бар көсөнә һикереп, көрткә сумды. Икенсеһе уның өҫтөнә баҫып ырғыны һәм көрткә сумды. Өсөнсөһө тәүҙә тәүгеһенең, шунан икенсеһенең өҫтөнә баҫып ырғыны һәм көрткә сумды. Ә дүртенсеһе... Ә бишенсеһе... Шул арала беренсеһе... Ҡыҫҡаһы, минең күҙ алдында биш бүре күҙ асып күҙ йомған арала ошолай "тәгәрәй-тәгәрәй" урманға инде лә китте. Мин аптырауҙан ауыҙҙы асып торҙом да ҡалдым. Аҙаҡ барып самалап ҡараным, һәр бүре кәм тигәндә лә өс метр самаһы һикергән!"

Был һөйләгән хәбәрҙәр күптәрҙең йөрәгенә бер аҙ ҡурҡыу-шом һалалыр. Ә шулай ҙа ғүмер буйы урманда көн иткән кеше бүренән әллә ни ҡурҡып бармай. Мин һаман да Зәки ағайҙың һөйләгәнен көләп иҫкә алам. Бер мәл ул урман буйлап яңғыҙы ғына ҡайтып барған. Ҡуйы үлән үҫкән урында уға бүре тап булған. Дөрөҫөрәге, бүре ҡасып-боҫоп ятып ҡалырға ҡарар иткән. Зәки ағай ошолай һөйләй: "Нишләптер, үлән араһындағы ҡыштырлауға иғтибар иттем. Яҡшылап ҡараһам, бер бүре ергә һылашып ятҡан һәм күҙҙәрен миңә төбәгән!" Уның һөйләгәндәренән минең баштан береһенән-береһе ҡурҡыныс уйҙар үтеп китә. Ә Зәки ағай моңһоу ғына әйтеп ҡуя: "Ята шунда кеше ҡурҡытып".

Бүрегә бәйле ҡайһы бер һөйләүҙәр шаяртыу-алдауға бәйле. Миҫал өсөн һунарсы Әхтәм ағайҙы тыңлайыҡ әле: "Элек бүрене ат менән ҡыуып етеп, күсәк менән һуғып алғандар. Былайтып бүрене яланда ғына алып була. Ә урманда бер нисек тә булмай, сөнки бында яландағы һымаҡ иркенлек юҡ. Шуға мин бүрене һуғып алыуҙың икенсе юлын уйлап таптым. Хәҙер мин һунарға барғанда һул ҡулға ярты метрға аҙ генә етмәгән таяҡ тотоп алам. Ышаныслыраҡ булһын өсөн был таяҡтың башына саңғы таяғындағы һымаҡ бау әтмәләп алдым. Шул бауҙы ҡулға кейҙереп ҡуям. Ә уң ҡулға йәтеш кенә суҡмар алам. Бүре киле сыҡты икән, һул ҡулдағы таяҡты тешләтәм, ә уң ҡулдағы суҡмар менән - шалт тегенең башына! Һуҡҡан ыңғайы ситкә ырғыр кәрәк. Ҡаны сәсрәп, кейемде быратмаһын өсөн. Бер йылды мин ошолай һуғып (ошо урында ул күҙҙәрен ситкә төбәп, бармаҡтарын бөгә-бөгә шыбырлап ҡына һанай башлай) ете бүре алдым!"

**Әглӛм ШӘРИПОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР ТУРАҺЫНДА



### Унының уйланыуҙары

Ғәйшә һөйләгән хәл: "Бер төндө Аллаһтың Рәсүле: "Эй, Ғәйшә! Рөхсәт итһәң, мин был төндө Аллаһҡа ғибәҙәт итеү менән үткәрер инем",- тине. Уға: "Мин һинең менән бергә булырға яратам, шул уҡ ваҡытта һинә оҡшаған бөтә нәмәне лә яратам", -тинем.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ таң атҡансы намаҙ уҡый: "Шул хаҡ, аҡылы булғандар өсөн ғаләмдәрҙең һәм ерҙең яралтылыуында һәм көн менән төндөң алмашыныуында аят бар" (Ҡөрьән, 3:190). Ошо аятты уҡығандан һуң ул илай. Билал хәҙрәт (р.ғ.) иртәнге намаҙға килгәс, Бәйғәмбәргә (с.ғ.с.) өндәшә: "Эй, Аллаһ Рәсүле! Ни өсөн һин үҙеңә ауырлыҡ яһайһың? Аллаһы Тәғәлә һинең үткәндәге һәм киләсәктәге барлыҡ гонаһтарыңды ярлыҡаны бит". Бәйғәмбәр шулай тип яуаплай: "Мәрхәмәт итеүсе Аллаһы Тәғәләгә мин шул уҡ дәрәжәлә шөкөр итә белеүсе ҡол була алмайыммы ни?"

Ни өсөн һуң ул саҡта Аллаһ Рәсүле илаған? Үҙенең камил булмауы арҡаһында тейешле дәрәжәлә шөкөр итә белеү кимәлене етә алмауынан шикләнеп. Шулай булғас, камиллыҡ өлгөһө булған Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ниндәйҙер шәһүәтә эйәреүе, яҙыҡ эш ҡылыуы мөмкинме?

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ гонаһ яһамаҫ өсөн бөтә тыйыуҙарға шул тиклем ныҡ иғтибарлы булған, Хаҡ Тәғәләнең һәр әмеренә шул уҡ дәрәжәлә ныҡ буйһонған. Унының сафлығына, иманына күҙ һалғанда, бүтән бер ниндәй ҙә дәлилдәр эҙләргә кәрәкмәй.

Унының һымаҡ йәшәү рәүешен тағы кем генә алып бара алыр ине икән? Бик икеле. Намаҙҙы теүәл үтәүе, үҙенә талапсан булыуы, теләктәрен теҙгендә тотоуы. Унының тормошо тулыһынса тиерлек Аллаһҡа ғибәҙәт итеүгә арнала. Буш сағы булмаған да. Тормошо ғибәҙәтлек, намаҙ уҡыуҙан ғына ғибарәт түгел, әлбиттә. Ул нимә генә эшләһә лә, быны Аллаһҡа хеҙмәт итеүгә арнай (Әлхәмдүлилләһи).

Унының тураһында "иманлыларҙан да иманлы" тип әйтеү генә лә аҙ, унының иманлылығы һәм был донъя өсөн мөкиббән китмәүе икенсе һүҙҙән һәм сағыштырыуҙар талап итә.

### Изгелек эшләргә ынтылып тороуы

Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) мәсеттә йәмәғәт алдында намаҙ уҡырға керешә. Тик бер аҙҙан намаҙын өҙә лә, бик тулҡынланған килеш өйөнә табан йүнәлә. Шул тиклем борсолған, ҡаушаған ҡиәфәтен күреп, кешеләр, янғын сыҡманымы икән, тип уйлай. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) кире әйләнеп килә. Бөтәнләй тынысланған һәм намаҙын дауам итә. Намаҙҙан һуң сәхәбәләре уны нимә хафаға һалыуын һорай. Мөхәммәт Бәйғәмбәр (с.ғ.с.): "Намаҙҙан алдараҡ фәҡирҙәргә таратыр өсөн ризыҡ килтергәйнеләр. Мин уны өләшергә онотҡан да ҡуйғанмын. Намаҙ мәлендә шул иҫкә килеп төштө. Ғәйшәгә барып, саҙаҡа таратырға ҡушып килдем", - тип яуап бирә. Бына был, исмаһам, тәҡүәлек, иман! Шулай уҡ бәйғәмбәрлектең был донья менән бәйләнеше.

Ниндәйҙер ваҡытлыса әүрәткестәр, алдатҡыстар уны юлдан яҙлыҡтырырға тырышып ҡараған, ләкин Бәйғәмбәр ҡулы менән бер һелтәүҙә был алдатҡыстарҙы юҡ итә алған.

**(Дауамы бар).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### Иман йәшлекте ҡайтара

Икенсе Рәсәй ғалимына хатта аңдың дүртенсе торошо - "дауалау ғибәҙәте уяулығы" булыуын иҫбат итергә мөмкин була. Асыш авторы - В. М. Бехтерев исемендәге Санкт-Петербург психоневрологик ғилми-тикшеренеү институтының нейро- һәм психофизиология лабораторияһы етәксеһе, профессор Валерий Слезин. "Бик күп психиатрҙарға һәм неврологтарға ғибәҙәт ҡылғандан һуң күңел таҙарыуы, хатта ҡайһы берҙә дауалап булмаҫтай сирлеләрҙең дә һауығыуы яҡшы таныш, - ти доктор. - Бөйөк рус психиатры Владимир Бехтерев үҙенең пациенттары тураһында: "Был, әйҙә, дарыу ҡабул итһен, ә тегеһе руханиға барһын", - тигән. Ғибәҙәт ҡылғанда мейелә ниндәй үҙгәрештәр барғанын тәжрибәләр күрһәтә. Әлегә тиклем эшләгән мейенең өс төп фазаһы билдәләнә: тиҙ йоҡо, яй йоҡо һәм уяулыҡ. Был фазаларҙың һәр ҡайһыһына биотоктарҙың үҙ ритмы хас. Тәжрибә күрһәтеүенсә, ғибәҙәт ҡылғанда баш мейеһенең биотоктар ритмы шул тиклем йәйлана, уны бары тик "дауалау ғибәҙәте уяулығы" тип атарға мөмкин. Был һаләттә мейе, ғәмәлдә туҡтай: әүҙем уйлау эшмәкәрлеге туҡтай, һәм әлегә был раҫланмаһа ла, аң тәндән ситтә йәшәй башлай тиергә мөмкин".

Ғалим белдереүенсә, электроэнцефалографта феномен түбәндәгесә күренә. Уяу булғанда оло кешенең баш мейеһе биотоктарҙың альфа һәм бета- ритмдарын 8-30 герц йышлығында генерациялай. Тикшерелгән кешеләр ғибәҙәт ҡылғанда, биотоктар йышлығы 3 герцҡаса әкренәйә. Былдай яй ритмдар "дельта-ритмдар" тип атала һәм бары тик 2-3 айлыҡ сабыйҙарҙа ғына күҙәтелә. Ҡайһы берәүҙәрҙә энцефалограф бөтөнләй альфа- һәм бета- ритмдарҙың булмауын, бары тик дельта- ритмдар ғына булыуын күрһәтә. Нейрофизиология күҙлегенән ҡарағанда, ғибәҙәт ҡылыусылар балалыҡтан сыҡмай. Һәм был кешенең ниндәй диндә булыуына бәйле түгел. Юҡҡа ғына Инжилда: балалар кеүек булығыҙ һәм ҡотолорһоғоҙ, тиелмәгән. "Беҙҙенсә, ғибәҙәт ваҡытында мейе нейрондары араһындағы патологик бәйләнештәр боҙолоп, кеше сир тураһында уйлауҙан туҡтай, - ти доктор Слезин. - Ҡайһы бер ваҡытта был үлемесле сирлеләрҙең тулыһынса һауығыуына килтерә. Фәнгә хатта онкологиянан дауаланыуҙар билдәле, әммә был тема ентекле тикшереүҙе талап итә. Бары тик ысынлап иманып, ышанып, йөрәктән сығарып уҡырға кәрәк. Юҡһа дауалау һөҙөмтәһе булмаясаҡ".

Ә билдәле тикшеренеүсе Ален Бомбар шуны раҫлай: карап һәләкәткә осрағандан һуң диңгеҙҙә ҡалған кеше эсергә һыу булмағанлыҡтан йәки шторм һөҙөмтәһендә түгел, ә ҡурҡышынан һәләк була. Ул тәжрибәһен шулай нигеҙләй: ай буйы океанда һыуһыҙ һәм ризыҡһыҙ һалда йөҙә һәм ҡурҡыуын еңеүе һөҙөмтәһендә тере ҡала. Статистика буйынса, шул сәбәпле яман шеш менән сирләүсе диндарҙар атеистарға ҡарағанда биш йылға артығыраҡ йәшәй. Улар доға ярҙамында ҡурҡыуҙан азат була, донъяның ваҡытлы икәнен тоя, ысын ҡиммәттәрҙе аңлай һәм тынысланып, үҙенең иммунитетын күтәрә.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**

РӘХМӘТ ҺҮҘЕ

# МИНЕҢ АТАЙЫМ ДА...

## иң яҡшыһы ине

**Атайым тураһында күптән яҙырға уйлай инем. Миләүшә Ҡәһарманованың мәҡәләһе был ниәтемде тиҙләтте. Беҙҙең халыҡ әйткеһе килгәндә лә, тойғоларын да баҫырға ғәҙәтләнгән. Шул арҡала күпме һүҙҙәр әйтелмәй ҡала. Атайыма ла һуңлап булһа ла рәхмәт еткерергә ине.**

Атайым, Ишдәүләтов Нариман Ишдәүләт улы, күп һөйләмәҫ, тыныс холоҡло кеше булды. Китапты күп уҡыр ине. Саҡ ҡына буш ваҡыты булдымы, ҡулына китап тота һалыр ине. "Ағиҙел", "Роман-газета"-ларҙы алдырҙыҡ, китапханала ла ул уҡымаған китап ҡалмаған ине. Унының кеүек беҙ, 8 балаһы ла, китап уҡырға яратабыҙ. Мәктәп белеме менән генә булһа ла, заманы өсөн белемле кеше булды. Беҙҙең ауылда урта мәктәп ине, шунда завхоз булып эшләне. Һуңынан техникум бөткән кеше килгәс, леспромхоздың пилорамаһына эшкә сығып, таҡта бысты.

Оҫта ҡуллы, эште еренә еткереп эшләр ине. Әле лә үҙебеҙ ҙә, күрше-күлән дә атайым яһаған көйәнтәләр менән һыу ташыйбыҙ. Быйма төпләү, ауылдағы барлыҡ ағай-бабайҙарҙың сәсен алыу, ағас эштәренә бөтән күңелен биреп эшләр ине. Атайымдан бер ваҡыттала ҡаты, тупаҫ һүҙ ишетмәнек. Хәҙер үҙем 60-ҡа етеп килгәндә ирҙәргә, атайҙарға ҡарап, ике ҡуллап ҡолаҡты ҡапларҙай булыла. Урамда ла, магазинда ла балаларын һүгенеп әрләүҙән тартынмайҙар.

Атайымды иҫләгәндә, нишләптер, бесән мәлдәре хәтергә төшә башта. Быйна ул аяҡтарын кирә баҫып, бесән саба. Ҡуйы үлән тигеҙ рәт булып, бакуйға яғыла. Бакуй араһы тап-таҙа, бер генә үлән дә ҡалмай. Атайым артынан 17 йәшлек Хәниф ағайым төшкән. Унының артынан былтыр ныҡлап сабырға өйрәнгән 15 йәшлек апайым салғы һелтәй. Иң артта Хәләф ҡустым менән мин. Ҡустыға - 11, ә миңә - 13 йәш. Быйаса бесән йыйырға ғына йөрөй торғайным, быйыл үҙем ныҡышҡас, атайым салғы тотторҙо. Хәләф былтыр уҡ сабырға өйрәнгәйне. Мәрҙай саба ла, атайым, артына әйләнеп, беҙгә ҡарап тора. Янымa килеп, сабыр ғына өйрәтеп тә китә. Ҡыҙҙар араһында атайымдың яратҡан ҡыҙы мин булдым тип уйлайым. Нишләптер 5 ҡыҙы араһынан мине ныҙыраҡ яратҡандай тойола торғайны. Алдына ултыртып, тупылдатып һөйөүҙән түгел, бәлки, бәләкәс саҡтарҙа унының ла күберәк булғандыр. Йылы ҡарашы, мөнәсәбәтенән күнелем менән тоя инем. Киноға йә танцыға барыр булһаҡ, апайым мине һорарға ебәрә ине, миңә юҡ тимәйҙәр ине. Беҙҙең ҡайтҡанды атайым китап уҡып көтөп ултыра торғайны.

Ҡоролоҡ йылы, 1975 йыл ине шикелле. Үлән үҫмәне, ә бесән кәрәк. Беҙҙең сабынлыҡ ауылдан 6 саҡрым алыҫлыҡта. Сабынлыҡты ҡырып сабып бөттөк, ә бесән етмәй, ти атайым. Атайым ағайым менән ауылдан 15-20 саҡрым алыҫлыҡтағы бесәнлектәргә барып сабып ҡайтҡандар. Йыйырға апайым менән мине алып китте. Бесәнде көйәнгә һалдыҡ та, 5 саҡрымлыҡ юлда Мөхәмәт бабайҙың ҡыуышы бар, шунда йоҡларбыҙ, тип, күмәкләп атланыҡ. Атайым күп һөйләмәй, һирәк кенә асылып китә ине. Ә шул мәлдә ул һөйләне лә һөйләне. Ҡараңғы урманда өсәүләп кенә көлә-көлә һөйләшеп киләбеҙ. Атайымдың сыбыртҡыһы бар ине, шуны шартлатып ала-ала атлай. Ҡыуышҡа еткәс, беҙ шундуҡ йоҡлап киткәнбеҙ. Иртәгәһенә генә атайым нисек беҙҙе айыуҙан алып ҡасҡанын һөйләне. Айыу беҙ кәбән ҡуйған ваҡытта уҡ килгән булған һәм юл буйына оҙатып барған. Йә эт булып өргән тауыштар сығарған, йә һайыҡҡан булып шыҡырлаған. Ә атайым беҙгә, ана эт өрә, хәҙер барып етәбеҙ, тип әүрәткән. Беҙ йоҡлап ятҡанда атайым төн буйы ут яғып сыҡҡан.

Атайымдың әсәйемә мөнәсәбәте лә һоҡланырлыҡ ине. Мин уларҙың әрләшеп-тиргәшеп йөрөгәндәрен бер ҙә иҫләмәйем. Хистәрен күрһәтеп бармаһа ла, атайымдың күҙҙәренән, ҡылығынан уҡ әсәйемә ҡарата йылы, матур мөнәсәбәте күренеп тора ине. Әсәйем менән 49 йыл бергә татыу ғүмер иттеләр. Алтын туй үткәрәбеҙ тип йөрөгәндә, туйға 2 ай ҡалғас, атайыбыҙ ҡапыл ғына фани донъяларҙан китеп барҙы. Уға булған ошо йылы тойғоларҙы, матур һүҙҙәрҙе үҙенә әйтеп өлгөрмәнем тигән үкенес кенә ҡалды. Һәр кемгә үҙ атаһы һәйбәт кеүектер инде, тик уларға ошо рәхмәттәребеҙҙе ваҡытында әйтергә өйрәнәйек.

**Зөлфирә ҒӘЛИЕВА.**
**Межгорье ҡалаһы.**



## 11 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 11 февраля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 Премьера. "Наши люди" с Юлией Меньшовой. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Гадалка". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 "Познер". [16+]
1.00 Т/с "Отличница". [16+]
2.50 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.50 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Между нами девочками. Продолжение". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Наука 102. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Холостяк". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на баш. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Любовь, сбивающая с ног". [16+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.00 Спектакль "Белый пароход". [12+]**
**4.00 Х/ф "Любовь, сбивающая с ног". [16+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 12 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 12 февраля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 Премьера. "Наши люди" с Юлией Меньшовой. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Гадалка". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Афганистан". [16+]
1.00 Т/с "Отличница". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Между нами девочками. Продолжение". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.20 Хоккей. КХЛ. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**17.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Специальный репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Гонки по-итальянски". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Любовь на троих". [12+]**
**4.00 Х/ф "Гонки по-итальянски". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 13 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 13 февраля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 Премьера. "Наши люди" с Юлией Меньшовой. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Гадалка". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Афганистан". [16+]
1.00 Т/с "Отличница". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Между нами девочками. Продолжение". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Холостяк". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Последний шанс". [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Коварная любовь". [12+]**
**3.45 Х/ф "Последний шанс". [16+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 14 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 14 февраля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 Премьера. "Наши люди" с Юлией Меньшовой. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Гадалка". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 На ночь глядя. [16+]
1.00 Т/с "Отличница". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Между нами девочками. Продолжение". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.20 Хоккей. КХЛ. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**17.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Специальный репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Одержимость". [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**4.45 "Весело живем". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 15 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 15 февраля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 Премьера. "Наши люди" с Юлией Меньшовой. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 "Вечерний Ургант". [16+]
0.15 Ежегодная церемония вручения премии "Грэмми". [16+]
2.05 "Модный приговор". [6+]
3.00 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]
4.45 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Петросян-шоу". [16+]
23.15 "Выход в люди". [12+]
0.35 Х/ф "Подмена в один миг". [12+]
4.05 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 "Весело живем". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Холостяк". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Республика Live. [12+]**
**19.30 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Замандаш. [12+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Жестокий ринг". [12+]**
**1.45 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]**
**3.30 Башҡорттар. [6+]**
**4.00 "Заповедники РФ". [12+]**
**4.30 Х/ф "Жестокий ринг". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 16 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10 Х/ф "31 июня". [0+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "31 июня". [0+]
7.55 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.45 М/с "Смешарики. Новые приключения". [0+]
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Николай Еременко. На разрыв сердца". К юбилею актера. [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Идеальный ремонт". [6+]
13.20 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.30 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Премьера. "КВН-2019. Сочи". [16+]
1.10 Х/ф "Цвет кофе с молоком". [16+]
2.55 "Модный приговор". [6+]
3.50 "Мужское / Женское". [16+]
4.45 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Х/ф "Злая шутка". [12+]
13.40 Х/ф "Девушка с глазами цвета неба". [12+]
17.30 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 "Один в один. Народный сезон". [12+]
23.15 Х/ф "Ожидается ураганный ветер". [12+]
3.25 "Выход в люди". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Богатырша". [6+]**
**9.45 "Большой чемодан. [6+]**
**10.30 Следопыт. [12+]**
**10.45 Преград.net. [6+]**
**11.00 Юные виртуозы Уфы. [0+]**
**11.15 "Книга сказок". [0+]**
**11.30 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.50 Хоккей. КХЛ. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**15.00 "Дарю песню. [12+]**
**17.00 Колесо времени. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Д/ф "Аскынская ледяная пещера". [12+]**
**19.30 Моя вершина. [12+]**
**19.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.45 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Последний раз, когда я видел Париж". [12+]**
**1.15 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.00 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**4.30 Х/ф "Последний раз, когда я видел Париж". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 17 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.35 Х/ф "Я объявляю вам войну". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Я объявляю вам войну". [12+]
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код". [0+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Премьера. "Жизнь других". [12+]
11.10 "Наедине со всеми". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Наедине со всеми". [16+]
13.10 Х/ф "Белые росы". [12+]
14.55 Д/ф "Тамара Синявская. Созвездие любви". [12+]
15.50 "Три аккорда". [16+]
17.45 Премьера. "Главная роль". [12+]
19.30 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Дети XXI века. [12+]
23.45 Х/ф Премьера. "Моя семья тебя уже обожает". [16+]
1.20 Х/ф "Судебное обвинение Кейси Энтони". [16+]
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
4.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

4.30 Т/с "Сваты". [12+]
6.35 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.25 "Далекие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
13.00 Смеяться разрешается.
16.00 Х/ф "Единственная радость". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
1.25 "Далекие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Күстәнәс. [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Перекличка". [6+]**
**10.30 Йырлы кәрәҙ. [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.00 Д/ф "Аскынская ледяная пещера". [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [6+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Концерт народного артиста РБ Абдуллы Султанова. [12+]**
**19.00 Лидеры региона. [12+]**
**19.30 Әлләсе... [6+]**
**20.15 "Теге өсәү!" [12+]**
**20.45 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Х/ф "Чужие". [18+]**
**1.00 Спектакль "Женитьба". [12+]**
**3.30 Х/ф "Чужие". [18+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЫЛ НИНДӘЙ ЫРЫУ ВӘКИЛДӘРЕ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**4-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡариҙел. Асҡын. Грейдер. Ҡеүә. Алабай. Шәжәрә. Игәт. Нур. Арғаяш. Батша. Сафин. Яран. Һөйәнтүҙ. Ыумас. Фа. Ваба. Апас. Диор. Аҡыл. Һоло. Найк.

**Вертикаль буйынса:** Шәйбәков. Ҡужғытыусы. Аҡһым. Гәрәбә. Аждаһа. Сәй. Раабе. Ҡашҡа. Фараон. Дихин. Трап. Лян. Рапира. Үҙенсәлек. Ғаязов. Бутҡа. Йомош. Нужа.

**Сканворд һорауына яуап:**

| I | II | III | IV | V |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЛАЛЫЛАРҒА

**2019 йылдың 1 февраленән әсәлек һәм балалыҡ менән бәйле пособиелар индексацияланды. Ҡарарға Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев ҡул ҡуйҙы.**

Быйыл уларҙың күләме 4,3 процентҡа артты. Баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеның минималь күләме тәүге сабый өсөн 3769,07 һум була. Икенсе һәм артабанғы балалар өсөн - 7538,12 һум. Бала тыуғас ата-әсәгә бер тапҡыр бирелә торған пособие 20 101,69 һум тәшкил итә. Йөклөлөктөң тәүге айҙарында уҡ медицина ойошмаларында иҫәпкә торған ҡатын-ҡыҙҙарға бер тапҡыр бирелә торған пособие 753,81 һумға тиклем артты. Бала тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеның, 2019 йылдың 1 ғинуарынан тәғәйенләнгән пособиеларға сикке сумма календарь ай өсөн 26 152,27 һум тәшкил итә. Бынан тыш, 2019 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме артыуға бәйле рәсми рәүештә эшкә урынлашҡан граждандарға тәүге баланы тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособие республикабыҙҙа 5188,80 һумдан түбән булмаҫҡа тейеш. Ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме 11 280 һум тәшкил итте.

# ТАШЛАМА АЛЫУСЫЛАРҒА

**1 февралдән федераль льготалыларға айлыҡ аҡсалата түләүҙәр күләме 4,3 процентҡа индексациялана, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә.**

Социаль түләүҙәрҙе арттырыу Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға һәм инвалидтарға, хәрби хәрәкәттәр ветерандарына, блокадалы Ленинградта йәшәүселәргә, һәләк булған (үлгән) һуғыш инвалидтарының ғаилә ағзаларына, фашист концлагерҙары тотҡондарына, I, II, III төркөм инвалидтарына һәм инвалид балаларға, шулай уҡ радиацияға дусар булғандарға ҡағыла. "Пенсия фонды идаралыҡтары Башҡортостандың район-ҡалаларында 318 мең кешенең айлыҡ аҡсалата түләүҙәрен ҡайтанан иҫәпләне. Февралдә улар түләүҙәрҙе арттырылған күләмдә алырға тейеш", - тип белдерҙе Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров. Уның һүҙҙәренсә, бер үк ваҡытта федераль льготалыларға социаль хеҙмәттәр йыйылмаһын күрһәтеүгә йүнәлтелгән аҡсаның суммаһы 1,043-кә арта.1 февралдән социаль хеҙмәттәр йыйылмаһы 1121,1 һум тәшкил итә. Шуның 863,75 һумы - бушлай дарыуҙар алыу, 133,62 һумы дауахана-курорт дауалауы өсөн ҡаралған. Ҡалған 124,05 һумы - ҡала яны тимер юл транспортында бушлай йөрөүгә, шулай уҡ халыҡ-ара транспортта дауалау урынына барыуға һәм кире ҡайтыуға.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (6) дүшәмбе | 7:19 | 8:49 | 13:30 | 16:42 | 18:12 | 19:42 |
| 12 (7) шишәмбе | 7:17 | 8:47 | 13:30 | 16:44 | 18:14 | 19:44 |
| 13 (8) шаршамбы | 7:15 | 8:45 | 13:30 | 16:46 | 18:16 | 19:46 |
| 14 (9) кесе йома | 7:13 | 8:43 | 13:30 | 16:48 | 18:18 | 19:48 |
| 15 (10) йома | 7:11 | 8:41 | 13:30 | 16:50 | 18:20 | 19:50 |
| 16 (11) шәмбе | 7:09 | 8:39 | 13:30 | 16:52 | 18:22 | 19:52 |
| 17 (12) йәкшәмбе | 7:06 | 8:36 | 13:30 | 16:54 | 18:24 | 19:54 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 февраль "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

**9 февраль "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), драма 16+

**10 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**12 февраль "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**13 февраль "Февраль. Буран..."** (З. Бураҡаева), шағир иленә сәйәхәт 12+

**14 февраль "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт 12+

**15 февраль "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 февраль "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

**13 февраль "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), комедия 12+

**15 февраль "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**9 февраль "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова), 12.00, 14.00 0+

**10 февраль "Красная шапочка"** (Ш. Перро), 12.00, 14.00 0+

**15 февраль "Мустай Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин), спектакль-портрет. Башлана 18.00 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**15 февраль "Әллә ғашиҡ, әллә ғишыҡ..."** концерты филармонияның ижади ғаиләләренә бағышлана 6+

✓ *Алда барғандар тураһында насар фекер йөрөтмә, иҫеңдә тот: һинең артыңдан килеүселәр ҙә бар бит.*

*(Борис Ручьев).*



ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ



# ИЛ АҒАҺЫ

*Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа бағышлайым*

Ул йылды ла февраль иртәһендә
Буран өрҙө микән һалҡын тын?
Күктә яңы йондоҙ ҡалҡты микән,
Бөйөк улы тыуғас халҡымдың?

Атай-әсәй ифрат шатланғандыр,
Туптай ғына малай тыуғанға.
Ниндәй генә яҙмыш юрағандыр,
Төргән саҡта ап - аҡ юрғанға?..

Бөйөк улы ил ағаһы булып,
Яулап алды халҡы күңелен.
Сал имәндәй бөгөн баҫып тора,
Халҡы һөйөүенә күмелеп.

Һәр бер башҡорт Һеҙгә сәләм бирә,
Уй-хистәрен бөгөн тыймайҙар...
Һеҙгә булған халыҡ мөхәббәте
Һүҙҙәр ҡалыбына һыймайҙар.

Йылдар үткән һайын сағыуыраҡ
Һеҙ башҡарған эштәр сауабы.
Һеҙҙең тормош - үҙе бер батырлыҡ,
Мәңгелек дан булһын яуабы.

Тиңдәр араһында тиң иттегеҙ
Күпте күргән башҡорт илемде.
Бөйөк державаға юл ҡуймайса,
Юҡ итергә тыуған телемде.

Башҡорт халҡын
бер ҡәүемгә туплап,
Ҡулға бөйөк маҡсат бирҙегеҙ.
Илгә, телгә хужа булығыҙ, тип,
Алдан яуға барып керҙегеҙ...

Яңы һулыш өрөп башҡорт ерен
Юғалыуҙан йолоп ҡалдығыҙ,
Шунан алып башҡорт рухы илдә
Ҡеүәтле һәм ең(е)леп ҡалғыһыҙ.

Рәхмәт илгә тоғро ҡалған өсөн,
Аҡыл өсөн, йөрәк, хис өсөн...
Хаҡлыҡ тиеп, башҡорт халҡы тиеп,
Йәлләмәйсә түккән көс өсөн.

Ил ағаһы! Беҙҙең уҡытыусы!
Һүҙ бирәбеҙ ҡайнар йөрәктән.
Башҡорт иле, башҡорт теле өсөн,
Халҡыбыҙҙың яҡты көнө өсөн,
Бағышларбыҙ йәнде, кәрәкһә.

... Халҡымдың бер бөйөк улы булып,
Тыуғанһығыҙ буран айында.
Ил ағаһы, аҡһаҡалы булып,
Оҙаҡ йәшәгеҙ һеҙ тағын да!

**Сәкинә ТОТМАНОВА,**
**Рәми Ғәрипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия - интернатының математика уҡытыусыһы.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Хөрмәтле Мортаза Ғөбәйҙулла улы адресына яуған барлыҡ ҡотлау һүҙҙәренә ҡушылабыҙ. Башҡортостаныбыҙ хаҡына башҡарған эштәрегеҙ мең мәртәбәле сауап булып ҡайтһын. Изгелектәр, рух көсө, сәләмәтлек теләйбеҙ Һеҙгә.**

**"Киске Өфөләр".**

СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ.

# БЕҘҘЕКЕЛӘР - МӘСКӘҮҘӘ

**Мәскәүҙә М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының гастролдәре башланды.**



Башҡорт театры Мәскәүгә беренсе тапҡыр ғына килмәй. Әммә быйылғы йыл уның өсөн бик үҙенсәлекле - театр үҙенең йөҙ йыллығы йылында Рәсәй һәм башҡа илдәр буйлап бай гастроль турын Мәскәү спектаклдәренән башланы. Мәскәүҙәр һәм унда йәшәгән яҡташтарыбыҙ өсөн ул үҙенең иң шәп спектаклдәрен - 2018 йыл йомғаҡтары буйынса "Алтын битлек" театр премияһына тәҡдим ителгән "Зөләйха күҙҙәрен аса" драмаһын, Мөхәмәтша Буранғолов пьесаһы буйынса "Шәүрәкәй" музыкаль комедияһын, Айгиз Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса "Хыялға ҡаршы" спектаклен, шулай уҡ тотош коллектив ҡатнашлығында гала-тамаша алып килде. Театрҙың беренсе спектаклен "Зөләйха күҙҙәрен аса" китабы авторы Гүзәл Яхина ла ҡараны. Ул башҡорт театрының спектаклен юғары баһаланы. "Тәүҙә Мәскәү тамашасыһы беҙҙең инсценировканы нисек ҡабул итер тип борсолдоҡ, сөнки әле йәмғиәттә "Зөләйха күҙҙәрен аса" китабы тураһында әүҙем фекер алышыу бара, уның буйынса сериал төшөрөлә, һәм күп кенә тамашасылар, аңлауыбыҙса, ошо әҫәрҙең нисек сәхнәләштерелгәнен ҡарарға һәм баһаларға килде. Мәскәү театры талаптарынан сығып, декорацияларҙы ла бер аҙ үҙгәрттек, ҡайһы бер күренештәрҙе тамашасылар залынан алдыҡ. Шуға ҡарамаҫтан, пьеса барышында, айырыуса икенсе бүлектә, тамашасылар залы менән бәйләнеш булдырылыуын тойҙоҡ һәм уларҙың күңеленә үтеп инеүен аңланыҡ. Был беҙҙе илһамландырҙы", - тип һөйләне Зөләйха ролен башҡарған Римма Ҡаһарманова.

Спектаклдән һуң, гастролдәрҙең икенсе көнөндә, башҡорт театры етәкселеге һәм ижади коллективы Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле - республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Роман Симандуев менән осрашты.

# КӘҢӘШЛЕ ЭШ...

**Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа "Башҡортостан Республикаһында театр эшмәкәрлеген ҡануни яҡтан көйләү проблемалары тураһында" тигән темаға түңәрәк ҡор ойошторолдо. Сарала театрҙар һәм ойошмалар етәкселәре үҙҙәрен борсоған мәсьәләләрҙе тикшерҙе.**

Сығыш яһаусыларҙың барыһы ла кадрҙар мәсьәләһенә ҡағылды. Рус академия театры директоры Михаил Рабинович республикала тауыш режиссеры, тауыш операторы, бутафор, гример кеүек театр һөнәрҙәренә ҡытлыҡ булыуын билдәләне, режиссер һөнәренең дә юғалып барыуын әйтте. Республика театрҙарын кадрҙар менән төп тәьмин итеүсе - З. Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институты. Был - федераль юғары уҡыу йорто, театр факультетында бюджет урындары һаны йылдан-йыл кәмей. Әгәр элек бер йылда 20-25 актер һәм режиссер әҙерләп сығарылһа, хәҙер курста актерҙар өсөн алты бюджет урыны, ә режиссер өсөн бирәү ҙә ҡаралмаған. Коммерция нигеҙендә уҡырға теләгәндәр йылына 180 мең түләй. "Өфө дәүләт сәнғәт институты - уҡытыу өс телдә алып барылған үҙенсәлекле вуз. Кафедрабыҙҙы бергәләп һаҡлап ҡалырға кәрәк. Был - бик етди мәсьәлә, бер нисә йылдан башҡорт театрҙары өсөн актерҙар табып булмаҫ", - тине актер оҫталығы һәм режиссура кафедраһы мөдире Таңсулпан Бабичева. Башҡортостандың Театр эшмәкәрҙәре союзы рәйесе Әхтәм Абушахманов театр цехында пенсияның аҙ булыуына һәм театрҙарҙа контракт системаһын индереүгә бәйле борсолоуын белдерҙе. Түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар актерҙарҙың Рәсәй кимәлендәге исемдәр алыуына квоталарҙың ҡатмарлы булыуы, драма әҫәрҙәре етмәү мәсьәләләрен дә күтәрҙе. "Республиканың һәр театры репертуар төҙөгәндә милли драматургияның ярлы булыуына бәйле ҡыйынлыҡтар кисерә. Мостай Кәрим, Әсғәт Мирзаһитов, Әнғәм Атнабаев, Нәжиб Асанбаев, Флорид Бүләков кеүек драматургтар ижад иткән алтын осор бар ине", - тине Олег Ханов.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪЫҢ КҮП БУЛҺА,

## дошманың үҙе үлер

Бала үҫтерһәң, буйын ғына түгел, аҡылын да үҫтер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин киләсәк менән ҡыҙыҡһынам, сөнки үҙемдең ҡалған бар ғүмеремде унда үткәрергә йыйынам.

**(Чарлз Ф. Кеттерлинг).**

Һәр ҡатын-ҡыҙ өсөн ике генә фекер бар: үҙенеке һәм... дөрөҫ булмағаны.

**(Билдәһеҙ автор).**

Бәләгә ҡалғанда иһә ҡурҡыныс ҡарарҙар ҡабул итмәй сараң юҡ.

**(Сенека).**

Тәрбиәләү парадоксы шул: тәрбиәгә уға мохтаж булмағандар тиҙерәк бирелә.

**(Фазил Искәндәр).**

Ысын ял - ул байрам итеү түгел, ә шөғөлдәрҙе генә алыштырыу.

**(И. Сеченов).**

Тарихтан ала алған берҙән-бер һабаҡ шунда: кешеләр тарихтан бер ниндәй һабаҡ та алмай.

**(Бернард Шоу).**

Алда барғандар тураһында насар фекер йөрөтмә, иҫеңдә тот: һинең артыңдан килеүселәр ҙә бар бит.

**(Борис Ручьев).**

Идея ҡоло булыу - ул идеяны ла, үҙеңде лә һәләк итеү.

**(Авентус).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер көнсығыш байына ҡурҡыныс төш инә, имеш, уның бер-бер артлы бөтә тештәре төшөп бөткән. Бик ныҡ тулҡынланып, ул эргәһенә төш юраусыны саҡырып ала. Тегенеһе уны тыңлағандан һуң, шулай ти: "Батшам, мин һиңә насар хәбәр әйтергә тейешмен. Һин бер-бер артлы бөтә яҡын кешеләреңде юғалтасаҡһың". Был һүҙҙәр батшаның асыуын килтерә. Ул төш юраусыны төрмәгә ябырға ҡуша һәм үҙенә икенсе бер төш юраусыны саҡырып ала. Быныһы, төш тураһында тыңлағас, шулай ти: "Яҡшы хәбәр, батшам! Һин үҙеңдең барлыҡ яҡын кешеләреңдән дә оҙағыраҡ йәшәйәсәкһең". Батша был хәбәргә ныҡ ҡыуана һәм төш юраусыны йомарт бүләкләй. Батшаның хеҙмәтселәре был хәлгә ғәжәпләнеп икенсе төш юраусынан: "Һеҙ бит хакимға тәүге төш юраусы менән бер үк хәбәрҙе еткерҙегеҙ, ни өсөн ул хөкөм ителде, ә һин бүләкләндең?" - тип һораған. "Эйе, беҙ был төштө бер төрлө юраныҡ. Ләкин хәбәрҙең ниндәй булыуы мөһим түгел, уны нисек итеп еткереүең мөһим бит", - тип яуап ҡайтарған төш юраусы..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 8 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 99